ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 июль (майай) 2021
№29 (967)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Фольклориада...**
ергә кот ҡайтарҙы



6

**Ноғман Сөләймән улы Мусин -**



әҙәбиәтебеҙҙең мәңгелек урманы 8-9

**Ғүмерҙең иң бәхетле мәле,**
тип баһаланы ҡунаҡтар был сараны



11

**Ҡорбан ғәйете мөбәрәк булһын**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Марк Твен "Үлем түшәгендә ятҡанда кеше ике әйбер тураһында үкенә: аҙ яратҡаны һәм аҙ сәйәхәт иткәне өсөн", тигән. Сәйәхәттәр буйынса үкенестәр юҡмы, әллә ул һаман хыялда ғынамы?

***Гөлсирә ХӘМИҘУЛЛИНА, педагогия хеҙмәте ветераны, Ейәнсура районы:*** Беҙ бик һуң сәйәхәт итә башланыҡ. Тәүҙә улдарыбыҙҙы, улар беҙҙең өсәү, аяҡҡа баҫтырайыҡ тип, алһыҙ-ялһыҙ эшләнелде. Мин - уҡытыусы, йәмғәтем төҙөләш ойошмаһында бил бөктө. Педагогтарға рәхәт, улар йәйен өс ай буйы ял итә, тигән фекер нығынған йәмғиәттә. Уны мәғариф системаһында эшләп ҡарамаған кеше генә әйткәндер ул. Мин, мәҫәлән, бер ҡасан да айлап ял итә алманым. Үкенмәйем, әлбиттә, тырышып эшләнем дә, ваҡытында хөрмәтен дә күрҙем.

Бергә йәшәүебеҙҙең утыҙ йыллығына балалар Төркиәгә юллама бүләк иткәйне. Шулай итеп, беренсе тапҡыр самолетта осорға, диңгеҙҙә һыу инергә насип булды. Ял иремә лә бик оҡшаны. Урта диңгеҙ ярында йөрөгәндә бер-беребеҙгә һүҙ бирештек: иҫән-һау булһаҡ, йыл һайын ошонда килергә! Һүҙебеҙҙә торҙоҡ, дүрт йыл рәттән Төркиәгә барҙыҡ. Мәрмәр, Ҡара һәм Урта диңгеҙҙә булдыҡ, уларҙың һыуы ла, һауаһы ла икебеҙгә лә килеште. Йәш саҡта ялдың нимә икәнлеген дә белмәгән ике "трудоголик" хәҙер отпускынан сығыу менән эш хаҡыбыҙҙың бер өлөшөн сәйәхәткә ҡалдырып, йыйып барабыҙ. Бер йылда тейешле сумма йыйыла.

Хаҡлы ялға сыҡҡас та сәйәхәт итеүебеҙҙе дауам итәбеҙ. Һуңғы биш йылда айырыуса Башҡортостандың тәбиғәт ҡомартҡылары урынлашҡан төбәктәрендә ял итергә ғәҙәтләнеп алдыҡ. Республиканың һәр бер районында тиерлек бар һаулыҡты нығыта, әүҙем ял итә торған урындар. Рәсәй биләмәһендә ҙур танылыу яулаған һәм иң билдәле биш мәмерйә рейтингына ингән Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһендә йыл һайын булабыҙ. Тау тоҡомдарынан торған иң ҙур, иң матур, тәүтормош сәнғәте ҡомартҡыларын һаҡлаған иҫ киткес мәмерйәне быға тиклем һанламауыбыҙға оят булып китә. Шүлгәнташтан йөрөп ҡайтҡандан һуң башҡорт халҡының мәшһүр эпосы "Урал батыр"ҙы уҡып сығып, дөрөҫөрәге өйрәнеп, мәғәнәһенә төшөнөп, шул уҡ йылды йәнә бер тапҡыр халҡыбыҙҙың традицияларына, ышаныуҙарына, һынамыштарына, легендаларына бәйле мәмерйәгә юлландыҡ. Тап ошо тәбиғәт ҡомартҡыһы янында ҡунып, Йылҡысыҡҡан йәки Шүлгән күлендә йыуынып ҡайтҡандан һуң минең аллергик йүтәлем бөттө, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ, моғайын.

Мәләүез районында Нөгөш һыуһаҡлағысы буйында урынлашҡан ял комплекстарында ла булдыҡ. Яһалма диңгеҙ иҫ киткес матур тәбиғәт мөйөшөндә урынлашҡан. Әбйәлил районындағы "Яҡтыкүл" санаторийы ла оҡшаны, Белоретта "Ассы"ла ла һаулыҡты нығыттыҡ. Ғафури районында "Красноусол" шифаханаһы ғына әлегә беҙҙең "кеҫә"гә тура килмәй, ҡиммәтерәк. Ғөмүмән, республикала шифаханаларҙа сәләмәтлекте нығытыу сит илгә сығыуға ҡарағанда күпкә ҡиммәт икәнлеге иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Башҡортостанда тыуып үҫкәндәргә аҙыраҡ ташлама булһа, әлбиттә, ял итергә теләүселәр күберәк һәм шулай ғәҙелерәк тә булыр ине.

*АФАРИН!*

# РУХ АТЫБЫҘ...
## һәйкәл булып ҡалҡты



**Тотош Ер шарының 37 иленән мендән ашыу артистарын Рәсәй уртаһына йыйып алған VI Бөтә донья фольклориадаһы саралары сиктәрендә мәшһүр эпосыбыҙ "Урал батыр"ҙа телгә алынған, үҙенә тотош эпос бағышланған, улай ғына ла түгел, үҙенә эйәреп артынан өйөр-өйөр йылҡы сыҡҡан Йылҡысыҡҡан күле эргәһендә эпосыбыҙ геройы буҙ толпарға - Аҡбуҙатҡа һәйкәл асылды.**

(Дауамы 16-сы биттә).

12+

✓ Афған һуғышына кем әмер биргән? Ә шул бәрелештә йәшеренеп өлгөрмәй ҡалған, һис бер ҡоралһыҙ күпме тыныс кешенең - ҡарт-ҡоро, бала сағаның үлгәнен кем һанаған? Былар - барыһы ла әҙәм балаһының атҡарған эштәре…



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Марк Твен "Үлем тушәгендә ятканда кеше ике әйбер тураһында укенә: аҙ яратканы һәм аҙ сәйәхәт иткәне өсөн", тигән. Сәйәхәттәр буйынса укенестәр юкмы, әллә ул һаман хыялда ғынамы?**

***Сәйфулла ӘМИРОВ, хеҙмәт ветераны, Мәләүез районы:*** Мин бына биш йылға яҡын хаҡлы ялдамын. Эшләгән ваҡыттағы кеүек сираттағы отпускыны көткән мәлдәр ҙә, әүҙем ял итергә ине тигән теләктәр ҙә артта ҡалды. Шулай ҙа хыялдарым бар әле.

Йома кис форсат булғанда беренсе каналда барған "Мөғжизәләр яланы" шоуын ҡарарға яратам. Шунда ҡайһы осраҡта призға Санкт-Петербургҡа сәйәхәткә путевка сыға. Мин ул уйынсыны бик бәхетле кеше тип иҫәпләйем, сөнки бына дүрт тиҫтәнән ашыу йыл ошо гүзәл ҡалаға барып ҡайтырға хыялланам. Тик һәр ваҡыт төрлө сәбәп менән сәфәрем кисектерелә килә.

Дөрөҫ, йәш саҡта илебеҙҙең мәҙәни баш ҡалаһын күреү бәхете тейҙе миңә, шуға ла уны һағынам. Уҡыу йортон тамамлағас, Мәскәү өлкәһе Тучково ҡалаһына эшкә ебәрҙеләр, әрмегә бармайынса унда ҡалыу мөмкинлеге лә бар ине. Шулай ҙа һалдат шинелен кейеү теләге көслөрәк булды. Ленинград ҡалаһына эләктем, төҙөлөш батальонына. Ике-өс ай ҙа уҙманы, мине мастер итеп күсерҙеләр, ҡала буйлап иркен йөрөй торған йүнәлтмә лә бирҙеләр. Кәрәкле объектҡа, матур-матур боронғо биналарҙы ҡарай-ҡарай, ҡала транспортында йөрөнөм. Ике йыл эсендә хәрби часть ойошторған бер экскурсиянан да ҡалманым. Иң тәүҙә Петергофта булдым, уның Йәйге баҡсаһы матурлығы бөгөнгөләй хәтеремдә. "Тормош юлын"а ике тапҡыр сәйәхәт ҡылдым, сөнки уның мәғәнәһен, йөкмәткеһен бер күреүҙә генә ҡарап бөтөү, аңлау мөмкин түгел.

Легендар крейсер "Аврора"ға ла бер нисә тапҡыр барыуҙы хуп күрҙем, мине уның экипажы батырлығынан тыш, конструкцияһы нығыраҡ һоҡландырҙы. Авторҙары төҙөлөшө буйынса бик оригиналь ҡарар ҡабул иткән. Эрмитажда ла бер нисә тапҡыр булырға тура килде, ә инде Ҡышҡы һарай алдында булғанда Октябрь революцияһы тураһындағы фильмдарҙа күргән матростарҙың, һалдаттарҙың нисек уның ҡапҡаһын асып ингәндәрен күҙ алдына килтерә торғайным. Ә бына мин бармаған музейҙар һирәк ҡалғандыр. Кунст-камераны электән ишетеп белһәм дә унан бик ауыр тойғо менән сыҡтым һәм СССР халыҡтарының милли музейына барған саҡта унда башҡа инмәнем. Хәрби-диңгеҙ флоты музейын ике барғанда ҡарап сығыуға ирештем, сөнки уның экспонаттары шул тиклем бай һәм йөкмәткеле, уны тулыһынса ҡарағы килеп тора. Әйтерһең дә, Ватан флоты өлгөләрен ошо музей өсөн махсус рәүештә өс быуат буйы йыйып барғандар. Бөйөк Ватан һуғышы осорон урамдағы яҙыуҙар ҙа иҫкә төшөрөп тора. "Урамдың был яғынан йөрөү бомба ташлағанда хәүефле" тигән яҙыуҙар блокада осоронан ҡалған. Ә блокада музейын тыныс ҡына ҡарау мөмкин түгел, унда барып инеү менән сирена тауышын ишетәһең, йөрәк үҙенән-үҙе шомлана башлай. Урамда тыныс тормош икәнен һуңынан ғына саҡ аңлап ҡалаһың. Аслыҡтан вафат булған ун өс йәшлек ҡыҙҙың көндәлеген тыныс ҡына уҡыу мөмкин түгел, унда яҙылған һүҙҙәр иҫкә төшһә, бөгөн дә күңел тетрәнеп китә.

Сал тарихлы Питер ҡалаһында (ул осорҙа Ленинградта) иң яҡыны Исаакий ҡорамы булды, мин бөгөн дә уны һағынам. Ул хатта Петр I ҡуйылған һәйкәлдән дә яҡынырaҡ. Бына ошо ҡорам йыш ҡына төшөмә инә, үҙенә саҡыра. Бына ошоларҙы булһа ла күрергә барыр инем мин боронғо ҡалаға.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘҘӘМ ЙӘНЕН ҠЫЙЫУСЫНЫҢ…

## иманы ла, дине лә юҡ

**Ҡаҙан ҡалаһы мәктәптәренең береһендә быйыл яҙ булған хәл Рәсәйҙә генә түгел, ә бөтә донъяны тетрәтте. Енәйәтсе егеттең үҙен "мин - Алла" тип интернет селтәрендә иғлан итеүе, "биосүп-сар" төшөнсәһе хаҡында фекер йөрөтөүе һәр нормаль кешене уйға һалырлыҡ. Уйланмаҫ ерҙән уйланырһың…**

Шундай осраҡтар килеп тыуһа, гәҙәттә, ил тормошоноң теге йәки был өлкәһендәге етешһеҙлектәр хаҡында һүҙ алып барырға тырышалар. Фажиғәгә килтереүсе сәбәптәрҙе төрлө тарафтарҙан эҙләп табып, һанай торғас, ахырҙа, әлеге енәйәтте атҡарыусы шәхес беҙҙең алда ниндәйҙер кимәлдә бихисап проблемалары булған дәүләт системаһының ҡорбаны һымаҡ ҡына булып килеп баҫа... Берәүҙәр мәктәптә эшләгән һаҡсыларҙың үҙ эштәренә илкеһалҡы ҡарауы, республика, хатта Рәсәй мәғариф етәкселәренең нимәнелер күҙ уңынан ысҡындырыуы хаҡында фекер алыша. Икенселәр, бәғзе бер уҡытыусыларҙың балаларҙы кәмһетеү осраҡтарын иҫләп, шул турала һүҙ ҡуйырта. Әлеге "меҫкен" егетте лә мәктәптә уҡыған сағында ҡыйырһытҡылағандар, йәнәһе. Өсөнсөләр һуңғы йылдарҙа интернет селтәрендә тулған һәр төрлө зарарлы мәғлүмәттәрҙең шауҡымы тураһында һөйләй. Илдә һунарсыларға мылтыҡ һатыу системаһын үҙгәртеп ҡорорға (егерме биш йәштән һуң ғына ҡорал тоторға рөхсәт итергә) тәҡдим иткәндәр ҙә бар. Кемдер ғәйептең ниндәйҙер бер өлөшөн енәйәтсенең психологик яҡтан һау-сәләмәт булыуы хаҡында справка яҙып биргән табипҡа япһарыуға ла ҡаршы түгел. Хатта 2001 йылдың 11 сентябрендә донъяға килгән Илназдың 2021 йылдың 11 майында ҡылған енәйәтенең ниндәйҙер "сакраль һандар" тәьҫире менән бәйле булыуы хаҡында фаразлаусылар ҙа бар. Ә инде ҡайһы берәүҙәр совет мәктәптәрендәге тәртипте һағына...

Ил буйлап йөрөгән бына шундай фекер төрлөлөгөн һанай башлаһаң, уның осо-ҡырыйына сығып булмай. Минең менән ризалашмаусыларҙың да күп булыуында шигем юҡ, әммә, ныҡлы инаныуымса, бына ошо фажиғәлә инде буйтым балиғ булған әлеге Илназ Ғәләүиев тик үҙе генә ғәйепле! Уның менән бер үк шарттарҙа үҫкән, балалар баҡсаһына йөрөгән, бер дөйөм программа буйынса мәктәптә уҡыған балалар барыһы ла (йә күптәре) "үлтереүсе" булып китмәгән дә баһа! Әлеге Илназдың синыфташтары араһында бөгөнгө көндә һәр төрлө уҡыу йорттарында белем алыусы, йә берәй ерҙә тир түгеп эшләп йөрөүсе йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар булыуында шигем юҡ. Синыфташының бындай ҡылығы, моғайын, уларҙың да һәммәһенең "башына һыймай". Башҡа күпселек һымаҡ уҡ, һис ғәйепһеҙ туғыҙ кешенең ғүмере өҙөлөүенә улар ҙа ҡайғырыша...

Бына шундай кеше үлтереүселәр бик борондан була килгән бит. Мәҫәлән, атабыҙ Әҙәм ғәләйһис-сәләмдең Кабил исемле улы үҙенең ниндәйҙер шәхси проблемаһын хәл итеү маҡсатында бер туған ҡустыһы Һабилды үлтерә. Ер йөҙөндәге иң беренсе кеше ҡанын ҡойоусы Кабил хаҡында ишетмәгәндәр йә иһә быға ышанмағандар ҙа барҙыр. Муса бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм дәүерендә йәшәгән Фирғәүен хаҡында кем белмәй? Үҙен "Алла" тип һанаған, урынын башҡалар биләп ҡуйыуҙан ҡурҡҡан был ҡатил (ҡатил - ғәр. "үлтереүсе") яңы тыуған һәр бер ир баланы үлтертеп торғаны хаҡында Ҡөрьән аяттары ла бар! Быны ла, бәлки, кемдер "әкиәт" тип әйтергә баҙнат итер?

Кешелек донъяһында ана шундай әҙәм йәнен ҡыйыусылар һәр саҡ булған. Француз императоры Наполеон Бонапартты алып ҡарайыҡ. Ул шәхсән үҙ ҡулы менән берәүҙе лә үлтермәгәндер, бәлки. Әммә, бөтә Европаны баҫып алыу барышында уның армияһы тарафынан үлтерелгән кешеләр һаны меңәрләп, хатта миллионлаптыр ҙа!

Шулай уҡ миллионлаған ҡорбан талап иткән Беренсе бөтә донъя һуғышын асыусыларҙың аныҡ исемен бер кем дә белмәй. Берәүҙәр Кайзер Германияһын, икенселәр башҡаларҙы ғәйепләй. Ә беҙ мәктәптә уҡыған дәүерҙәге тарих дәрестәрендә (Советтар Союзы осоро) шул һуғыштың сығыуында "ҡанлы Николай" батшаның да роле булыуы хаҡында әйткәндәре хәтеремдә. Утыҙынсы йылдарҙағы миллионлаған "золом ҡорбандары" ла әҙәм балаһының эше бит. Заманында "халыҡ дошманы" мөһөрө баҫылған меңәрләгән ватандашыбыҙҙың һәр береһенең үлемендә лә аныҡ бер йә бер нисә кеше ғәйепле. Уларҙың кем булғанлығы хаҡында хәҙер фаразлаусылар күп.

"Юғары культуралы" Германия еренән сыҡҡан бихисап яҡшы шәхестәр хаҡында беләбеҙ. Ә шул уҡ илдә немец милләтле булмаған башҡа төрлө халыҡтарҙы юҡ итеү сәйәсәтен уйлап сығарып, уны тормошҡа ашырыусы Адольф Гитлер ҙа тыуған һәм тәрбиәләнеп үҫкән... Германия капитуляцияланғас, Хиросима һәм Нагасаки тип аталған япон ҡалаларына йәҙрә бомбаһы ташлаусылар хаҡында ни уйларға була? "Ике генә" бомбаның һәр береһенең бер нисә секунд эсендә егермешәр меңдән ашыу тыныс йәшәп ятҡан кеше ғүмерен өҙөүе Америка халҡының түгел, ә Ҡушма Штаттар хөкүмәте башында ултырған бер нисә башлыҡтың намыҫында. Ә унан һуң атом бомбаһының эҙемтәһенән - нур ауырыуынан (лучевая болезнь) үлгән ҡорбандар хаҡында уйҙарға төшә башлаһаң - иҫең-аҡылың китер (күп кенә япон кешеләрендә әле булһа нәҫелдән-нәҫелгә тапшырылып килә уның шойҡаны)!

Ун бишләгән мең һалдат ғүмерен өҙгән Афған һуғышына кем әмер биргән? Ә шул бәрелештә йәшеренеп өлгөрмәй ҡалған, һис бер ҡоралһыҙ күпме тыныс кешенең - ҡарт-ҡоро, бала сағаның үлгәнен кем һанаған? Былар - барыһы ла әҙәм балаһының атҡарған эштәре...

Бәғзеләребеҙ әле булһа һағынған совет системаһында тәрбиә-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓16 июлгә Башҡортостанда 44 482 яңы коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Тәүлегенә 240 осраҡҡа артҡан. Тәүлек эсендә 6 кешенең ғүмере өҙөлгән. Үлем осраҡтарының дөйөм һаны 677 тәшкил иткән. Әлеге ваҡытта стационарҙа - 556 пациент, шул иҫәптән 56-һы - ауыр хәлдә. Туғыҙы үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Ә 1833 сирле өйҙә дауалана.Тәүлегенә 135 дауахананан тыш пневмония осрағы асыҡланған.

✓Башҡортостан Башлығының тейешле бойороғо менән 19-20 августа Сибайҙа һәм Баймаҡ районында "Урал аръяғы-2021" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы ойошторола. Тәүҙә сараны 2021 йылдың июнендә ойоштороу планлаштырылғайны. Инвестиция һабантуйында федераль һәм төбәк дәүләт учреждениелары, Рәсәй һәм сит ил бизнесы вәкилдәре, инвесторҙар, эксперттар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнаша.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала вакцинация темпы буйынса эште көсәйтергә ҡушты. Һүҙ барлыҡ дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм ҙур предприятие эшселәренә прививка эшләү тураһында бара. Республика хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров һүҙҙәренсә, ҙур предприятиеларҙа вакцинация менән проблемалар булмаясаҡ. Предприятие хеҙмәткәрҙәренә прививка яһауҙы аҙна һуңына тамамлау планлаштырыла.

✓Башҡортостанда 739 меңдән ашыу кешегә коронавирустан прививканың беренсе компоненты яһалған. Был - республикаға килтерелгән вакцинаның 87 проценты, тип хәбәр иттеләр хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. 420 мең кеше вакцинаның беренсе һәм икенсе компонентын да ҡаҙатҡан. Был - алынған вакцинаның 49,5 проценты. Вакцинация темпы буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә - туғыҙынсы, килтерелгән вакцинаны файҙаланыу темпы йәһәтенән 48-се урынды биләй.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 19 июлде республикала ял көнө тип иғлан итте. Был хаҡта республика етәксеһе Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә белдерҙе. "20 июлдә республика Ҡорбан байрамын билдәләй. Эпидемиологик хәлгә бәйле Башҡортостанда йәшәүселәргә дүрт көн ял бирәбеҙ. Бөтә эш биреүселәр ҙә ошо көн өсөн хеҙмәт хаҡын һаҡларға тейеш", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, урында эшләргә тейешле хеҙмәткәрҙәр һанын һәр учреждение үҙе билдәләй.

✓ *Юл буйҙарында, ял итә торған урындарҙа туалеттарҙың юҡлығы, булһа ла ҡул йыуыу, йыуыныу, тәһәрәт алыу өсөн мөмкинлектәр булмауы ҡыйын.*



ләнеп үҫкән, совет мәктәбендә уҡып белем алған сексуаль маньяк Чикатило хаҡында ишетмәгән кеше юҡтыр. Әллә нисә тиҫтәләгән ҡатын-ҡыҙҙың ғүмерен өҙгән был әҙәмдең үлем язаһына хөкөм ителеүе хәтеремдә. Тыштан ҡарағанда ғәйәт тыныс, әҙәпле күренгән был кеше ишаратының ҡылыҡтарына кем ғәйепле? Шул саҡтағы мәктәп тәрбиәһе түгелдер бит! Баштараҡ әйтеүемсә, ғәйепте аныҡ шәхестең фәҡәт үҙенән генә эҙләү

Хәҙер күптәр бөтә ғәйепте япһарырға ятраҡан "интернет" тигән нәмәнең хатта "и" хәрефен дә белмәй инек ул саҡта. Интернет селтәрендәге теләһә нимәләр, әлбиттә, әҙәм балаһына насар йоғонто яһай, һүҙ юҡ. Балаларҙың тормошҡа, эшкә, йәмғиәткә ҡарашы үҙгәреүендә лә, ниндәйҙер кимәлдә уның сағылышы барҙыр. Шул уҡ ваҡытта, бөгөнгө йәшәйешебеҙҙе интернетһыҙ ҙа күҙ алдына килтереп булмай бит хәҙер, бы-

***Хәҙер күптәр бөтә ғәйепте япһарырға ятраҡан "интернет" тигән нәмәнең хатта "и" хәрефен дә белмәй инек ул саҡта. Интернет селтәрендәге теләһә нимәләр, әлбиттә, әҙәм балаһына насар йоғонто яһай, һүҙ юҡ. Балаларҙың тормошҡа, эшкә, йәмғиәткә ҡарашы үҙгәреүендә лә, ниндәйҙер кимәлдә уның сағылышы барҙыр. Шул уҡ ваҡытта, бөгөнгө йәшәйешебеҙҙе интернетһыҙ ҙа күҙ алдына килтереп булмай бит хәҙер, бына нимә. Был заман техникаһын әрләү, тәнҡитләү - "һауа һелкетеү"гә тиң. Уны тормошобоҙҙан айырып алыу мөмкин түгел икәне һәр кемгә асыҡ. Тик зыянлы сайттарҙы кәртәләү ысулдарын табыу - мотлаҡ!***

кәрәк... Мин бала саҡта райондарыбыҙҙағы ауылдарҙың берећендә ике балиғ булмаған апалы-һеңлеле ҡыҙҙы йыртҡыстарса үлтергән олпат йәштәрҙәге Ш. исемле яҡташыбыҙ хаҡында ишетеп, тетрәнгәйнем (уны ла атыуға хөкөм иттеләр). Ул ваҡыт бындай хәбәрҙәр бөтә ил буйлап таралмай торғайны. Шул хәлде иҫләйем дә: "Был әҙәм аҡтығы ла әлеге Илназдан артығыраҡ булмаған икән", - тип уйлап ҡуям хәҙер. Йәғни "сәскә атҡан социализм" осоронда ла, хәҙерге һымаҡ уҡ, "ғәҙәттән тыш" хәлдәр була торғайны ул, тимәксемен. Тик халыҡҡа был хаҡта әллә ни һөйләп барманылар, сөнки коммунизм төҙөләп ятҡан илгә шундай енәйәтселлек хас булырға тейеш булмаған...

на нимә. Был заман техникаһын әрләү, тәнҡитләү - "һауа һелкетеү"гә тиң. Уны тормошобоҙҙан айырып алыу мөмкин түгел икәне һәр кемгә асыҡ. Тик зыянлы сайттарҙы кәртәләү ысулдарын табыу - мотлаҡ!

Донъя, Рәсәй кимәлендә бына шундайыраҡ итеп фекерләүҙәр, бәлки, ҡыҙығыраҡтыр ҙа, әммә минең, кемдер әйтмешләй, "үҙ күлдәгем үҙемә яҡыныраҡ" (Бала саҡта, беҙҙе тәрбиәләүселәр "Своя рубашка ближе к телу" тип яңғыраған ошо урыҫ әйтемен коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексына яраҡһыҙ, эгоистар өсөн ул, тип, яратып етмәй торғайны. Әммә, мин уны йыш ҡына ҡулланғылайым). Юғарыла күтәрелгән мәсьәләне яҡташтарым менән "үҙебеҙсә сәйнәп",

үҙебеҙ өсөн файҙалы булған һығымталар яһарға ниәтем. Кем нисектер, әммә мин, үҙем мосолман кеше булараҡ, бына шундай енәйәттәрҙең тамырын динһеҙлектә күрәм. Ислам динендә булған бер кем дә үҙен "Алла" тип иғлан итмәйәсәгенә иманым камил. Күрше генә республикала йәшәгән әлеге егеттең фамилияһын башлап ебәргән Ғәләүи исемле бороңғо ҡартатаһы, унан алда йәшәгән ата-бабалары ла, моғайын, хаҡ диндәге кешеләр булғандыр. Бер Аллаһ Тәғәләне генә танып, Уға ғына буйһоноп, фәҡәт Уның ҡушҡандарын үтәп, ә тыйғандарынан тыйылып йәшәгәндер... Әммә, Октябрь түңкәрелешенән һуң, илебеҙҙә иманһыҙлыҡ тантана иткән бер быуатҡа яҡын дәүер, башҡа бик күптәр һымаҡ уҡ, был ғаилә өсөн дә эҙһеҙ ҡалмағандыр. Илназдың имани рухта тәрбиәләүселәре бөтөнләйгә булмағанлығы көн кеүек асыҡ...

"Бөгөн йәштәргә ниндәй тәрбиә бирелә? Пионер, комсомол тәрбиәһе үткән быуын ошо хаҡта ниҙәр уйлай?" тигән һымағыраҡ көнүҙәк мәсьәләләрҙе ҡуҙғатыусы һорауҙар гәзитебеҙҙә йыш ҡына күтәрелеп тороуы һөйөнөслө. Йәштәрҙе тәрбиәләүгә ҡағылышлы файҙалы кәңәштәр биреүсе өлкән быуын кешеләре лә күп кенә. Тик ни өсөндөр бик күптәр дин мәсьәләһенә ҡағылмауҙы, уны урап үтеүҙе хуп күрә. Йәштәребеҙ күпләп иманға килмәй тороп, илдәге ошо оло проблеманы хәл итеп булмаясаҡ. Тарихыбыҙ төпкөлөндә ҡалған дини асылыбыҙға ҡабаттан ҡайтып ҡына йәш быуында эскелекте, наркоманлыҡты һәм һәр төрлө енәйәтселекте туҡтата алырбыҙ, ин шәә Аллаһ. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Марк Твен "Үлем түшәгендә ятҡанда кеше ике әйбер тураһында үкенә: аҙ ятратҡаны һәм аҙ сәйәхәт иткәне өсөн", тигән. Сәйәхәттәр буйынса үкенестәр юҡмы, әллә ул һаман хыялда ғынамы?**

***Роза ЗАҺИҘУЛЛИНА, эшҡыуар, Көйөргәҙе районы:*** Үҙ эше менән шөғөлләнгәндәр өсөн ял да, байрам да, шулай уҡ отпускы ла юҡ инде ул. Шулай ҙа сәйәхәт итеүҙе туҡтатмайбыҙ, йылына бер тапҡыр балалар каникулда булғанда ғына булһа ла сәфәр сығырға, уларға донъя күрһәтергә тырышабыҙ. Ҡырымда, Сочиҙа булдыҡ. Туризм яйлап беҙҙең илдә лә үҫешә башлауы ҡыуаныслы. Быйыл тағы Абхазияға барырға ниәтләйбеҙ. Унда балаларҙы, шулай уҡ оло йәштәгеләрҙе алып барырға мөмкин. Быйыл әсәйем менән ҡәйнәмде лә алырға тип торабыҙ. Һыу инеү миҙгеле Абхазияла иртә, атап әйткәндә, майҙа уҡ башлана һәм октябргә тиклем дауам итә. Унда диңгеҙ таҙараҡ та кеүек. Экскурсиялар ҙа мауыҡтырғыс. Шарлауыҡ, Рица күле кеүек урындарҙы балаларға күрһәтке килә. Коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле берәй төрлө сикләүҙәр, үҙгәрештәр булмаһа, июль-августа үҙебеҙҙең машина менән юлға сығырға уйлайбыҙ.

Йыл һайын тиерлек барғас, ҡайҙа аҡсаны экономияларға ла беләбеҙ. Беҙ пансионатҡа, санаторийға ҡарағанда шәхси йорттан бүлмә ҡуртымға алыуҙы хуп күрәбеҙ. Иртәнге һәм киске ашты күберәк үҙебеҙ әҙерләйбеҙ, ә төшкөһөн диңгеҙ ярында йәки экскурсия ваҡытында кафела ашайбыҙ.

Башҡортостандың иҫтәлекле урындары менән дә таныштырғы килә, әлбиттә. Әммә әлегә беҙҙә балалар менән юл йөрөү бик үк уңайлы түгел. Юл буйҙарында, ял итә торған урындарҙа туалеттарҙың юҡлығы, булһа ла ҡул йыуыу, йыуыныу, тәһәрәт алыу өсөн мөмкинлектәр булмауы ҡыйын. Ял һәм сәйәхәт итеүселәргә был иң мөһим шарттарҙың береһе. Бер нисә йыл элек улдарыбыҙҙы республикалағы иң ҙур Асылыкүлде күрһәтергә тип алып барғайныҡ, тап ошо бәҙрәфкә бәйле мәсьәләләр булыу сәбәпле, барған көндө үк кисен ҡайтып китергә мәжбүр булдыҡ. Бәлки, хәҙер шарттар яҡшырғандыр ҙа, тик әлегә унда юл төшмәйерәк тора.

Республика буйлап йөрөгәндә йәнә шуға иғтибар итмәү мөмкин түгел: юл буйы ҡунаҡханалары беҙҙә Башҡортостанда иң ҡиммәте. Шуға күрә бер аҙналыҡ сәйәхәткә сыҡһаҡ, мотлаҡ палаткалар алабыҙ һәм берәй легендағамы, риүәйәткә йәки тарихҡа, тарихи шәхескәме бәйле урында туҡтап, ял итәбеҙ, ҡунабыҙ. Быны, әлбиттә, беҙ аҡса экономиялау өсөн генә түгел, ә балаларға үҙҙәрен тәбиғәт менән бер бөтөн итеп тойһон өсөн эшләйбеҙ. Киләсәктә төрлө ҡалаларға, райондарға күберәк йөрөргә тигән маҡсат ҡуйҙыҡ, сөнки сәйәхәт - ул аҡса тотонғандан һуң кешене бай итеп тойорға булышлыҡ иткән берҙән-бер сара.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МИН ДӘ АПТЫРАНЫМ...

**Берҙән-бер мәл йәштәрҙең ҡосаҡлашып күрешеүе ғәҙәткә инеүенә иғтибар иттем. Был күркәм аралашыу беҙҙең, ололарҙың, күңелен йылыта, әлбиттә. Тимәк, йәш быуын шулай бер-береһен туғанылай яҡын итә, бер-береһенә ышана, таяна. Яҡын күрмәгән кешене нисек ҡосаҡламаҡ кәрәк!**

Әммә... Ошондай аралашыуҙарҙа ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡылығы ғына оҡшап етмәгәйне, йәғни, уларҙың ир-егет муйынына һырлығыуын, аҫылыныуын ҡабул итә алмағайным...

Әле донъя кимәлендәге Фольклориада мәлендә тағы шуға иғтибар иттем. Ҡыҙҙарыбыҙ уйламай ҙа сит ил ҡунаҡтарының ҡуйынына инеп китеп, телефондарында ошо мәлде мәңгеләштерә. Өлкән генә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ошо уҡ ҡылыҡтан азат түгел, имеш. Берәүҙәренең Фольклориада ҡунаҡтарының береһе - ҡара тәнле африканлыны күмәкләп уратып алып, берәмләп-берәмләп фотоға төшөүҙәрен, хатта ҡосаҡлауҙарын күреп, тәнҡит һүҙе әйтергә лә тура килде...

Башҡорт ҡатын-ҡыҙының әҙәп, оялсанлыҡ тигән холоҡ һыҙаттары юҡҡа сығып бара түгелме, тип уйланылды шунда. Был хәлде ауыҙ йырып ҡарап торған ир-егеттәребеҙгә лә һарыу ҡайнап ҡуйҙы. Ә бит, белеүебеҙсә, элек ир-егеттәребеҙ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ янына ситтәрҙе яҡын юлатмаған, беҙҙең гүзәл заттарға бер ауыҙ һүҙ ҡушыу өсөн дә уның ағаһынан, атаһынан рөхсәт һоралған.

Был йола ҡайһы бер халыҡтарҙа әле лә бик ныҡ күҙәтелә. Беҙҙең мәргән уҡсылар ниндәйҙер бер халыҡ-ара кимәлдәге спартакиаданан ҡайтып, ошо хаҡта аптырап та, һоҡланып та телгә алғайны. Улар һөйләүенсә, Кавказ ир-егеттәре ҡатын-ҡыҙҙары эргәһенә, хатта ул үҙенең яҡын ҡәрҙәше булмаһа ла, ситтәрҙе яҡын ебәрмәй. Бергәләп фотоға төшөү өсөн дә уларҙан рөхсәт алырға кәрәк, тигәйне улар...

Эйе, беҙҙең ысын асылыбыҙҙан, йола-ҡағиҙәләрҙән ситләшеү миҫалдары был ғына түгел. Заманы башҡа, тип аҡланырға тырышһаҡ та, заман ғәҙәттәрен үҙләштереүҙең эҙемтәләре әсе күҙ йәштәрен түктерә түгелме һуң? Ошолар хаҡында ни уйлай икән был юлдарҙы уҡыусылар?

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тиҙҙән республикала яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыусыларҙың күбәйеү ихтималлығын әйтте. Шуға бәйле 1 сентябрь алдынан мәғариф учреждениеларында йәнә медицина инспекторҙарының эше йәнләндерелә. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, алдағы аҙнала яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәш буйынса оператив штаб сикләү индереүгә бәйле ҡарар ҡабул итергә йыйына.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала балалар Фольклориадаһын ойоштороу тәҡдиме менән сығыш яһағайны. Республика халыҡ ижады үҙәге һәм CIOFF Өфөлә балалар Фольклориадаһын ойоштороу мөмкинлеге хаҡында һөйләшеүҙәр үткәрҙе. Республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова һүҙҙәренсә, аныҡ ҡарар ноябрҙә Будапешт ҡалаһында CIOFF советында ҡабул ителәсәк.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостандың 13 районы аграрийҙары ужым ашлығын йыйыуға тотондо. 5,5 мең гектарҙан ашыу бөртөклө ужым культуралары сабылған. Оператив мәғлүмәттәргә ярашлы, ашлыҡтың тулайым йыйымы әлегә 3,8 мең тәшкил иткән, гектарынан уңыш - 14,5 центнер. Саҡмағош районында һәр гектарҙан 30 центнер ашлыҡ йыялар. Дүртөйлө, Миәкә, Өфө һәм Шишмә райондарында гектарынан 20 центнерҙан ашыу иген алалар. Быйыл Башҡортостан игенселәренә 3 миллион гектар самаһы ауыл хужалығы культураларын йыйып алыу бурысы тора.

✓Башҡортостанда йыл башынан тышҡы сәбәптәрҙән (йәрәхәттәр, һыуға батыу, механик асфикция) бер айҙан 18 йәшкә тиклемге 19 баланың ғүмере өҙөлгән. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының оператив мәғлүмәттәре буйынса, июлдең 12 көнөндә ун бер бала үлгән. Уларҙың үлем сәбәбе - һыуға батыу, бейеклектән ҡолап төшөү һәм юл-транспорт фажиғәләре.

✓Башҡортостанда Евразия климат консорциумы ойошторолдо, ул Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының пилот проектында ҡатнашыу өсөн карбон полигоны булдырыу программаһын әҙерләү һәм тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнергә тейеш. Төҙөлгән килешеү сиктәрендә 2021-2022 йылдарҙа республикала был программаны финанс яҡтан тәьмин итеү планы һәм юл картаһы раҫланды.

✓ *Финанс грамотаһына эйә булған балалар мутлашыусылар тоҙағына эләкмәйәсәк, аҡса менән дөрөҫ эш итәсәк. Яңы стандарт буйынса уҡытыу 2022 йылдың 1 сентябренән башлана.*



ҠЫҪҠАСА

# МӘКТӘПКӘ ӘҘЕРЛӘШ!



**1 июлдән Башҡортостанда "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" акцияһы башланды. Традицион мәрхәмәтлек акцияһы 1 июлдән 31 августа тиклем барасаҡ.** Уның маҡсаты - ауыр тормош хәлендәге ғаилә балаларын яңы уҡыу йылына әҙерләшергә ярҙам итеү. Уның ойоштороусылары - БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы менән "Ғаилә" республика ресурс үҙәге. Уҡыу кәрәк-ярақтары йыйыу республиканың "Ғаилә" район-ара үҙәктәре базаһында һәм уларҙың ҡала, район бүлексәләрендә үткәрелә. Канцелярия тауарҙары, яҙыу кәрәк-ярақтары, дәфтәрҙәр, һүрәт төшөрөү һәм балалар ижады өсөн йыйылмалар мәрхәмәтлек акцияһында ҡатнашыусыларҙан һәр ваҡыт кенә ҡабул ителә. Портфель, мәктәп формалары һәм әҙәби китаптарҙың шулай уҡ яңы көйө йә яҡшы хәлдә булыуы кәрәк. Бында тупланған бөтөн мәрхәмәтлек ярҙамы Хеҙмәт министрлығы ҡарамағындағы халыҡҡа социаль ярҙам учреждениеларында иҫәптә торған ғаиләләргә ебәреләсәк. Мәрхәмәтлек акцияһының һөҙөмтәһе сентябрь баштарында билдәле буласаҡ.

✓ **Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко Башҡортостан Республикаһын вакцинация етеҙ темпта барған субъекттар иҫәбенә индерҙе.** "Һуңғы аҙнала илдә Мәскәү, Башҡортостан, Брянск өлкәһе, Краснодар крайы, Липецк өлкәһе, Мәскәү өлкәһе, Адыгея, Смоленск, Тверь өлкәләре прививка яһау кампанияһы буйынса юғары күрһәткескә өлгәште", - тине ул. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, һуңғы ике аҙнала республикала вакцинация темпы артҡан. "Тәүлегенә уртаса 20 меңдән ашыу кешене теркәйбеҙ. Тотош илдәге кеүек үк, беҙҙең төбәктә лә сир йоҡтороу осраҡтары арта. Пандемияның таралыуын туҡтатыуҙың иң ынайлышылы һәм һөҙөмтәле ысулы - коллектив иммунитет булдырыу өсөн халыҡтың 60 проценты һәм унан ашыуырағына прививка яһау", - тип белдерҙеләр матбуғат хеҙмәтендә.

✓ **Быйыл тәүге өс айҙа Башҡортостанда яҡынса 9,8 мең бала донъяға ауаз һалған, тип хәбәр итте республика статистикатары.** Башстат мәғлүмәттәре буйынса, республикала был ваҡытта айырыуса беренсе һәм икенсе балалар тыуған - 3,2 һәм 3,5 меңдән ашыу. Ике меңдән күберәк сабый ғаиләлә - өсөнсө, 600-ө - дүртенсе, 300-ҙән ашыуы бишенсе һәм артабанғы булып донъяға килгән. Шул уҡ ваҡытта 2021 йылдың тәүге өс айында 15 меңдән артығыраҡ кеше вафат булған (был- тыр ғинуар-март айҙарында - 12,3 мең). Мәрхүмдәрҙең күпселеге, йәки 11,5 меңдән ашыуы - эшкә һәләтле йәштән өлкәнерәк. Уларҙың 5 мене ир-ат булһа, 6,5 мене - ҡатын-ҡыҙ. Был ваҡытта 3,3 меңдән күберәк кеше эшкә һәләтле йәштә яҡты донъя менән хушлашҡан, уларҙың 2,6 меңдән ашыуы - ир-ат, 700-ө - ҡатын-ҡыҙ. Үлгәндәр араһында бер йәшкә тиклемге 68 бала бар, тип белдерҙеләр Башстатта.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҠАҒИҘӘНЕ ҮТӘҺӘҢ...

**Республиканың эшлекле берләшмә вәкилдәре Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа ресторандарға һәм башҡа социаль-көнкүреш йүнәлешендәге учреждениеларға барғанда ковидҡа ҡаршы өҫтәмә сикләү индереүҙе һуңыраҡ ваҡытҡа күсереү үтенесе менән мөрәжәғәт итте.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменә килгән хатта республиканың Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе Анна Казак, төбәктә коронавирусҡа бәйле хәлде анализлап, дөйөм туҡланыу ойошмалары коллективтарында COVID-19 менән сирләү осраҡтарының теркәлмәүен билдәләй. Шулай уҡ дөйөм туҡланыу объекттарына барғанда коронавирус йоҡтороу ихтималлығы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Шуға бәйле Роспотребнадзор дөйөм туҡланыу ойошмалары санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе үтәгән саҡта ковидҡа ҡаршы өҫтәмә сикләү индереү ваҡытын күсереү хаҡында ҡарар ҡабул итергә мөмкин тип иҫәпләй. Ошо хат нигеҙендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефе янауына бәйле юғары әҙерлек тәртибе тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Документтың яңы редакцияһына ярашлы, ресторандарға һәм башҡа социаль-көнкүреш йүнәлешендәге учреждениеларға инеү өсөн вакцинация үтеү хаҡындағы белешмә (сертификат), шул иҫәптән беренсе компонент менән, прививка эшләтергә ярамауы йәки кире һөҙөмтәле ПЦР-тест булыуы тураһында талап 12 июлдән 26-һына күсерелә.

## ҮҘЕБЕҘ ЕТЕШТЕРГӘНГӘ ЕТМӘЙ

**Беҙҙең аҙыҡ-түлек баҙары заманса булырға тейеш, тине Радий Хәбиров күсмә "Ауыл сәғәте"ндә.**

Спорт һарайы алдындағы майҙанда һаман булһа машинанан һатыуҙарын, һатыусыларҙың ҡышын палаткаларҙа өшөүен, алыпһатарҙарҙың фермерҙарҙы прилавкаларға яҡын ебәрмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алып, республика Башлығы ҡарар ҡабул итеү кәрәклеген һәм был яңы административ документтан бәләкәй эшҡыуарлыҡ зыян күрмәҫкә тейешлеген билдәләне.

Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү министры Алексей Гусев әйтеүенсә, 2021 йылдың тәүге дүрт айы йомғаҡтары буйынса сауҙа күләме 9,8 процентҡа артҡан һәм 298,3 миллиард һум тәшкил иткән. Әммә урында етештерелгән аҙыҡ-түлек күләме 10 проценттан артмай.

Республика етештереүселәренә ярҙам итеү маҡсатында "Башҡортостан продукттары" проекты буйомға ашырыла. Ул 537 ҡатнашыусыны берләштерә, шуның 75-е федераль сауҙа селтәрҙәре менән эшләй, 93-ө продукцияһын күрше төбәктәргә һата. Агросәнәғәт кластерын булдырыу тәү сиратта социаль туҡланыу өлкәһен, белем биреү һәм медицина ойошмаларын үҙебеҙҙең аҙыҡ-түлек менән тәьминәткә булышлыҡ итә.

Үткән йылдың декабре менән сағыштырғанда, Башҡортостанда социаль әһәмиәтле бөтә аҙыҡ-түлек тә ҡиммәтләнде. Сөгөлдөр, кишер, кәбеҫтәгә хаҡ ныҡ күтәрелде. Картуфтың хаҡы былтырғыға ҡарағанда 180 процентҡа артты. Ҡиммәтләнгән аҙыҡ-түлек исемлегенә виноград, һуған, һыйыр ите, бауыры, суҫҡа ите, тауыҡ бото, сосиска, сарделька, бешкән колбаса, макарон изделиелары, ярма һәм башҡалар ингән. Былтырғы менән сағыштырғанда хаҡы төшкән продукттар араһында ҡыяр, әфлисун, помидор, сыр, ярым ыҫланған колбаса, томат, балыҡ консервалары бар.

## СӘЛӘМӘТЛЕК ПОЕЗЫ...

**Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. Республика райондарында медицина хеҙмәткәрҙәре халыҡты күсмә һаулыҡ үҙәктәрендә һәм фельдшер-акушерлыҡ пункттарында ҡабул итә. Унда флюорография, маммография үтергә мөмкин. Поезд составына шулай уҡ Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының диагностика һәм Республика кардиология үҙәктәре, стоматология поликлиникаһы модуле инә.**

Әле бөтәһе 23707 тикшереү, шул иҫәптән 15075 флюорография, 8632 маммография үткәрелгән. 1764 граждандың ҡандағы глюкоза кимәле, 2527 граждандың холестерины, 4045-енең артериаль баҫымы юғары, 2823 кешенең ауырлығы артыҡ булыуы, 2142 кеше тәмәке тартыуы билдәләнгән. 1326 граждан социаль әһәмиәттәге сир менән ауырый, шул иҫәптән 226 яман шеш, 180 шәкәр диабеты, 27 туберкулез, 893 гипертония, 1 миокард инфаркты асыҡланған. Уларҙың барыһы ла диагнозды аныҡлау, дауалау өсөн өҫтәмә тикшереүгә ебәрелгән, контролгә алынған. Белгес врачтар бригадаһы составына терапевт, хирург, акушер-гинеколог, онколог, кардиолог, офтальмолог, уролог, невролог, стоматолог, эндокринолог һәм башҡалар инә.

"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһына Башҡортостандың бөтә райондары ла йәлеп ителгән. Сара башланғандан алып 39552 кеше тикшерелгән. Күсмә бригадалар график буйынса алты районда эшләгән: Өфө маршруты - Благовещен районында, Дыуан маршруты - Мәсетле районында, Нефтекама маршруты - Краснокама районында, Октябрьский маршруты - Бәләбәй районында, Стәрлетамаҡ маршруты - Мәләүез районында тамамланған һәм Стәрлетамаҡ районында башланған. Белорет маршруты - Бөрйән районында эшләгән. Акция барышында 6163 кеше, шул иҫәптән 60 йәштән өлкән 2580 кеше вакцинацияның беренсе этабын үткән. Уны тулыһынса 2785 кеше (60 йәштән өлкән 1278 кеше) тамамлаған.

## ФИНАНС БЕЛЕМЕ КӘРӘК

**Башҡортостан мәктәптәрендә финанс грамотаһы буйынса дәрестәр башланасаҡ.**

Башланғыс кластар предметты математика, тирә-яҡ мөхит, 5-9-сы кластар йәмғиәтте өйрәнеү, математика, география дәрестәрендә өйрәнәсәк. Башҡортостан Үҙәк банкы матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, уҡыусыларға интернетта, шул иҫәптән финанс операциялар эшләгәндә хәүефһеҙ кунекмәләргә, шулай уҡ ғаиләнең килемен анализларға, шәхси финанс план төҙөргә, легаль финанс ойошмаларҙан мутлашыусыларҙы айырырға өйрәтәсәктәр. Рәсәй Банкының Башҡортостан буйынса Милли банк - бүлексәһе эксперты Анна Каменева билдәләүенсә, финанс грамотаһына эйә булған балалар мутлашыусылар тоҙағына эләкмәйәсәк, аҡса менән дөрөҫ эш итәсәк. Яңы стандарт буйынса уҡытыу 2022 йылдың 1 сентябренән башлана, әммә ата-әсәләр менән килешеү булһа, уны 2021 йылда уҡ индерергә мөмкин. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда финанс грамотаһын мәктәптәрҙең 75 процентында 5-11 класс уҡыусылары йәмғиәт фәне, тарих дәрестәрендә өйрәнә. Айырым предмет булараҡ дөйөм белем биреү учреждениеларының 6 проценты һәм тағы кластан тыш, өҫтәмә белем биреү сиктәрендә мәктәптәрҙең 12 проценты уҡый. Шулай уҡ республикала 2014 йылдан 24 мәктәпте берләштергән инновацион проект эшләй, унда финанс грамотаһы - мотлаҡ уҡытылырға тейешле фән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Пермь крайы губернаторы Дмитрий Махонин Пермь - Өфө трассаһын яҡшыртыу тәҡдимен индерҙе. Төбәк башлығы 8 июлдә Мәскәү өлкәһендә Үҙәк ҡулса автомобиль юлын асыу тураһында фекер алышҡанда Рәсәй Президенты Владимир Путиндан ошо хаҡта һораны. Владимир Путин тәҡдимде ҡарарға бергә бирҙе һәм Мәскәү - Ҡаҙан - Екатеринбург тиҙлекле автомагистраленең ике йылға алдараҡ, 2022 йылда төҙөлөп бөтәсәген иҫкә төшөрҙө. Ул Пермь крайы, Башҡортостан аша ла үтә.

✓Өфө спортсыһы Иван Тихонов 15-16 йәшлектәр араһында бокс буйынса Европа беренселегендә алтын миҙал яуланы. Ярыштар Грузияның баш ҡалаһы Тбилисиҙа үҙҙы, унда 30 илдән 224 егет һәм 115 ҡыҙ наградалар өсөн көс һынашты. "Алыш ун өс ауырлыҡ категорияһында үтте, 46 килограмдан алып 80 килограмға тиклем. 16 йәшлек Иван Тихонов 63 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында сығыш яһаны", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Альберт Йәримов коронавирустан прививкаһы булмаған юғары уҡыу йорттары студенттарының ятаҡҡа урынлаша алмауы тураһында әйтте. "Ҡарар ҡабул ителде. Уҡырға инеү тураһында бойороҡ алған бөтә йәштәр ҙә вакцинация хаҡында ҡарар ҡабул итергә йә иһә медицина белешмәһен күрһәтергә тейеш, сөнки шуныһ ятаҡҡа урынлашып булмай", - тине министр урынбаҫары.

✓1 июлдән Краснодар крайы отелдәре туристарҙы кире һөҙөмтәле ПЦР-тестан тыш йәки коронавирустан прививкаһыҙ ҡабул итмәй. Ә 1 августан вакцинация тураһында сертификат кәрәк. Край губернаторы ошондай ҡарар ҡабул итте. Шул уҡ ваҡытта ял итеүселәр ҡулында прививка яһатырға ярамауы тураһында медицина белешмәһе һәм ял итергә килгәнсе 72 сәғәт эсендә эшләнгән кире һөҙөмтәле ПЦР-тест булырға тейеш. Балаларға коронавирустан вакцинация хаҡында белешмәләр кәрәкмәй.

✓Августа "Южный" микрорайонында яңы парк асыла. Уны ташландыҡ шәхси йорттар урынында 2019 йылда төҙөй башлағайнылар. Паркта ял итеү майҙансығынан тыш, бер нисә спорт һәм уйын, воркаут тренажерҙары урынлаштырыласаҡ, шулай уҡ йүгереү һәм йәйәү йөрөү һуҡмаҡтары ла буласаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТОРМОШ ДАУАМ ИТӘ



**Бөгөн коронавирустан вакцинацияланыу зарурлығы тураһында мәғлүмәт иң мөһим урында тора. Шулай уҡ дөйөм баш ҡалалағы һәм айырым район хакимиәттәре буйынса тажзәхмәткә ҡаршы вакцина эшләтеү барышы ла күҙ уңында. Шуға ла ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәнең тап ошо теманан башланыуы осраҡлы түгел. Әйткәндәй, был аҙнала "Торатау" конгресс-холында Волга буйы федераль округында иң ҙур вакцинациялау пункты асылды. Быға тиклем прививка яһатыусылар араһында фатир уйнатылһа, был юлы республика шифаханаларына путевка оторға була.**

Кәңәшмәлә Дим районы хакимиәте башлығы Айҙар Бәҙретдинов райондың йылдың тәүге яртыһындағы социаль-иҡтисади күрһәткестәре менән таныштырҙы. Уның һүҙҙәренсә, пандемияға ҡарамаҫтан, районда сәнәғәт, иҡтисадҡа инвестициялар һалыу, эш хаҡы өлкәһендә үсеш күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта эшсе ҡулдарға ҡытлыҡ та үҙен һиҙҙертә. Эшкә һәләтле халыҡтың 40 проценты райондан ситтә эшләй һәм был йәмәғәт транспортына көсөргәнеш булып та сағылыш таба. Был йәһәттән "Ҡала электричкаһы" проектын тормошҡа ашырыу, яңы урамдар һалыу һәм Ағиҙел йылғаһы аша Нижегородка бисәтәһе сатында күпер төҙөү проблеманы бер ни тиклем хәл итәсәк.

Айҙар Бәҙретдинов белдереүенсә, районда төҙөлөш әүҙем алып барыла. Йыл һайын баш ҡалала тапшырылған торлаҡтың 12 проценты Димгә тура килә һәм бында 4 йылда ике мәктәп һәм өс балалар баҡсаһы сафҡа ингән. Әлеге ваҡытта районда 82 мең кеше йәшәһә, төҙөлөш темптары былай дауам иткәндә 2030 йылға халыҡ иҫәбе 130 меңгә етеүе ихтимал. Шулай уҡ яңы инфраструктура булдырыу һәм төҙөкләндереү буйынса ла күп эштәр башҡарыла: һуңғы дүрт йылда бюджеттан тыш сараларҙы йәлеп итеү һөҙөмтәһендә районда 12 йәмәғәт территорияһы төҙөкләндерелгән, парк яңыртылған. 2019-2020 йылдарҙа урындағы инициативаларға ярҙам итеү республика программаһы буйынса 10 проект тормошҡа ашырылған, ағымдағы йыл һуңына тиклем тағы 8 проектты тамамлау ҡаралған.

Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә мәғариф өлкәһендәге һуңғы яңылыҡтар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Сығарылыш синыфы уҡыусыларының Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу һөҙөмтәләре, балаларҙың йәйге ял һәм һауыҡтырыу лагерҙары эше тураһында хакимиәттең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова менән Опека һәм попечителлек идаралығы начальнигы Лариса Ольте таныштырҙы. Пандемия осоро булыуға ҡарамаҫтан, санитар-эпидемиологик талаптарҙы иҫәпкә алып эшләгән лагерҙарҙа йәй башынан 300 бала ял иткән, август һуңына тиклем тағы ла 180 бала ял итәсәк. Ғаиләгә тәрбиәгә алынған балалар өсөн мәктәп яңы һәм профиль лагерҙары, ата-әсәләре менән бергә экскурсиялар, сәйәхәт итеү ойошторолған. Бынан тыш, республика бюджеты иҫәбенә Өфө ҡалаһында урынлашҡан ведомство лагерҙары ла, социаль-психологик үҙәктәр ҙә етем балаларҙы ҡабул итә һәм уларҙың ялын ойоштора. Ҡасып китһәң дә - сәсеп кит, ти халыҡ мәҡәле. Ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, тормош дауам итә һәм етәкселәр ҙә, ололар ҙа уның һәр миҙгеле файҙалы булһын, каникулдар балалар күңелендә оҙаҡ һаҡланһын өсөн тырыша.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ТЫҒЫНДАН ҠОТҠАРАСАҠ



**Өфөлә Воровский урамы сатынан Ағиҙел аша ҡаланан сығыу йүнәлешендә бер яҡлы хәрәкәткә иҫәпләнгән өҫтәмә күпер төҙөлөшө дауам итә.** Өс һыҙатлы хәрәкәт юлы булған 688 метрлыҡ күперҙе ошо йылдың октябренә файҙаланыуға тапшырыу ҡарала. Әлеге ваҡытта объектта эштәр әлек раҫланған график буйынса теүәл алып барыла. 30-сы Мостоотряд директоры Василий Чекуров хәбәр итеүенсә, 21 метр оҙонлоҡтағы күпер тороғо ҡоролмаһын урынлаштырыу буйынса һуңғы, 10-сы этаптың тәүге дүртенсе баҫҡысында эштәр башҡарыла. Бынан тыш, тороҡ ҡоролмаһын урынлаштырыуҙа ҡулланылған ваҡытлыса конструкцияны (аванбек) һүтеү буйынса эштәр бара. 80 метр оҙонлоҡтағы аванбектың алты элементының икәүһе бөгөнгә һүтелгән. Шул уҡ ваҡытта тороҡ ҡоролмаһының металл конструкцияларын тутыҡыуға ҡаршы буяу эштәре лә алып барыла.

Аэропорт тарафынан Өфөгә көньяҡ инеү һәм сығыу юлы ҡаланың иң көсөргәнешле урам-юл селтәре участкаһы. Тәүлек әйләнәһенә унан 125 мең автомобиль үтә. Транспорт тығынынан ҡотолоу өсөн 2019 йылдың 8 июлендә ике күпер араһынан яңы үткәүел күпер төҙөлөшөнөң тәүге ташы һалынғайны. Яңы күперҙе төҙөү - Өфөнән көньяҡ сығыу транспорт коридорын киңәйтеү буйынса күләмле эштең тәүге этабы ул. Төҙөлөп ятыусы яңы күпер үткәүеле менән бәйләү һәм ошо көсөргәнешле участкала хәрәкәтте көйләү өсөн әлеге ваҡытта Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫелешендә транспорт сиселешен реконструкциялау дауам итә, уның сиктәрендә юл үткәүелен дүрттән алты һыҙатҡа тиклем киңәйтеү ҡарала. Был объектты файҙаланыуға тапшырыу сиселештең үткәргес мөмкинлеген 27 процентҡа арттырасаҡ.

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАШЛАМА МЕНӘН...



**Рәсәй Президенты балаһы 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған ғаиләләргә льготалы ипотека программаһын 2022 йылдың 1 июленә тиклем киңәйтергә ҡушты. Был хаҡта Кремль документтарына һылтанма менән ТАСС хәбәр итте.**

Документ тексынан күренеүенсә, 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң беренсе йәки артабанғы балаһы тыуған ғаиләләр 2023 йылдың 31 декабренә хәтлем беренсел баҙарҙа ипотека алырға йәки әлегеһен бөтә срокка 6 процент менән рефинансларға мөмкин. Шулай уҡ Путин икенсе льготалы ипотека программаһының (беренсел баҙарҙа торлаҡ һатыу алыу өсөн) ғәмәлдә булыу ваҡытын 2022 йылдың 1 июленә ҡәҙәр оҙайтырға ҡушты. Уның буйынса ставка - 7 проценттан (бынан алда 6,5 процент ине), ә кредиттың максималь күләме өс миллион һумдан артмаҫҡа тейеш. Алдан хәбәр ителгәнсә, 4 июндә дәүләт башлығы Петербург халыҡара иҡтисади форумының пленар ултырышында ошондай йөкләмәләр менән сығыш яһаны.

✓ **Республикала арзанайған аҙыҡ-түлек араһында ҡыяр беренсе урында. Башҡортостан статистикаһы аҙна һайын үткәргән мониторинг буйынса был йәшелсәнең хаҡы 13,1 процентҡа кәмегән, йәғни килограмы уртаса 70 һум.** Йомортҡа һәм тукмас 4,5 һәм 4,9 процентҡа арзанайған. Хаҡы кәмегән аҙыҡ-түлек исемлегенә шулай уҡ балалар өсөн ит һәм йәшелсә консервалары, картуф, помидор, алма, майлы эремсек, сыр, сәй, маргарин, ҡарабойҙай ярмаһы, кәбеҫтә, һыйыр ите, ярым ыҫланған һәм бешкән-ыҫланған колбаса, сосиска, сарделька ингән. Кишергә, карамелгә, печеньеға, башлы һуғанға хаҡтар, киреһенсә, артҡан. Ҡиммәтләнгән аҙыҡ-түлектәрҙән тағы балалар тукланыуы өсөн емеш-еләк консервалары, ҡоро һөт ҡатнашмаһы, он, шоколад, һарыҡ, сусҡа иттәре, туңдырылған балыҡ, макарон, ҡаймаҡ, һөт, дөгө, аҡ май, көнбағыш майы, тары ярмаһын атарға мөмкин. Шәкәр, икмәк һәм тоҙ хаҡы үҙгәрешһеҙ ҡалған.

✓ **Рәсәйҙә студенттар туризмы программаһы башлана, уның сиктәрендә юғары уҡыу йорттары студенттары Рәсәй төбәктәре буйлап сәйәхәт итергә һәм университет кампустарында, ятаҡтарында арзан хаҡҡа йәшәргә мөмкин.** Программа 15 июлдән 25 августҡа тиклем иҫәпләнгән. Йәшәү хаҡы 35-550 һум була. Әгәр тукланыу ҙа индерелһә (иртәнге аш йәки иртәнге һәм киске аш), хаҡы бер тәүлеккә - 250- 550 һум, тип хәбәр итте ТАСС. Ошо программа буйынса студенттар август аҙағынаса тиерлек үҙ иҫәбенә, шулай уҡ үҙҙәренең юғары уҡыу йортонан ойошторолған төркөм менән (сығымдарҙы ебәргән яҡ үҙ өҫтөнә ала) сәйәхәт итергә мөмкин. Әлеге ваҡытта илдең 15 университеты проектҡа ҡушылған. Санкт-Петербургта, Мәскәү өлкәһендә, Түбәнге Новгородта, Ҡаҙанда, Владивостокта, Дондағы Ростовта, Калининградта, Томскиҙа, Бөйөк Новгородта, Красноярскиҙа, Барнаулда, Таганрогта, Владикавказда, Симферополдә, Өфөлә һәм Иркутскиҙа программа партнерҙарының вуз кампустарында һәм ятаҡтарында туҡталырға була.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәүел йышайһа

Кесе ярау йышайһа (төндә 3-4 тапҡыр), бөрөлә бер нисә сейә һабағын алып, 3-4 сантиметр оҙонлокта һындырырға. Эмалле көрәшкәгә шуның 2 ҡалағын һалырға һәм ярты литр һыу ҡойорға. Талғын утта 15 минут ҡайнатырға. Һыуынғас һөҙөп, 4 өлөшкә бүлергә. Ашарҙан алда эсергә.

### Йөрәк

Йөрәк тибеше йышайһа, 1 стакан кефирға 1-2 ҡалаҡ ваҡ ҡына туралған петрушка һибеп, тәшкөнөн эсергә.

### Баш шаулаһа

100 грамм һарымһаҡты ваҡлап, 50 грамм бал, 30 мл 20 процентлы прополис төнәтмәһе, 1 стакан араҡы ҡушырға. Бөтәһен бергә болғарға, 10 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты балғалаҡ эсергә.

### Бәшмәк

Аяҡтарға бәшмәк сыҡҡанда 1,5-2 стакан уҫаҡ ҡайырына 2 литр һыу ҡойоп, 10-15 минут ҡайнатырға. Ошо һыуҙа аяҡтарҙы тоторға кәрәк. Был рәүешле көн һайын дауаланғанда 2 аҙнанан хәл яҡшыра. Ҡайырҙы киптереп, һаҡларға һалырға ла ярай.

### Нейродермит

Аңра шалҡанды (брюква) йыуып, ҡоротоп һөртөргә һәм ҡабығын әрсемәйсә ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, бер баш ҡырылған һуған өҫтәп, ауыртҡан ергә ҡапларға. Өҫтөнән сепрәк менән урап, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк компресты алырға һәм урынына үҫемлек майы һөртөргә. Дарыухананан 2 грамм анестезин, 3 грамм ментол, 2 грамм димедрол, 3 грамм новокаин, 1 тюбик балалар кремы алып, бергә ҡушырға һәм аңра шалҡан компресынан һуң һөртөргә. Дауаланыу оҙаҡҡа һуҙылһа ла, һөҙөмтәле.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Киләсәккә мөрәжәғәтле капсула 10 йылдан һуң асылырға тейеш һәм ул төрлө илдәрҙең тимер аҡсалары баҫылған һаҡал менән бергә Башҡортостандың Милли музейында һаҡланасаҡ.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

XIX быуат аҙағында С. Г. Рыбаков Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында булғандан һуң былай тип яҙа: "Троицкиҙағы Урта Азия сауҙаһы һуңғы йылдарға тиклем киң йәйелдерелгән: Урта Азиянан төрлө тауарҙар - емеш-еләк, кизе, ебәк туҡымалар һ.б. тейәлгән тиҫтәләгән дөйә каруандары килгән... Троицк һәм Ырымбур бөтә Урал буйының Урта Азия тауарҙары өсөн склад пункты булған".

Башҡорт иле Рәсәй составына ингәс һәм Өфөгә нигеҙ һалынғандан һуң башҡорттар эске Рәсәй баҙары менән тығыҙ бәйләнеш тота башлаған. Алмаштырыу фондына Көнсығыш Европа фабрикалары һәм кәсепселәренең генә түгел, көнсығыш мануфактуралары тауарҙары ла индерелгән. Бигерәк тә фламанд, голланд, инглиз туҡымалары баһаланған.

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Рәсәйҙә туҡыу промыслаһы үҫешеү менән башҡорттарҙың көнкүрешендә фабрикаларҙа етештерелгән йөн һәм кизе-мамыҡ туҡымалар йышыраҡ осраған. Улар Көнсығыш һәм Көнбайыштан ингән тауарҙар менән бергә ҡулдан һуғылған туҡымаларҙы ярайһы уҡ кимәлдә ҡыҫырыҡлап сығарған.

XIX быуат уртаһында башҡорттар araһында кустарь һәм фабрикала етештерелгән тауарҙар киң таралыуын П.И. Небольсин да телгә ала: "Башҡорттар, улар ғына ла түгел, ә Рәсәйҙең бөтә көньяҡ өлөшө... бөгөн кизе-мамыҡ туҡымаларҙан, Мәскәү һәм Владимир ситсалары, Кинешма нанкалары һәм коломянкалары, Ҡаҙан ҡомастары һәм ҡытаттары, Фарсы, Хиуа, Бохара һәм башҡа бәз, выбойка һәм зендендән кейенә. Сит илдәрҙән күпләп килгән мәллә һәм кизе-мамыҡ тауарҙар Башҡортостанда урындағы туҡыма үләндәрен ҡыҫырыҡлағандан ҡыҫырыҡлай". Сәйәхәтсе ҡулдан һуғылған туҡымаларҙың ҡайһы бер өҫтөнлөктәрен һыҙыҡ өҫтөнә ала: "...тарманан һуғылған туҡымалар тупаҫ булһа ла, иҫ киткес ныҡлы", шуға башҡорттар уны "аршинға аршин үлсәп сауҙагәрҙәргә ҡытатҡа алмаштыра".

XVIII-XIX быуаттарға ҡараған сығанаҡтарҙа (реестр опистәрендә, этнографик баҫмаларҙа) башҡорт ауылдарында иң юғары һорау менән ҡулланған туҡымалар телгә алына. Улар араһында ҡара, йәшел һәм ҡыҙыл тула (бигерәк тә ҡәлмәрйен), төҫлө бәрхәт, плюш, атлас, тафта, әҙрәс, биҡасап, бәз, коленкор, миткал, ситса, ҡомас, ҡытат, гәрез, киндяк һ.б. туҡымалар. Һатып алынған ҡайһы бер туҡымаларҙың урындағы аталышы диалектологик һүҙлектәрҙә яҙылған: "аҡбуҙ" (аҡ бәз), "блис" (плис; кизе-мамыҡ бәрхәттең оҙон өбөрөлө бер төрө), "дөрйә" (әҙрәскә оҡшаш ебәк), "ҡарманйыл" (ҡыҙыл төҫтәге боронғо бик йоҡа тула), "бөрләнтин" (юғары сифатлы тула; Урал аръяғында был һүҙ шаҡмаҡ бүртмәсле ситсаға ҡарата ҡулланылған), "батисаҡ" (батист; йоҡа кизе-мамыҡ йәки ебәк туҡыма).

XIX быуаттың икенсе яртыһында кустарь һәм фабрикала эшләнгән туҡымаларҙан тегелгән әйберҙәр оҙаҡ ваҡыт малсылыҡ традицияларын һаҡлап ҡалған көньяҡ һәм көнбайыш башҡорттары араһында ғәҙәти күренеш булған; малсылыҡ хужалығынан алынған килем һәм мал аҙыҡтары халыҡҡа тауар алмашыуҙа ҡатнашыу һәм кәрәкле әйберҙәр, тәү сиратта туҡымалар, алыу мөмкинлеге биргән. Боронғо күскенселәр йәмғиәтендәге кеүек үк, Башҡортостандың көньяғында һәм Урал аръяғының көнбайышында һатып алынған туҡымалар ҡулдан һуғылғандары - киндер һәм тула менән берҙәй ҡулланылышта булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ФОЛЬКЛОРИАДА...

## ергә ҡот ҡайтарҙы




**Республика халҡына ошо көндәрҙә шаһит булырға яҙған оло байрам - VI Бөтә донъя фольклориадаһы тамамланды. Уның йомғаҡтары тураһында "Яҡшы тыуһа - илгә ҡот, ямғыр яуһа - ергә ҡот", тип бер һүҙ менән генә әйтеү ҙә етә.**

Башҡортостан, гүйә, һәр милләттең аҫыл тамсыларын үҙенә һеңдереп, халҡының күңелен туйындырып, тағы ла хозурланыбыраҡ ҡалды был саранан һуң. Шулай булмай ни, донъяның 37 иленән килгән төрлө халыҡ вәкилдәре республикабыҙҙың 22 муниципалитетында иң ҡәҙерлеһе - халҡының рухи мираҫы менән уртаҡлашты. Улар ҡунаҡсыл һәм асыҡ күңелле башҡорттарҙың ерендә төйәк тапҡан әллә күпме милләттәрҙең дә ошо урындың ыңғай көйләнешендә йәшәүен, берҙәмлек, ихласлыҡ һәм дуҫлыҡ хөкөм һөрөүен дә тойоп, күреп белде. Шуғалыр ҙа ҡунаҡтарҙың кеме менән аралашма, бер ауыҙҙан: "Рәсәй һәм Башҡортостан шундай алсаҡ кешеләр төбәге икән!" - тип ҡабатлай торҙо. Улар араһында республиканы быға тиклем дә килеп күреүселәр саҡырыуҙы шатланып ҡабул итеүен, ә тәүге тапҡыр булғандар әйләнеп ҡайтасаҡтарын тәкрарланы. Был, әлбиттә, тәү сиратта сараны ойоштороусыларҙың атҡарып сыҡҡан эшенә оло баһа булып яңғыраны. Биш йыл дауамында барған өҙлөкһөҙ әҙерлек үҙ һөҙөмтәләрен бирҙе, ә иң мөһиме, Фольклориадала эпидемиологик хәл ҡатмарлашыуға юл ҡуйылманы.

Фольклориаданы ябыу тантанаһы Рәсәй Хәрби һауа көстәре "Русские витязи" пилотаж төркөмөнөң күрһәтмә сығышы менән башланды. Осоусылар двигателдәре Өфө моторҙар төҙөү производство берекмәһендә етештерелгән Су-35С истребителдәрендә Ағиҙел өҫтөндә күкте иңләне, төрлө ҡатмарлы осош алымдарын күрһәтте. Күңелдәргә шом һалып гөрһөлдәгән истребителдәрҙең өйөрөлөп-өйөрөлөп осҡандарын ерҙән тороп күҙәтеүсе бар ғәм күккә ҡарап таң ҡалды һәм һәр маневрҙы алҡышлап оҙатты. Был мәлдә күптәр күңелендә илебеҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уянғандыр, моғайын. Был хисте VI Бөтә донъя фольклориадаһын ябыу тантанаһы барышында тағы ла күп тапҡырҙар кисерҙек: киләсәк быуындарға тәғәйенләнгән капсулаға башҡорт сулпыһын һалғанда, сәхнә түрендә милли биҙәүесебеҙ - һаҡалға һуңғы тәңкә баҫылғанда, төрлө милләт вәкилдәре ҡулға-ҡул тотоношоп Дуҫлыҡ ағасына таҫма бәйләргә уҙғанда, сит ил йырсыларының башҡорт һәм урыҫ йырҙарын башҡарыуын тыңлағанда...

Киләсәккә мөрәжәғәтле капсула 10 йылдан һуң асылырға тейеш һәм ул төрлө илдәрҙең тимер аҡсалары баҫылған һаҡал менән бергә Башҡортостандың Милли музейында һаҡланасаҡ. "Бөгөн Фольклориада үҙ эшенә йомғаҡ яһай, ҡарағыҙ, хатта Күк илай. Әммә беҙ һеҙҙең менән оҙаҡҡа хушлашмайбыҙ, республикабыҙға ҡабат килерһегеҙ, тип ышанабыҙ. Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путин үҙенең сәләмләүендә әйткәнсә, һеҙ Рәсәй һәм Башҡортостандың күп милләтле халҡының ҡунаҡсыллығын тулыһынса тоя алғанһығыҙҙыр, тип ышанабыҙ. Башҡортостан Башлығы исеменән барығыҙға ла рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм", - тип мөрәжәғәт иткәйне ябылыу тантанаһы барышында БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Сәхнә артына үтеп, артистар менән аралашҡанда уның был һүҙҙәрен дәлилләй алдыҡ. Мәҫәлән, Үзбәкстан составындағы Ҡарағалпаҡ Республикаһынан килгән "Айҡулаш" милли фольклор ансамбленең етәксеһе Аяпберген Алланиязов был ерҙең хозур тәбиғәтен, кешеләрҙең йөҙөндәге йылмайыуҙарҙы күреп, тик яҡшы тәьҫораттар ғына алыуын бәйән итте. "Тәү сиратта беҙҙе Өфөнөң һылыулығы, әҙәмдәрҙең асыҡлығы әсир итте. Башҡорттар менән туған телебеҙҙә тәржемәсеһеҙ ҙә яҡшы аңлашабыҙ, йолаларыбыҙҙың да, йыр-бейеүҙәребеҙҙең дә уртаҡ яҡтары күп. Фольклориадаға был юлы башҡорт халыҡ көйөн уйнарға әҙерләнеп килгәйнек, был йола элек тә беҙҙең ансамблдә булған: "Айҡулаш" ансамбле составында хатта Башҡортостандың өс халыҡ артисы бар", - ти Аяпберген Алланиязов.

Ә бына Колумбия һылыуы Изабелла Зертуче урындағы халыҡтың ғына түгел, тәбиғәттең дә йылы булыуын оҡшатҡан. Ул Рәсәй тураһында видеояҙмаларҙан ҡарап, йылы кейемдәр әҙерләп килеүҙәрен көлөп һөйләне, кешеләр һәр саҡ йылмайып йөрөүен, ансамбль артистарын баҫтырып фото төшөүҙәре, ике яҡташының ҡурай һатып алыуҙары тураһында ла өҫтәне. Польшаның "Мисковяне" фольклор коллективы хореографы Патрик Рутковски ҙа Рәсәйҙә тәүге тапҡыр булыуын, концерт менән барған төбәктәрҙән иң нығы Нуриман районы күңеленә ятыуын белдерҙе. "Ни өсөн?" тигән һорауға ул: "Сөнки йылҡы итен тәмләп ҡараным, бик үҙенсәлекле! Һис икеләнеп тормай ҡымыҙҙан да ауыҙ иттем. Башҡорт ҡыҙҙарының һылыулығына хайран ҡалдым", - тип теҙҙе.

Фольклориадаға килгән һәр коллектив үҙенең милли кейемендә сығыш яһаны һәм Польша артистарының сәйлән менән сигеүле сағыу кәзәкиҙәре, ирҙәр камзулы әллә ҡайҙан зауҡы менән күҙгә ташланып тора ине. Бер аҙ уларҙың кейем үҙенсәлектәре менән дә танышып киттек: баҡтиһәң, ярлы һәм бай ҡатлам кешеләренең кейемдәре тауарҙары һәм сәйлән менән биҙәлеше буйынса айырылып торған, ә ир-егеттәрҙең өйләнгәнме-юҡмы булыуын эшләпәһендәге сәскәгә ҡарап белеп булған икән.

Халыҡтар һәм илдәр араһындағы сиктәрҙе юйған байрамға йомғаҡ яһап, Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советы президенты Филипп Боссан былай тине: "Фольклориада мәҙәниәттең көсө сикһеҙ булыуын һәм кешелеклек һәр ваҡыт тантана итәсәген күрһәтте. Бөтә делегациялар ҙа ошо хыялын Өфөлә тормошҡа ашырыу өсөн күп тырышлыҡ һалды. Әммә һеҙ генә түгел, пандемияны еңгән барлыҡ кешелек һоҡланыуға лайыҡ. Беҙ яҡты киләсәккә өмөт тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял булмауын күрһәтә алдыҡ. Барығыҙға ла, шул иҫәптән беҙҙең һаулыҡ һағында торған медицина хеҙмәткәрҙәренә, Башҡортостан һәм Рәсәй етәкселегенә, CIOFF ағзаларына рәхмәтемде белдерәм", - тип тамамланы ул һәм "Рәхмәт!" һүҙен төрлө телдәрҙә, шул иҫәптән башҡортса ла әйтте.

Был кистә ҡапыл ямғыр һибәләп ебәреүгә ҡарамаҫтан, береһе лә өйөнә таралырға ашыҡманы: баш ҡала халҡы ла, ҡунаҡтар ҙа Эмир Кустурица һәм The No Smoking Orchestra төркөмө сығышын тыңларға, байрам һуңын белдереп атылған салютҡа һоҡланырға ҡалды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр халыҡтың ауыҙ-тел ижадын, рухи ҡиммәттәрен һаҡлауға, донъя кимәлендә танытыуға, милләт-ара татыулыҡ һәм хеҙмәттәшлеккә өндәгән әһәмиәтле сара - VI Бөтә донъя фольклориадаһы әләме төшөрөлдө, әммә әлегә сираттағы ойоштороусыларға тапшырылманы. Ләкин бындағы барыһы ла уны донъя илдәре буйлап артабан да сәйәхәт иттереүҙең мөһимлеген аңлай. Сөнки ул - ергә ҡот ҡайтарыр яҡшылыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

***1662-1664 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы рус хөкүмәтенең ихтилалсыларҙың дәғүә-талаптарын мотлаҡ үтәүгә ризалыҡ биреүе менән тамамлана.***



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЫРЫУЫБЫҘ ДЫУАН - ТАБЫНДАРҒА ТУҒАН



Һуңғыраҡ осорҙарҙа, Ҡаҙан даруғаһы ерҙәренә мишәрҙәр миграцияһы һөҙөмтәһендә, улар менән тығыҙ аралашып йәшәгән аҙ һанлы дыуан башҡорттары аҡрынлап этник ассимиляцияға дусар була, һәм уларҙың байтағы үҙҙәренең этник башҡортлоғон юғалта. Әммә Себер даруғаһында тороп ҡалған дыуан ырыуы тоҡомдары рус батшаһы ҡулы аҫтына инергә ашҡынып бармай, әйләләр, ҡатайҙар, табындар, ҡыуаҡандар менән бер булып, Себер хандарына, атап әйткәндә, хан власын үҙ ҡулына алған Шибан ханға һәм уның вариҫтарына тоғролоғон белдерә. Табын, терһәк, әйле, дыуан, һеңрән, һарт, ҡошсо ырыуҙары юлбашсылары Мортаза ханға, унан һуң уның улы Күсем ханға һәм уның улдарына хеҙмәт итергә, уларҙы үҙ хандары итеп ҡабул итергә ризалыҡ белдерә. Әммә Күсем хан вариҫтары XVII быуат башында ҡалмыҡтарҙы үҙҙәренә союздаш итеп ала, ә һуңғылары (уларҙа бөйөк монгол державасылығының агрессив рухы һүнмәгән була әле) Башҡорт илен һалым, табыш сығанағы ғына итеп ҡарай. XVII быуат башында 300 мең кешеһе менән Рус иле сиктәрендә күсеп йөрөп, туҡтауһыҙ яу сабып, урындағы халыҡтарҙы талап, күтәргеһеҙ һалым һалып көн итеүсе монгол-ойраттарҙы төрки халыҡтары ҡалмыҡтар, тип атап йөрөтә. Ҡеүәтле Ҡалмыҡ Урҙаһы хатта Оло Нуғай Урҙаһын буйһондороуға өлгәшә, башҡорттарҙың Яйыҡ, Үр (Орь), Илек, Эмба йылғалары буйындағы ерҙәрендә үҙҙәрен хужаларса тота, бындағы халыҡҡа ла көн күрһәтмәй башлай. Ҡалмыҡ хакимы Дайчин Башҡорт илен тулыһынса буйһондорорға ниәт ҡора. Тап шул осорҙа башҡорт-ҡалмыҡ яуҙары башланып китә. Ә Себер ханы, үҙ ханлығын көсәйә барған Рус дәүләтенә ҡаршы торорлоҡ кимәлгә еткерергә теләп, ҡалмыҡтар менән союзға инә.

Әммә был башҡорт-ҡалмыҡ ҡапма-ҡаршылығын көсәйтә генә, шул сәбәпле Тарихи Башҡортостандың көнсығыш зонаһында йәшәгән башҡорт ырыуҙары, шул иҫәптән дыуан-әйле башҡорттары ла, Мәскәү ҡанаты аҫтына инергә мәжбүр була. Рус хәрбиҙәре ошо заманда ҡалмыҡтарға ҡаршы башҡорттар менән бергә сығыш яһай, был көнсығыш башҡорттарын тулыһынса үҙ ҡарамағына алыу сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу маҡсатында башҡарыла.

Дыуан ырыуы башҡорттары, иң элгәре дыуан-әйлеләр, барса Башҡорт илен биләп алған ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнаша. Тәүге башҡорт күтәрелештәренән Һары Мәргән батыр етәкселегендә уңышлы тамамланған, башҡорт рухына ҡеүәт өҫтәгән, 1162 - 1164 йылдарҙағы ихтилалды атап әйтергә була. Һары Мәргән 1634 йылда уҡ Себерҙә хан хеҙмәтенә йәлеп ителә. Баш күтәреүселәр Башҡортостанда ла, Себерҙә лә Күсем хан вариҫтары хакимлығын тергеҙергә ниәтләй. Ихтилалсыларҙың маҡсаты хаҡында бер тарихи документта ошолай әйтелгән: "Тобольск де хотят взять и служилых людей побить, и договорились на том, чтобы царевичу Кучумову в Тобольске и владеть ему всею Сибирью". Оло абруй ҡаҙанған Һары Мәргән ихтилалға Себер һәм Уса даруғалары башҡорттарын ғына түгел, Пермь һәм Ҡаҙанға ҡараған мосолман халыҡтарын йәлеп итеүгә өлгәшә: "А завоевались башкирцы и сылвенские и казанские и вятские татаровя, а подговаривает их воевать Сары-Мергенка, и все у них по сговору с крымским царем, а в Сибирь у них отряжено воевать 20 тысяч бойцов". Баш күтәреүселәр Күсем хандың ейәне Көсөк ханға тоғролоҡ антын бирә, ошо турала Өфө воеводаһы А.М. Волконский ошондай мәғлүмәт биргән: "...башкирцы Таныпских волостей и Осинской дороги Гайнинских волостей, к ним же к айским башкирцам пристали, к Сюлтюку ж к Кучюку салтану подклонились, и приходили во многие места в Уфинской и в Казанской и Соликамской в уезды все вместе с Сибирскою дорогою войною, многие села и деревни повоевали, людей побили, в полон поимали многих и к Сюлтюку отдали..."

Ошо дәүергә ҡараған тарихи документтар ҙа Әй үҙәненең был дәшһәтле ихтилалдың үҙәге булыуын раҫлай. Әйле ырыуы башҡорттары араһында дыуан-әйлеләр ҙә һыр бирмәй, һәр саҡ алғы сафҡа ынтыла.

1662 йылдың июль айында ихтилалсылар, Сылва йылғаһы үҙәнендәге аулдарҙы һәм ҡәлғәләрҙе берәм-берәм баҫып алып, Көнгөр ҡәлғәһен дә штурмлап ала. Улар шулай уҡ Архангельское ауылын (хәҙерге Бөрө ҡалаһы), Саллы острогын ҡулға төшөрә, Минзәлә ҡәлғәһен һәм Өфөнө ҡамауға ала. Батша ихтилалсыларға ҡаршы үҙ армияһының байтаҡ ҡына көстәрен ебәрергә мәжбүр була, бындағы һуғыш хәрәкәттәрендә регуляр һалдат, рейтар һәм стрелецтар полктары ҡатнаша. Унан башҡа Төмән, Верхотур, Тура, Тобол һәм башҡа вағыраҡ ҡәлғә гарнизондары ла башҡорттарға ҡаршы ебәрелә. Рус дипломаты, баяр Ордин-Нащокин батшаға ошондай мәғлүмәт бирә: "Шведы всячески тайными ссылками советуются с ханом на разорение России... По шведским же рассыльным вестям польский король и в Украину пошел, услыхав, что все московские войска высланы против башкирцев".

1662 - 1664 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы рус хөкүмәтенең ихтилалсыларҙың дәғүә-талаптарын мотлаҡ үтәүгә ризалыҡ биреүе менән тамамлана.

Бөйөк Петр Беренсе XVIII быуат башында Рәсәйҙә оло үҙгәрештәр башлай. Был реформалар ил тормошоноң барса өлкәләренә лә ҡағыла. Административ идаралыҡ та тап Европа илдәрендәгесә бер үк схемаға ҡоролорға тейеш була. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар фактик рәүештә үҙҙәренең тарихи традицияларын һаҡлап ҡалып, Рәсәй составында һәм батша чиновниктары ҡулы аҫтында булыуҙарына ҡарамаҫтан, аҫабалыҡ хоҡуғы менән бер рәттән, ырыуара үҙидаралыҡ мөмкинлеге менән файҙалана. Өфө өйәҙе тип аталған хәлдә лә, Башҡорт илселәре үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн туранан-тура Мәскәүгә барып йөрөп, батша чиновниктары менән бәйләнешкә инә ала. Петр батша хакимиәте башҡорттарҙы ошондай мөмкинлектән мәхрүм итеү маҡсатында Өфө өйәҙен Ҡаҙан губернаһы властарына буйһондорорға ҡарар итә. Башҡорттарға артабан Мәскәүгә барып йөрөү тыйыла. Урындағы чиновниктар, яңы тәртип индерәбеҙ тип, башҡорттарҙы талай, ҡыйырһыта башлай. "Табышсы" ("прибыльщики") А. Жихарев һәм М. Дохов Ижор канцелярияһы исеменән табыш килтереүсе яңы 72 статья индереү хаҡында иғлан итә. Хатта кешеләрҙең күҙҙәренең төҫөнә ҡарап, һалым һалына: ҡара күҙлеләргә 2-шәр алтын, һоро күҙлеләргә - 8 алтын. Халыҡ был чиновниктарҙы туҡмап, Башҡортостандан ҡыуып ебәрә. 1705 йылда Өфөгә 8 полк драгун һәм һалдат полктары менән Ҡаҙан комиссары А. Сергеев килә, ул халыҡҡа үҙ ҡарарын иғлан итә: "...покуда де он в Уфе, будет то и Москва".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме иленә ҡайта

Шулай итеп, тыуып үҫкән ерҙәренән бик алыҫта, Северский Донец йылғаһының бейек ярында, Тыуған ил өсөн барған ҡанлы алышта 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 30 батыры һәләк була, әммә бер аҙым да артҡа сигенмәй. Ошо 30 яугир араһында Башҡорт иленән ике генә кеше булһа ла, интернациональ төркөм тап башҡорттарса алыша - был саҡта беҙҙең дивизияның данлы исеме бөтөн СССР-ға таралған була. Был батырҙарҙың үлеме 1941 йылдың көҙөндә Мәскәү янында совет һалдаттарының ҡаһарманлығынан һис кәм булмай.

Корпус командованиеһы атаевсыларға Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе юллай, әммә фронт кимәлендәге командирҙар быны артыҡ баһа, тип иҫәпләп, Герой исемен лейтенант Атаевҡа ғына бирергә ҡарар итә. 1943 йылдың 13 мартында Аннаклыч Атаевҡа үлгәндән һуң ошо юғары исем бирелә, а уның яугирҙары I дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына лайыҡ була. 1968 йылда, Аҡ Калитва ҡалаһын азат итеүгә 25 йыл тулыу уңайы менән, атаевсылар һәләк булған ҡалҡыулыҡта һәйкәл асыла, халыҡ был урынды "Үлемһеҙлек бейеклеге" тип атай башлай. Гәзитебеҙ биттәрендә ошо батырҙарҙың исемдәрен тағы ла бер тапҡыр иғлан итеү сауаплы булыр.

1. Атаев Аннаклыч Атаевич, лейтенант, 1-се сабельниктар эскадроны командиры, Төркмән АССР-ы Ташауз ҡалаһы.
2. Абрахманов Әкрәм, Ҡараҡалпаҡ АССР-ы, Ходжент районы, Шестая ауылы.
3. Агибаев Дәүләт, Ҡаҙаҡ АССР-ы, Балхаш ҡалаһы.
4. Әғзәмов Исмаил, Ташкент ҡалаһы.
5. Әминов Зөфәр, Башҡорт АССР-ы, Ҡандры районы, Бикмәт ауылы.
6. Азимов Рәхмәт, Сәмәрҡәнд ҡалаһы.
7. Астафьев Петр, Куйбышев өлкәһе, Базар-Сазган районы, Вороновская ауылы.
8. Атаханов Малик, Фирғәнә өлкәһе, Исаланхан ҡалаһы.
9. Баджигов Әмир, Үзбәк ССР-ы, Тайлуз районы.
10. Барсуков Александр, Краснодар крайы, Тимошенский районы, Ново-Корииценская станицаһы.
11. Биджаев Рәхим, Тайлурзак өлкәһе, Тайлурзак районы, Каралар ауыл советы.
12. Баймурадов Келуб, Таджик АССР-ы, Күктан районы, Париж Коммунаһы колхозы.
13. Бәширов Фазылйән, Башҡорт АССР-ы, Мәсетле районы (хәҙерге Балаҡатай районы), Яңы Мөслим ауылы.
14. Глухомань Игнат, Киев ҡалаһы.
15. Зияев Сәфәр, Бохара өлкәһе, Гиждуван ҡалаһы.
16. Илһамов Морат, Ташкент өлкәһе, Киров районы, Куйбышев ис. колхоз.
17. Кәримов Мәхмүт, Ташкент ҡалаһы.
18. Ҡасимов Ибелхарис, Бохара өлкәһе, Кассан районы, Майманаҡ ауыл советы.
19. Мягких Павел, Чита өлкәһе, Хахатуй станцияһы.
20. Молчанов Алексей, Көнбайыш Ҡаҙағстан өлкәһе, Ҡаҙағстан станцияһы.
21. Олейник Михаил, Украина, Каменец-Подольск өлкәһе, Яңы Ярусский районы, Ивашково ауылы.
22. Пайжаев Камил, Ташкент ҡалаһы.
23. Персиянов Гавриил, Тамбов өлкәһе, Кирсанов ҡалаһы.
24. Ситдиков Юлай, Ташкент өлкәһе, Орджонекидзе районы, Киров ауыл советы.
25. Титов Яков, лейтенант, Сталин (хәҙерге Донецк) өлкәһе, Чистяково ҡалаһы.
26. Тулаганов Дәүләт, Ташкент ҡалаһы.
27. Халуев Харитон, Украина, Сумы өлкәһе, Писаревский районы, Солдатовский ауыл советы.
28. Хәсәнов Ирек, Сәмәрҡәнд өлкәһе, Замин районы, Пшегор ауыл советы.
29. Юлдашев Икрам, Бохара өлкәһе, Шаферан районы, Денов ауылы.
30. Ишкабилов Бахран - мәғлүмәт билдәһеҙ.

Ошо батыр заттарҙың исемдәре онотолмаһын ине, уларҙың яҡташтарына, туған-тыумасаларына яҙҙар килгән һайын уларҙы иҫкә алып, хәтерҙәрен яңыртып тороу фарыҙдыр.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ "Мәңгелек урман"ды яҙғанда ситтән килеп беҙҙең урмандарҙы яулаусылар хаҡында бик һаҡ яҙғайным. Хәҙер бөтөнләй башҡа ситуация, әммә әҙәбиәт, нисектәр, тормоштан айырылды кеүек.*



**Һәр ҡайһыбыҙҙың мөғжизәле бала саҡ хәтирәләре уның исеме менән бәйле. "Ағиҙел" журналының сираттағы һаны килеүгә ғаилә ағзаларының иң йылғыры, иң өлгөрө йәһәт кенә баҫманы ҡулына эләктерә һалып, башҡалар күрмәгән урынға барып йәшенеп, унда баҫылған романды, повесты йә хикәйәне уҡырға тотона. Уҡып бөткәнсе баҫманы ҡулынан ысҡындырмай, үҙенә генә билдәле булған урынға йәшереп һалып ҡуя. Әҫәрҙә барған ваҡиғалар менән танышып сыҡҡандан һуң ғына ул журналды башҡалар таба алырлыҡ урынға һалып ҡуя. Бер нисә минуттан һуң журнал тағы бер нисә көнгә юғалып тора. Мөғжизә көтөү эстафетаһы ошо рәүешле дауам итә. Был саҡта ғаилә ағзаларын журналдың һанынан-һанына баҫылған романға бәйле шундай һорауҙар борсой булыр:**
**- Һөйгәне Карам артынан алыҫ Германиянан Башҡортостанға аяҡ баҫҡан Зильда-Заһиҙәне бында ниндәй тормош көтә, уны Карамдың туғандары нисек ҡаршы алыр, үҙ итерме?**
**- Төлкөсура Ахуновтың артабанғы яҙмышы нисек булыр? Һеңлеһе Миңлегөл яҙмыш һынауҙарын нисек үтер? Ғилман Төлкөсурин башҡорт урмандарын һаҡлап ҡала алырмы? Эйе, бында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, "Салауат Юлаев", "Ватан алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн", "Халыҡтар дуҫлығы" ордендары кавалеры Ноғман Мусиндың киң билдәле, уҡыусылар тарафынан тәү башлап "Ағиҙел"дә йылы ҡабул ителгән, әле булһын яратып уҡылған "Һайлап алған яҙмыш", "Мәңгелек урман" романдары хаҡында бара.**
**Быйыл Ноғман Сөләймән улы Мусин 90 йәшлек юбилейын билдәләй. Урмандарыбыҙға хас имәндәр ныҡлығы, хәтер теүәллеге, фекер үткерлеге, хәҡиҡәт саялығы хас халыҡ яҙыусыһына. Уның бынан 50-60 йыл элек булып үткән ваҡиғаларҙы кисә, бөгөн, әле генә булған һымаҡ һәр бер деталенә тиклем иҫләп һөйләүенә һоҡланмай мөмкин түгел.**

# ӘҘӘБИӘТЕБЕҘҘЕҢ МӘҢГЕЛЕК УРМАНЫ -

## Ноғман Сөләймән улы Мусин

**Ноғман ағай, нигеҙендә социаль тигеҙлек, намыҫлы хеҙмәт ятҡан ҡоролоштоң емерелеүе һөҙөмтәһендә беҙ күп нәмәне юғалттыҡ. Илебеҙ ҙә саҡ-саҡ емерелмәй ҡалды. Ғүмерегеҙҙең байтаҡ өлөшөн XX быуатта үткәргән, бала сағығыҙ һуғыш осорона тап килгән кеше булараҡ, һеҙ был үҙгәрештәрҙе нисек кисерҙегеҙ?**

- Илебеҙҙең иң матур дәүерҙәрен юғалттыҡ, уларҙы кире ҡайтарып та булмаҫ инде. Атай-олатайҙарыбыҙ меңәр йылдар буйына туплаған тәжрибәһенә таянып йәшәү юлынан кинәт тайпылдыҡ. Боронғо менән хәҙерге араһында бәйләнеш юғалды. Тормошобоҙҙоң ниндәй генә тармағын алып ҡараһаҡ та, юғалтыуҙарыбыҙ табыштарҙан күберәк. Рәсәй әҙәбиәтендә лә, беҙҙең әҙәбиәттә лә шундай уҡ күренеш күҙгә ташлана. Әҙәбиәттә лә үткән менән хәҙерге араһындағы бәйләнеш юҡҡа сыҡты.

Ошолар хаҡында уйлайым да, 90-сы йылдарҙан һуң ҡулыма ҡәләм ала алмайым. Элеккегә ҡарағанда иркенерәк фекер йөрөтөргә мөмкинлек тыуған хәлдә лә яҙылмай. "Мәңгелек урман"ды яҙғанда ситтән килеп беҙҙең урмандарҙы яулаусылар хаҡында бик һаҡ яҙғайным. Шуға күрә ысынбарлыҡ менән әҙәби фекерләүгә күберәк иғтибар бирҙем. Хәҙер бөтөнләй башҡа ситуация, әммә әҙәбиәт, нисектәр, тормоштан айырылды кеүек.

**Хәҡиҡәтте әйтеп биреү йәһәтенән, тура һүҙле кеше булараҡ, һеҙгә уның ҡыйын һөҙөмтәләрен дә күп татырға тура килгәндер инде...**

- Тура әйткән туғанына ярамаған, тиҙәр. Әммә кемдер берәү хәҡиҡәтте әйтергә тейеш бит инде. Миңә лә күп кенә тапҡырҙар тураһын әйтергә, бының кире һөҙөмтәләрен дә татырға тура килде. Салауат Юлаев премияһына дүрт тапҡыр тәҡдим ителеп, дүртенсеһендә генә ике кешегә бер премияны бүлеп бирергә, тигән ҡарар сығарып ҡуйҙылар. Тапшырған ваҡытта барып йөрөмәнем. Ишембайға юбилейыма ҡайтҡанда тапшырып ҡуйҙылар. Аҡсаһын да күпкә һуңлап алдым.

**Тормош хәҡиҡәте менән художестволылыҡ нисбәте хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

- Һәр әҙип тормошто үҙе аңлағанса әҫәренә индерә. Ләкин тормош ысынбарлығы ҡайһылыр яғы менән яҙыусыны ҡалып эсенә индерә, кинәйәгә, образдар системаһына күсерә. Яҙыусының оҫталығы хәҡиҡәтте художестволылыҡ аша уҡыусыға еткереүенә ҡайтып ҡала. Хәҡиҡәтте туранан-тура әйтеп биреү генә әҙиптең оҫталығын аңлатмай.

Һуңғы ваҡытта арабыҙҙан киткән ҡәләмдәштәребеҙҙең үкенесле яҙмыштары, яҙылмаған әҫәрҙәре, баһаланмаған таланттары хаҡында бик йыш уйланам. Ана шундайҙарҙың береһе ине Мәүлит Ямалетдинов. Ул вафат булғас, өс көн буйына йоҡлай алманым. Тәбиғәттән килгән иҫ киткес талантлы, ҙур әҙип ине ул. Төрлө яҡлап асылды, барлыҡ әҫәрҙәрен дә уҡып барҙым. Уны Салауат Юлаев премияһына тәҡдим иткәстәр, комиссияға ла яҙып бирҙем. Гәзиттә лә мәҡәләм баҫылды. Әммә иғтибарға алманылар. Премияға иң лайыҡлыһы ул ине. Тәғәйен баһаһын ала алмай китте Мәүлит. Ҡөрьән сүрәләренә шиғри аңлатмалар яҙыуы үҙе генә лә ни тора! Үҙе бөгөн үк сәхнәгә сығарырлыҡ сәсән, ҡурайсы һәм йырсы ине. Ҡайҙа барып бәрелергә белмәне. Әҙәби мөхиткә яҡыныраҡ булайым, тип ғаиләһе менән Өфөгә лә күсеп килде, төрлө урындарҙа эшләне. Ахыр сиктә, тыуған яғына кире ҡайтты.

Арабыҙҙа йөрөүсе яҙыусыларҙың ижадына ла битарафбыҙ. Барый Ноғоманов Силәбе өлкәһендәге Ҡыштым фажиғәһе булған урынға барып ҡайтҡас, унда кешегә оҡшамаған балыҡ башлы балалар тыуыуы хаҡында бынамын тигән ике повесть яҙҙы. Кешелеккә иҫкәртеү-һабаҡ булырлыҡ әҫәрҙәр ине улар. Иғтибар итмәнеләр.

Ғүмерем буйына башҡа яҙыусыларҙың бик күп әҫәрҙәрен уҡырға, уларҙы журналда баҫырлыҡ, китап итеп сығарырлыҡ кимәлгә еткерергә тура килде. Ҡайһы ваҡыт ул әҫәрҙәр үҙендә лә ижадҡа сәмләндерә. Айырым әҫәрҙәр буйынса яҙыусы менән әңгәмәләшеп ултырыуҙың да үҙ ләззәте бар. Һуңғы йылдарҙа ҙур әҫәрҙәр уҡый алмайым, күҙем ауырта. Шулай ҙа хикәйәләр уҡыштырам. Яңыраҡ Мәүлиҙә Әхмәтйәнованың "Ойоҡбаштар" тигән хикәйәһен уҡып һоҡландым. Шул тиклем камил әҫәр, теле йырлап тора. Яҙыусы булмаған, ауылда донъя көткәндәр араһында ла матур хикәйә яҙыусылар байтаҡ. Шуларҙы бергә туплап, китап итеп сығарырға ине, тип тә уйлап ҡуям.

Романдар уҡымайым, тиһәм дә, мөрәжәғәт иткәндәренекен уҡырға тырышам. Наил Ғәйетбайҙың "Бабич", Раят Вәлиевтың "Цех" романдарын уҡып, кәңәштәремде биреп, аҙаҡ улар "Ағиҙел"дә донъя күрҙе. Кемдәрҙең ниндәй әҫәрҙәрен уҡығанмын, барыһын да махсус дәфтәремдә теркәй барам. Унда хәҙер 70-ләп авторҙың әҫәрҙәре теркәлде.

Рәшит Солтангәрәевты юҡһынып йәшәйем. Шәп кеше, ысын яҙыусы ине ул. Эсендәге тышында булыуын ғына әйтмәйем, уның менән һөйләшеүе рәхәт, үҙе бер байрам һымаҡ булыр ине. Иҫән сағында уҡ халыҡ яҙыусыһы исеменә лайыҡлы ине Рәшит Солтангәрәев. Тик беҙҙә әҙип был исемгә лайыҡлы булыр өсөн мотлаҡ рәүештә иҫән булырға тейеш.

**Наил ағай Ғәйетбайҙың романы миңә Бабичтың образын яңыса асыу йәһәтенән оҡшағайны. Юғиһә, беҙ шағирҙы Вәлиди артынан эйәреп йөрөүсе, юлбашсының ауыҙына ҡарап шиғыр яҙыусы, тик сәйәсәт хаҡында ғына ҡайғыртыусы итеп күҙаллай инек. Бабич та бит дәрте ташып торған йәш егет булған, уның да яратылырға, яратырға, хаталанырға хаҡы бар. Ә инде Раяттың "Цех"ына килгәндә, цех романда заводтың, комбинаттың айырым өлөшө генә түгел, унда кешеләр һәм халыҡтар араһындағы мөнәсәбәттәр цехы ла. Шулай бит?**

- Тап шулай. Унда хатта бигерәк асыҡ һәм киң планда бирелгән мөхәббәт цехы ла бар. Мин ул өлөштәрен Раят туғаныма ҡыҫҡартырға ҡуштым...

**Мөхәббәт, тигәндән, Ноғман ағай, үҙегеҙҙең ғүмерлек мөхәббәтегеҙ хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

- Ғүмерлек мөхәббәтем Фәимә инде ул. Беҙ уның менән Маҡар мәктәбендә 9-сы кластан алып бергә уҡыныҡ. Стәрлетамаҡ педагогия институтын бергә тамамланыҡ. Ул саҡта уҡыу йортон тамамлағандан һуң йүнәлтмә буйынса эшләү мәжбүри ине. Фәимәне Бөрйәнгә, мине тыуған яғыма ебәрҙеләр. Шул арала мине армияға алдылар, яҙмыш буласаҡ кәләшем менән мине байтаҡ ваҡытҡа айырып торҙо. Һынауҙы икебеҙ ҙә лайыҡлы үттек, өйләнештек, ғүмеребеҙҙең ҡалған өлөшөн баш ҡалабыҙға бәйләнек. Фәрзәнә, Гөлшат исемле ҡыҙҙарыбыҙ тыуҙы.

**Ноғман ағай, балта оҫтаһы булараҡ, үҙ ғүмерегеҙҙә барлығы нисә йорт һалдығыҙ?**

- Етенсене бөткән йыл ун дүрт йәшемдә тәүге тапҡыр үҙаллы бура бураным. Уға тиклем өлкәндәргә ярҙам итешкәндәрҙе иҫәпкә алмағанда. Оло апайыма ла үҙ ҡулым менән йорт һалып бирҙем. Мин бураған мунса, аласыҡтарҙың иҫәбе-һаны юҡ инде ул. Өфөгә килгәс, үҙемә ике йорт һалдым.

**Урман психологияһын яҡшы аңлаған кеше булараҡ, урманға ингәндә үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ? Нимә генә тимә, урман кешене ышыҡлай, һаҡлай бит инде...**

- Үҙ донъяма, йортома барып ингәндәй тоям үҙемде. Донъялыҡтың меңәрләгән ваҡ мәшәҡәттәре шундуҡ онотола, күңелем тыныслыҡ, йәм таба. Урман кешеһенең холҡо ла тәбиғәттең үҙе шикелле тойола миңә. Мин урман кешеһен бер ауыҙ һүҙ әйтмәһә лә, шундуҡ танийым, ул дала кешеһенән ныҡ айырыла. Урман кешене үҙе тәрбиәләй, үҙенә ҡарата һаҡ булыуынды талап итә. Урман кешеһе уның эсенә барып ингәндән һуң һис ҡасан булмағанса фекер йөрөтә башлай. Тағы ла шуныһы: насар уй менән урманға барып инеүсене аҙаштыра ла ул урман.

**Мин тағы ла бер хәлгә иғтибар иткәнем бар: дүрт яғынан да терәлеп һөрөлгән ялан ерендәге ауыл кешеһе йәшәр өсөн төрлө мөмкинлектәр эҙләп, йыш ғына сит яҡтарға китеп олағыусан. Ә инде өҫтөнә ағас ҡолап торған урман араһындағы ауыл кешеһе, тәбиғәт барыһын да биргәс, вайымһыҙыраҡ та. Һеҙгә ошо хәл нисек тойола?**

- Булғандың ҡәҙере лә кәмерәк шул. Шулай ҙа тыуған ауылдарын ташлап китеүселәр

*Тура әйткән туғанына ярамаған, тиҙәр. Әммә кемдер берәү хәҡиҡәтте әйтергә тейеш бит инде. Миңә лә күп кенә тапҡырҙар тураһын әйтергә, бының кире һөҙөмтәләрен дә татырға тура килде. Салауат Юлаев премияһына дүрт тапҡыр тәҡдим ителеп, дүртенсеһендә генә ике кешегә бер премияны бүлеп бирергә, тигән ҡарар сығарып ҡуйҙылар. Тапшырған ваҡытта барып йөрөмәнем. Ишембайға юбилейыма ҡайтҡанда тапшырып ҡуйҙылар. Аҡсаһын да күпкә һуңлап алдым.*

*✓ Урман кешене үҙе тәрбиәләй. Урман кешеһе уның эсенә барып ингәндән һуң һис ҡасан булмағанса фекер йөрөтә башлай. Тағы ла шуныһы: насар уй менән урманға барып инеүсене аҙаштыра ла ул урман.*



араһында урман кешеләре әҙерәктер тип уйлайым.

**Урманда айыу менән йөҙмә-йөҙ осрашҡанығыҙ булдымы?**

- Бер тапҡыр ғына булды. Бер йылы декабрь айында ауылға ҡайттым. Ҡыш уртаһы булһа ла, һаман ҡар яумаған йыл ине. Шунда айыу һунарсылары мине үҙе менән ауға алды. Алама ғына булһа ла, мылтыҡ тотторол ҡуйҙылар. Айыу өңөнән килеп сыҡҡайны, атып ебәрҙек. Мин дә тоҫмал менән тәтегә баҫтым.

**"Мәңгелек урман" романығыҙҙың тәүге вариантында ауыр яҙмышҡа дусар булған Төлкөсураның һеңлеһе Миңлегөл үҙ-үҙенә ҡул һала. Артабанғы китабығыҙҙа Миңлегөл иҫән ҡала. Быны сере нимәлә?**

- Элек тормош нисек кенә ауыр булмаһын, аҫылынып үлеү, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-үҙенә ҡул һалыу бөтөнләй булмаған. Дини күҙлектән ҡарағанда ла Хоҙай биргән ғүмерҙе өҙөү иң ҙур гонаһ һаналған. Икенсенән, Төлкөсураның һеңлеһе Миңлегөл шул юлға барһа, азатлыҡ өсөн көрәшкән ҡаһарман йөрәкле ағаһын кәмһетер ине.

**Бер әңгәмәгеҙҙә һеҙ Алдар батырҙы Салауат Юлаевҡа тиң шәхес тип әйтәһегеҙ. Быйдай фекер буш урында ғына барлыҡҡа килмәгәндер инде.**

- Салауат батыр шағир, старшина улы, ғәскәрен Пугачевҡа алып килеп ҡушылған көрәшсе. Ә Алдар батыр 1704-1711 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе генә түгел, ил кимәлендәге йәмәғәт эшмәкәре лә, сәйәсмән дә, илсе лә. Ни өсөн Алдар батыр ихтилалдан һуң иҫән ҡала? Әйтергә кәрәк, батша властары башҡорттар ҡуйған талаптарҙы үтәргә мәжбүр була. Был хәл шуны аңлата: Алдар батыр батшалыҡҡа ҡаршы көрәштә еңеүгә өлгәшә, әммә ҡарағалпаҡтарҙың һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙың хыянаты арҡаһында ул ҡабыҙған ихтилал уты йәлап һүрелеүгә дусар ителә. Алдар батыр башҡорт халҡының батыры ғына түгел, Рәсәй геройы ла. Азов походында черкесты еңеп, оло батырыҡ күрһәтә һәм Петр Беренсе тарафынан бүләкләнә. Аҙаҡтан Ҡаҙағстанда Рус батшалығы вәкәләтлеген ойоштороуҙа ла туранан-тура ҡатнаша. Ҡараһаҡал яуы башланғас та, Алдар батыр уға ҡаршы төшә, был ихтилал башҡорт халҡының күпләп ҡырылыуына алып килерен әйтеп бирә.

Мин Алдар батырҙы данлап, Салауаттың тарихи ролен һис тә кәметергә теләмәйем. Батырҙарыбыҙ бик күп булған, уларҙың ҡайһыларының хатта, роман яҙыу түгел, исемдәрен дә телгә алмайбыҙ. Әйтәйек, Йосоп, Сәйет һымаҡ батырҙар...

**Аҫылғужа ағай яҙа башланы ла, өлгөрмәне, хатта Салауатыбыҙ тураһында ла башкорт яҙыусыһының романы юҡ бит, Ноғман ағай...**

- Эйе, Степан Злобин яҙғаны менән генә ризалашабыҙ.

**Мирас ағай Иҙелбаев Злобин романында ике генә факт дөрөҫлөккә тап килә, ти. Тәүгеһе - Юлай Салауаттың атаһы, икенсеһе - Салауат ғәскәрен Пугачевҡа алып барып ҡуша...**

- Ғәли Ибраһимовтың тәүге ике китабы Кинйә Арыҫланов тураһында. Өсөнсө китабы Салауат Юлаев тураһында булырға тейеш ине. Өлгөрмәне. Батырҙарыбыҙҙы күтәреү һәр төрлө һөйләшеүҙән мең артыҡ булыр ине. Бөйөк Ватан һуғышында Шайморатовтан башҡа ла батырҙарыбыҙ күп булған.

**90 йыллыҡ ғүмерегеҙҙең иң сағыуҙары ҡайһы йылдар һәм ни өсөн шулай?**

- Дәртләнеп, донъяны онотоп эшләгән 70-се йылдар. Рәис Низамов "Ағиҙел"дең баш мөхәррире ине. Уға: "Бер айға яҙышыр өсөн ялға китәм", - тигәйнем, ул: "Атыу бөтөнләйгә кит, минә кәрәгең юҡ", - тип яуапланы. Беренсе планға ижадыңды ҡуймайынса, яҡшы әҫәр яҙып булмай. Сабир Шәрипов үҙенең тыуған ауылы тураһындағы романын хатта телдән һөйләп йөрөй торғайны. Алтмышы тулғас: "Нишләп эшләп йөрөйһең, яҙмайһың?" - тигәйнем, үҙ алдына нимәләр һөйләнде лә, яҙманы ла ҡуйҙы. Себер яғында йөрөүе хаҡында тағы бер роман яҙырға тейеш ине. Беҙ, яҙыусылар, эш урыны менән алданабыҙ, ижадты төп маҡсат итеп ҡуя белмәйбеҙ. Мин хатта ҡыш көнө баҡсаға барып, бөрәр ай ятып яҙыша торғайным.

тәрендә "Ағиҙел" сыға торғайны. Ғәли ағай Ибраһимов бер саҡ: "Кеше иң күп ҡулына алған нәмә шырпы, әйҙә, шырпы тышына "Ағиҙел"де ҡуяйыҡ", - тигән тәҡдим индерҙе. Барҙыҡ шырпы комбинатына, һөйләштек. Ике йыл буйына "Ағиҙел" шырпыһы сыҡты. Һөҙөмтәлә тиражыбыҙ 60 меңгә барып етте.

**Хәтерегеҙҙе нисек ныҡытаһығыҙ? Үҙегеҙ шаһит булған ваҡиғаларҙы бәләкәй генә деталдәре менән нисек иҫләй алаһығыҙ?**

- Теге йәки был ваҡиға, әҫәрендәге сюжет линиялары тураһында ҡат-ҡат, туктауһыҙ уйланыуҙан нығыналыр ул хәтер? Әһәмиәте булмаған нәмәне шундуҡ онотаһындыр.

**Кеше мейеһенән башлап ҡартая, тиҙәр. Бәлки, һеҙгә уйланып йәшәү ярҙам итәлер?**



эпизод шул тиклем ҡыҙыҡлы булыусан. Уны әҫәргә индереп тә, ташлап та булмай. Шундай сюжеттарымды дәфтәргә теркәй барғайным. Ана шуларҙы ҡайтанан ҡарап уҡып, ҡатыным янында ултырғанда ете хикәйә яҙҙым.

**Ҡатынығыҙ һеҙгә ниндәй васыят һүҙҙәре әйтте?**

- Һиңә ышанам, балаларға ауырлыҡ килтермә, тине. Хәҙер уның ҡәбере оло ҡыҙыбыҙҙыҡы менән бер зыяратта.

*Оҙаҡ йәшәүемдең сере иң беренсе нәүбәттә туҡтауһыҙ эш менән булыуымдалыр, тормошомдо дөрөҫ итеп ойоштороуымдалыр. Башҡарасаҡ ғәмәлемде изге ниәткә ҡороуымдалыр. Балаларыма таяныс була алыуымда, уларҙың миңә таяныс булыуында. Мин атайһыҙ етем үҫтем, һәр ваҡыт йәшәү көсөн үҙемдә уятырға, табырға тура килде. Шул һәләтем дә ҡартайған сағымда ярҙам итәлер. Хәрәкәттә - бәрәкәт. Физик эшһеҙ тора алмайым. Баҡсаға сығып, бер биҙрә картуф ултыртыу ҙа миңә оло шатлыҡ.*

**Һеҙ Хәким ағай Ғиләжев менән дуҫ булғанһығыҙ бит инде. "Әҙәби Башҡортостан" журналына "Ағиҙел" исемен биреүсе лә, баҫманың тиражын арттырыусы ла ул булған...**

- Эйе, мин Хәким ағайҙы бер ваҡытта ла ташламаным. Баҡсаға барғанда һунарға сыға инем. Берәй ҡуян атһам, Хәким ағайға алып бара торғайным. 1958 йылда журналдың тиражы 2800 дана ғына ине. Хәким ағай 44 мең итеп китте. Ғәли Ибраһимов ағай яуаплы сәркәтип булып эшләгәндә журнал йәкмәткеһен йәнләндереү буйынса ҙур өлөш индерҙе. Мин райондарҙа командировкаларҙа йөрөп, 1-се секретарҙарҙан материалдар ойоштора торғайным. Ул саҡта яҙыусы Ғәзим Аллаяров ағай Ҡырмыҫҡалы районында 1-се секретарь ине. Осрашыуҙа ул: "Хәкимгә әйт, журналды Ҡырмыҫҡалы ауылдарындағы барлыҡ йорттарҙа ла алдырасаҡтар", - тине. Шунан мине Илешкә ебәрҙеләр. Унда ла тираж күтәрелде. Подписка башланыр алдынан район гәзит-

**Хоҙай менән мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

- Минең диндән бер ваҡытта ла айырылғаным булманы. Әсәйем бай ҡыҙы булған, шул тиклем диндар кеше ине. Ҡөрьәнде ятҡа белде. Дини йола үтәүгә күп саҡырҙылар, әммә уларҙың бөтәһенә лә йөрөмәне. Уның өйрәткән доғаларын һәр ваҡыт ҡабатлап йөрөйөм.

**Оҙаҡ йәшәүегеҙҙең сере нимәлә? Быны үҙегеҙгә генә хас ысулдары бармы?**

- Иң беренсе нәүбәттә туҡтауһыҙ эш менән булыуымдалыр, тормошомдо дөрөҫ итеп ойоштороуымдалыр. Башҡарасаҡ ғәмәлемде изге ниәткә ҡороуымдалыр. Балаларыма таяныс була алыуымда, уларҙың миңә таяныс булыуында. Мин атайһыҙ етем үҫтем, һәр ваҡыт йәшәү көсөн үҙемдә уятырға, табырға тура килде. Шул һәләтем дә ҡартайған сағымда ярҙам итәлер. Хәрәкәттә - бәрәкәт. Физик эшһеҙ тора алмайым. Баҡсаға сығып, бер биҙрә картуф ултыртыу ҙа миңә оло шатлыҡ.

- Һин әйткән нәмәне бер һүҙ менән вайымһыҙлыҡ тиҙәр. Вайымһыҙ кеше утыҙ йәштә лә ҡарт, вайымы булғаны 100 йәштә лә йәш. Ҡайһы ваҡыт уйҙарымдың осона сығып етә алмайынса, таң атҡанын да һиҙмәй ҡалам.

**Ҙур кимәлдә алғанда йәшәүҙең мәғәнәһе лә юҡ һымаҡ. Балалар өсөн йәшәргә кәрәк, тиер инең, уларҙы ла һинең кеүек ғүмер ахыры көтә. Нимәгәлер өлгәшһәң дә, өлгәшмәһәң дә, финиш бер төрлө. Һеҙҙенсә йәшәүҙең мәғәнәһе нимәлә?**

- Мин дә ул хаҡта йыш уйланам. Әле туҡһандамын, әгәр ҙә йөҙгә тиклем барып етһәм, арьяғына нимә тип йәшәргә ҡала икән? Нимә эшләрмен икән? Картуф ултыртып йөрөрмөнмө? Нимә яҙырмын икән? Кемгә кәрәгем булыр ине икән?

Хәҙер мин барыһы хаҡында ла уйлайым. Фәимә ауырый башлағас, түшәктә туғыҙ йыл ятты. Уның янында ултырғанда тормош тураһында күп уйландым. Ҙур әҫәр яҙғанда бер

**Әхирәттең, теге донъяның барлығына ышанаһығыҙмы?**

- Дин бит уны инҡар итмәй, шуға күрә барҙыр тип уйлайым. Шулай уҡ параллель донъялар, икенсе ғаләмдәр ҙә бар. Теге донъяла йәшәү ҙә аң дәрәжәһендәлер тип уйлайым. Ҡөрьәндә лә кешенең йәне үлә тип яҙылмай. Теге донъяға барғас, белербеҙ тип уйлайым. Унан ҡайтҡан кеше юҡ, моғайын, унда насар түгелдер. Үҙем дә васыят яҙып һалып ҡуйғанмын: донъя ҡуйғас, тыуған ауылымда ятырға теләгемде белдерҙем.

**Әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт Ноғман ағай, юбилейығыҙ ҡотло булһын!**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**90 йәшлек бер ҡарт өй ҙурлыҡ таш өҫтөндә ултыра икән. Уның хәлен, һаулығын һорашҡандар икән:**

**- Үҙемде 20 йәшлек үҫмерҙәй тоям, - тип яуаплаған ҡарт.**

**- Нисек инде 20 йәшлек үҫмер кеүек? - тип унан йәнә һорағандар.**

**- Бынау ташты 20 йәшемдә дә күтәрә алмай инем, хәҙер ҙә көсөм етмәй, - тигән ҡарт мут йылмайып.**

**Ә беҙҙең Ноғман ағайыбыҙ 20 йәшендә лә, хәҙер ҙә шул ташты күтәрә алыусылар тоҡомонан. Собханаллаһ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бер ниндәй хәүеф тоймайынса вайымһыҙ килгән йәйәүле һалдаттар шул әҙере ян-яҡҡа һибелә һалып, ут асыу өсөн уңайлы урындар эҙләне. Улар бит теүәл бер немец батальонына ҡаршы өс совет һалдаты торғанлығын әле белмәй.***




Балалар, тигәндәй, улары әлеге мәлдә ни эшләп йөрөгән була икән? Ни эшләһендәр, өлкәндәре бар хәлдәренсә әсәләренә булышалыр. Ә ике йәшлек Фәриҙәһе, моғайын, тәпәй баҫырға өйрәнгәндер. Ун бер йәшен тултырған бер бөртөк кенә улы - Мөҙәрисе уҡыуға шәп, һунарға әүәҫ ине. Ғаиләне бағыусы булыр. Зәбирәһе - баш ҡыҙҙары, инде Фәүзиәһенең ҡул аҫтына инерлек, ярҙамынан ҡалдырмайҙыр. Һәләк сос, тиктормаҫ Сәкинәһе менән Фәрзәнәһе урамдан ҡайтып инмәйҙәрҙер. Уларҙың бит әле уйнап туймаҫ саҡтары. Аһ, балаҡайҙар, атайығыҙҙың ниндәй аянысллы хәлдә тороп ҡалғаны һеҙҙең башығыҙға ла инеп сыҡмайҙыр. Инмәһен дә. Әлегә һеҙгә атайҙың инде юҡлығын белмәй тороу хәйерлерәк. Сабый йәнен ҡыйып, рухын ҡаҡшатмаҫ өсөн. Атай хәтерегеҙгә һуңыраҡ төшәсәк. Башығыҙға бер аҙ аҡыл ултырғас. Ул мәлдә инде бирешмәҫһегеҙ. Сөнки буйтым ғына үҫерһегеҙ. Һеҙ ҙур һәм бәхетле булырһығыҙ. Һеҙҙе, шул бәхетле итер өсөн ғүмеремде бирәм түгелме һуң...

Хәйриваранның әллә ҡайҙарға китеп олаҡҡан уйҙарын Лоҡман бүлдерҙе:

- Ағый, етеп киләләр ҙаһа.

Ағайы өндәшмәне, бер күҙен ҡыҫа бирҙе лә көсәнә-көсәнә иң алдан шыуышҡан танкты ПТР мушкаһына алды. Хәҙер, хәҙер беренсе пуляны сәпкә ебәрәсәк һәм уның баһадир һалдаттары дошман пехотаһын пулемёт менән һыпырырға тотонор. Ҡыҙыҡ, нисәүҙе йығып өлгөрөрҙәр икән? Хәҙер, дүрт-биш тиҫтә тонналыҡ тимер ғифрит саҡ ҡына ҡабырғаһын күрһәтһә. Күрһәтте...

Ҡолаҡ тондорғос яңғыҙ атыу тауышы урманды яңғыратыуға, күҙ асып йомған арала, теге танкты ялҡын ялмап алды. Ҡорос пуля, күрәһең, тура трансмиссияға эләкте. Бер ниндәй хәүеф тоймайынса вайымһыҙ килгән йәйәүле һалдаттар шул әҙере ян-яҡҡа һибелә һалып, ут асыу өсөн уңайлы урындар эҙләне. Улар бит теүәл бер немец батальонына ҡаршы өс совет һалдаты торғанлығын әле белмәй. Аҡ ҡар өҫтөндә ҡапыл ғына ышыҡ урын табыуы ла анһат түгел. Ҡотһоҙ-һоро фигуралар унда-бында боҫоп өлгөргәнсе, нығыш Лоҡман менән яндырай Солтан уларҙың хәтһеҙен ҡырып һалды. Ә ул арала Нөғәмәнов йәнә бер танкты яндырҙы. Унан сират ала-ҡола буяулы БТР-ға етте. Уныһы ут бөркөп гөлт итте лә, эсендәге автоматсылары сатай-ботай килеп күккә осто. Лоҡман менән Солтан айбарланып атыуҙарын белделәр.

- Егеттәрем, бирешмәгеҙ! Афаринда-ар! - старшина боецтарын ҡанатландырып һөрән һалды. - Туҡмағыҙ ысвулышты! Фашистың кәрәгенә бирегеҙ! Эҙләгәнен алһын әйҙә. Беҙ ғүмеребеҙҙе осһоҙға ғына бирергә тейеш түге-ел! Ҡанға - ҡа-ан!..

Ошо мәл старшина Нөғәмәновтың артындағы ҡар өйөмө ҡапыл ойоҫҡоп өҫкә күтәрелде лә, ҡот осҡос ауыртыу арҡаһын өтөп алды. Нимә булғанын аңлап өлгөргәнсе ул һуштан яҙҙы...

Юҡ, һуштан яҙмаған икән. Ул әле тойорға һәләтле. Хатта күрә лә һымаҡ. Күрә шул! Ана, һалҡын таш ҡыҫалам-коридорға килеп инде. Коридор осонда һүрән генә яҡтылыҡ күренә. Шуға етеп ҡалғанда... Бәй, бында ниндәйҙер сәйер йәндәр осоп йөрөй. Ә-ә, яуҙа шәһит киткәндәр менән яуыздарҙың йәндәре икән. Арыраҡ фәрештәләр күренә. Уларҙың иң өлкәне, иң дәрәжәлеһе ишек янына урынлашып алған да: "Бынһын ожмахҡа, бынһын тамуҡҡа", - тип һамаҡлап ултыра. Ожмахҡа тигәне - беҙҙең һалдаттар, тамуҡҡа тигәне - фашистар икән. Шулай ҙа тамуҡ юлында совет формаһындағылары ла күренгеләп ҡала. Былары, үҙенең ғәзиз йәнен ҡотҡармаҡҡа тыуған илен һатҡандар. Эйе, яҡшылығы ла, яманлығы ла ҡасан да булһа барыбер тейешле баһаһын ала. Ғәҙел хөкөмдән ҡайҙа ла ҡотолоп булмай...

Теге фәрештә Хәйриваранны күреп ҡалды ла:

- Бынһын ожмахтың иң түренә! - тип арҡаһынан ҡаҡты, - ул быға лайыҡ.

Ошо ҡағылыу Хәйриваранны асылына ҡайтарҙы. Иҫе килделе-киттеле ятҡан старшина күпме ваҡыт үткәнлеген дә самалай алмай. Ул нығ, ифрат нығ сарсаған. Аһ, бер генә йотом һыу булғанда. Уның бит Ғазраил хөкөмөн көтөп, ошо хәлдә ятҡан иптәшенең кипкән иренен сылатып ултырғаны булды, ә үҙенекен сылатыусы юҡ.

Теге, райсовет рәйесенең бажаһы һуғыштың башында уҡ һәләк булған тинеләр. Ул да ошолайтып яттымы икән, әллә ғазапланмайынса ғына?.. Шулай, һуғыш һинең кем икәнлегеңә ҡарап тормай. Райсовет рәйесе бажаһы нимә ул, яу ҡырында хатта дәү генералдар баш һала...

Яралы, аҡтыҡ көсөн туплап сикһеҙ ауырайған ҡабаҡтарын аса төшкәйне обоздар тирәһендә ҡайнашҡан немецтарҙы шәйләне. Улар йылтырауыҡ-аҡһыл томан эсендә йыбырлашалар. Үҙҙәре бер туҡтауһыҙ лауылдаша. Телдәрен аңлармын тимә. Хәйер, Нөғәмәнов әле ят һөйләште түгел, үҙ телен дә төшөнөрлөк хәлдә түгел ине. Уның умыртҡа бағанаһы өҙөлгән дә кәүҙәһенең аҫҡы өлөшө хәрәкәтһеҙ ҡалған. Тимәк, билен снаряд ярсығы ҡырҡа һуҡҡан. Ҡыбырларға итә, булдыра алмай. Бары үҙәккә үткәргес һыҙланыу ғына. Һыҙланыу һәм үкенес. Ул һиҙә: бер ваҡытта ла һынатмаған йөрәге һуңғы тибештәрен яһай, сөнки ҡаны бөтөү өҫтөндә. Үпкәләре һуңғы һулыштарын ала, сөнки тишкеләнеп бөткән. Һуғышта ғүмер ахыры ана шулай килә икән. Эй, ғүмер! Ҡалай ҡыҫҡа булдың һин, ә. Матур төш кеүек кенә күренеп ҡалдың да йылп итеп үттең дә киттең. Танһыҡты ла ҡандырманың. Һуғышҡа китер алдынан күтәргән уҫаҡ өйөндә уны дүрт ҡыҙы менән яңғыҙ бөртөк улы көтөп бер булырҙар инде. Һағынып бөтөрҙәр. Ярай әле өйөн төҙөп өлгөргән. Балалары аяҡҡа ҡалғандар бөтә ил менән Бөйөк Еңеү тантанаһына йыйылырҙар. Ана шунда, бүтәндәр рәтендә беҙҙе лә иҫкә алырҙар. Алмай ҡалмаҫтар. Йылы һүҙ, өмөт иткән изге доға менән генә булһа ла. Беҙгә, изге юлда шәһит киткәндәргә, шуныһы ла ярап ҡалыр. Беҙгә артығы кәрәкмәҫ. Доға һуңынан, илем-ерем, тип баш һалған һалдаттарҙың рухтары әйләнеп ҡайта торор, ерҙәгеләрҙең эшен күреп, ризалыҡ менән күктең етенсе ҡатына күтәрелә торор. Әлеге хөрмәт билдәһе, бәлки, йыл да ҡабатланыр, ә бәлки... Юҡ, юҡ, яңылыш уйлай яҙҙым, беҙҙе онотмаҫтар. Онотоорға хаҡтары юҡ. Бына балалар ғына йәл, атайһыҙ үҫерҙәр. Әсәйҙәре инә арыҫлан кеүек тә ул, йәне сыҡһа сығыр, йәбергә бирмәҫ, меҫкенләнеп ҡалырға ла юл ҡуймаҫ. Шулай ҙа атай юҡлығы үҙен һиҙҙерер. Нығ һиҙҙерәсәк.

Әтегеләр ҡайҙа? Лоҡман менән Солтан. Уларға ни булған? Күренмәйҙәр. Иҫәр, нисек күренһендәр, анауындай ғәскәр ябырылғанда ике бөртөк кешең ни ҡыла алһын. Көскә ҡаршы көс кәрәк. Әлбиттә, батырҙарса һәләк булғандарҙыр. Эйе, эйе, әсир төшмәгәндәр, ә фәҡәт һәләк булғандар. Азат илдә, исемемде бысратмайым тиһәң, әсир төшөргә ярамай. Ниндәй хәлдә булһа ла, әсир төшкәндәр беҙҙә һатлыҡ йән һанала. Һатлыҡ йән - ниндәй ҡурҡыныс!

Киләсәктә балаларының бәхете хаҡына фашисты мөмкин тиклем күберәк ҡырырға ине лә бит, килеп сыҡманы. Хәйер, сыҡманы тип... Хәйривара булмышы менән ҡулында ниҙер барлығын тоя. Ә-ә, теге, шартлатҡысҡа тағылған бауҙың осо икән. Һай, мәрҙәс, алыш алдынан шуны ҡулына урап ҡуйырға башы еткән. Бына хәҙер ҡарап ҡарарбыҙ: кем - кемде.

Баҫҡынсылар, йылы һыйыр тиҙәгенә йыйылған себен ише, обоздар тирәһенә өймәкләшкән. Хәсистәр, машиналарға мина ҡуйылғанлығын белмәйенсә, үҙ әжәлдәрен үҙҙәре эҙләй.

Хәйриваранның былай ҙа томанланған күҙҙәре бөтөнләй күрмәҫ сиккә етте. Хәле мөшкөл: хәҙер, хәҙер генә тағы иҫен юғалтасаҡ. Башҡаса аңына әллә килә ала, әллә юҡ. Эх, фашистар имен ҡала. Ана улар ҡул һуҙымы арауыҡта ғына мыжғыша.

Ҡанға ҡойоноп ятҡан старшина ҡарға күмеп ҡалдырылған бауҙы тарта бирҙе. Хәле етеңкерәмәне. Шартлатҡыс хәрәкәткә килмәне. Шул арала Хәйриваранның мөсһөҙ генә ҡыймылдап ҡуйғанын күҙ ҡыры менән шәйләп алған немец офицеры әйләнә килеп уның маңлайына пистолеттан атты. Ҡурғаш киҫәге совет һалдатының мейеһенә инеп ултырҙы. Мәңгелеккә! Хәҙер уның башы бөтөнләй эшкә яраҡһыҙ. Ул әле, бары, көскә һулҡылдаған йөрәге менән генә тоя - фашистарҙы күберәк ҡырып ҡалыу кәрәк, фашисты күберәк... Бына йөрәге лә тибеүҙән туҡтаны шикелле. Хәҙер инде йөрәк тамырының сираты етте. Аҡтыҡ ҡан тамсыларын ул ҡыуа башланы.

Хәйриваранның бау уралған ҡулы киҫкен рәүештә тартышып ҡуйҙы ла ғәзиз йәне тәненән сығып осто. Ошо мәл иҫ китктес көслө шартлауҙан ер һелкенде. Тиҫтә ярым тоннанан ашыу снаряд бер юлы ярылып, үҙҙәренең тирәһендәге бар нәмәнең ҡайһыһын һауаға сойорғотто, ҡайһыһын ҡыра һуҡты. Айбарланып, ғәйрәтле ут ҡатыш ҡар һыуы менән ҡара ҡан буталышты. Юғарыла тимер-томор киҫәктәре, таҡта ярсыҡтары араһында болғанлап йөрөгән кеше ағзалары күренеп ҡалды ла ит ямғыры булып ергә яуҙы. Ахырҙа, асыҡлыҡ тәңгәлендә ғәйәт ҙур дөмҡара төтөн бәшмәге хасил булды һәм... бәғерҙе иҙгес тынлыҡ урынлашты: яҡын-тирәлә тауыш биргәндәй бөртөк йән әйәһе ҡалмаған.

Был ваҡытта ҡамауҙан сыҡҡан батальон алыҫтағы ҡалҡыулыҡ түбәһендә ине. Йәмғеһе... алты кеше. Биш йөҙҙән - алтау! Яман гөрһөлдәүгә тертләшеп, арттарына ҡаранылар.

- Йәнегеҙ йәннәттә булһын, яугирҙарым! - Кәпәсен йомарлап тотҡан комбаттың сәнскеле сикәләре буйлап ике бөртөк тамсы тәгәрәне. - Ҡаһармандар, Тыуған ил һеҙҙе онотмаҫ!

Биш кешелек, әммә намыҫын һаҡлап ҡалған "батальон", уға эйәреп, батырҙарға баш эйҙе.

* * *

Мәскәү янында контрһөжүм башланып, бер нисә көн уҙыуға беҙҙең частар старшина Нөғәмәновтың беренсе һәм аҙаҡҡы алышын ҡабул иткән ергә килеп сыҡты. Ҡаһарман өс башҡорттоң һуңғы яу баҫҡансы ҡыйыҡлы буласаҡтар, исмаһам. Ҡыш сығырлыҡ арышы менән бесәнен дә әҙерләп киткәйне...

Утыҙ биш йәшендә итәк тулы бала менән тол ҡалған Фәүзиәһе тәҙрәнән күҙҙәрен алмаҫ. Фәүзиә лә һағыныр, өмөтләнер, көтөр. Шым ғына көтөр. Ул-был тауыш ишетелеп ҡалған һайын ҡорғанды күтәрер. Тәҙрә артында бер кемде лә күрмәгәс, ҡапыл-ҡара ярһып киткән йөрәген баҫа алмайынса аҙапланыр. Уның йөрәге насарыраҡ ине.

Башҡа яҡындары ла өмөт өҙмәҫ. Шөкөр, туғандары уның күп, онотмаҫтар. Ошо рәүешле оҙаҡ йылдар дауам итер. Ғазраил фәрештә берәм-берәм барыһын сүпләп бөткәнсе. Ә уға тиклем әле еңеү көнө килер, килмәй ҡалмаҫ. Беҙҙең еңеү! Әрәсәй еренә баҫып ингән бер кемдең дә әле ошоғаса еңеүҙе байрам итә алғаны юҡ. Бына күреп торорһоң, был юлы ла шулай буласаҡ. Тере урынындағы күренеш йән өшөткөс ине: бөтөнөһө көл-күмергә әйләнгән. Был урында кәмендә генә бер батальон немец һалдаттары ҡырып һалынған. Күберәк булмаһа. Уларына һаман көйрәп ултырған бер-нисә танк менән бронетранспортёрҙарҙы ла ҡушһаң. Эйе, өс башҡорт егете һүҙендә тора алған, ғүмерҙәрен осһоҙға ғына һатмағандар: башҡа - баш, батальонға - батальон. Аҙыҡ-түлек тейәлгән машиналар, алыш урынынан алыҫыраҡ торғанғамы, ниндәйҙер мөғжизә менән артыҡ зыян күрмәгән. Ҡиммәтле ризыҡ тулыһынса тиерлек һаҡланып ҡалған. Шулай ҙа старшинаның һәм уның һалдаттарының батырҙарса һәләк булғанын бер кем дә күрмәне. Мәйеттәре түгел, хатта кейем осмоттары ла ҡалмаған. Ниндәй кейем, утлы ғәрәсәт эсендә тимер үҙе ирегәнде. Ошоларҙан сығып, тимәк, улар хәбәрһеҙ юғалған һанала. Эй-й, ғәҙелһеҙлек!

* * *

Дошманды Мәскәү аҫтынан баҫтыра башлаған көндәрҙең береһендә хәрби штабтарҙың ҡайһыһынандыр Башҡортостан тарафтарына ҡарап өсмөйөшлө хат осто. Ул ҡағыҙ остоғонда: "Фәүзиә Шәһишәриф ҡыҙы! Һеҙҙең ирегеҙ, старшина Нөғәмәнов Хәйривара Нөғәмән улы Тула ҡалаһы өсөн барған ауыр һәм оҙайлы бәрелештәрҙә хәбәрһеҙ юғалды", - тиелгән ине. Фәүзиә ышанманы. Уның Хәйриварaһымы һуң тоҡтомалға ғәйеп була торған кеше. Үҙ илендә ир юғалмай. Утын да үтер, һыуын да кисер, ыжғыр һыуығы менән эҫеһен үткәрер, барыһына сыҙар һәм бер көн, бына ҡарап торoғоҙ, ҡайтып төшөр. Юғалды тигәндәре төптө буш хәбәр, ялған!

Ошо ялҡынлы өмөт ҡатыш татлы хыял уны ғүмер ахырынаса оҙата килер. Ләкин ул бары өмөт һәм хыял булып ҡына ҡаласаҡ. Хәйриварaға ҡағылышлы башҡаса хәбәр-хәтер булманы.

...Ҡоштар тыуған төйәктәренә килеп ятҡан яҙғы иртәләрҙең береһендә Фәүзиәләрҙең өйө тәңгәлендә яңғыҙ торна әйләнергә тотондо. Үҙе өҙлөкһөҙ сыңрай ҙа сыңрай. Тауышы шул ҡәҙәре ҡыҙғаныс, йәнде өтөп бара, рухты һындыра. Биҙрәләрен ҡулына тотоп һыуға сыҡҡан ҡатын ихата уртаһында ҡатты ла ҡалды. Ерен ҡурсып яуҙа шәһит киткән һалдаттарҙың сыңрау торна сүрәтенә кереүе хаҡында ишеткәне бар, әллә шул дөрөҫмө икән? Бәлки, Хәйриварaһы шулай аһ-зарын еткерергә килгәндер. Юҡ, булмаҫ, уның йән киҫәге зарлана белмәне. Ә торна әйләнде лә, әйләнде. Ул гүйә: "Һаумыһығыҙ, Кешеләр! Һаумы, Фәүзиәм! Ҡарағыҙ, күрегеҙ, мин бына, хәбәрһеҙ юғалманым. Мин үҙ һүҙемде лайыҡлы рәүештә әйтеп киттем. Ул һүҙем ҡыҫҡа ғына, берәү генә, әммә берәгәйле булды. Беҙ яҡты киләсәк хаҡына бер бөртөк ғүмеребеҙҙе йәлләмәнек. Беҙгә тәтемәгән бәхетте һеҙгә кисерергә яҙһын ғәзиз балаларым, ҡаһарман ауылдаштарым, бөйөк халҡым. Бәхил булығыҙ!" - ти ине. Ҡапыл-ҡара йөрәкһеп киткән Фәүзиә, күҙ йәштәре аша йылмайып, уға ҡул болғаны.

**(Аҙағы. Башы 27-28-се һандарҙа).**

✓ *Баҡтиһәң, башҡорттар ҙа ҡортбаштарҙы милли кейем элементы итеп ҡуллана һәм уны күҙ тейеүҙән һаҡлай, тип ышана икән. Мин король ғаиләһендә тыуҙым, атай-әсәйем куриҙы (ҡортбаш) миңә бетеү итеп биргән.*



*ҠУНАҠТАР ҺӨЙЛӘЙ*

# ҒҮМЕРҘЕҢ ИҢ БӘХЕТЛЕ МӘЛЕ,

## тип баһаланы ҡунаҡтар был сараны



***Исак Эгрант, Камерун принцы, CIOFF-тың Камерундағы филиалы президенты:*** Мин Башҡортостанға етенсе тапҡыр киләм. Беренсе тапҡыр килгәнемдә Өфөнөң ул ваҡыттағы премьер-министры менән ҡала буйлап прогулкала йөрөнөк һәм Башҡортостан менән Камерун араһында дуҫтарса мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында һөйләштек. 2018 йылда CIOFF Өфөлә үткәргән конференцияла ла ҡатнаштым. Фольклориадала үҙ илебеҙҙең мәҙәниәтен күрһәттек, уның менән донъяның төрлө илдәренән килгән кешеләрҙе таныштырҙыҡ. Элекке сәфәрем менән хәҙергеһе араһында айырма бик ҙур. Халыҡ әле англо-африкандарҙы ихлас һәм асыҡ йөҙ менән ҡаршылай, элекке кеүек ауыҙ асып, иҫе китеп ҡарамай һәм быны беҙ нык тоябыҙ. Һәм тағы. Сара ваҡытында күптәр минең кейемдәге ҡортбаштар тураһында һорау бирҙе. Баҡтиһәң, башҡорттар ҙа ҡортбаштарҙы милли кейем элементы итеп ҡуллана һәм уны күҙ тейеүҙән һаҡлай, тип ышана икән. Мин король ғаиләһендә тыуҙым, атай-әсәйем куриҙы (ҡортбаш) миңә йәшәүгә ярҙам итһен, насар йоғонтонан һаҡлаһын өсөн бетеү итеп биргән. Уны беҙҙә тик король ғаиләһе генә йөрөтә һәм нәҫелдән-нәҫелгә тапшыралар.

***Лина Ласкано, Эквадор:*** Рәсәйҙә, Башҡортостанда, Асҡын районындағы саралар, осрашыуҙар бик оҡшаны. Ошоға тиклем, Рәсәй халҡы нык ҡырыҫ, саманан тыш етди, тип уйлай инек. Киреһенсә килеп сыҡты: бында иң мөләйем, эскерһеҙ, ҡунаҡсыл кешеләр йәшәй. Илемә ҡайтҡас, бында ни тиклем асыҡ, мәрхәмәтле милләттәр йәшәгәне хаҡында бөтәһенә лә һөйләйәсәкмен! Беҙҙә климат бөтөнләй икенсе, бер сиктән икенсеһенә күсмәй. Һеҙҙә, бер ҡараһаң, нык эҫе, унан ҡапыл һыуыта. Уның ҡарауы, бигерәк матур. Бар тирә-яҡта - йәшеллек. Форсат сыҡһа, тағы ҡыуанып киләсәкмен.

***Александр (Алекс), Франция:*** Башҡортостан кешеләре бик мөләйем. Ҡайҙа булһаҡ та, йылы, үҙ күреп, яҡын дуҫтарылай ҡаршы алдылар. Быға тиклем Башҡортостан тураһында белмәй инем. Фольклориадаға килеп, үҙем өсөн тағы бер үҙенсәлекле, дуҫтарса мөнәсәбәтле халыҡты астым. Башҡортостанда үткән фестиваль башҡорт халҡы, уның ҡурайы менән танышыу мөмкинлеге бирҙе, башҡа илдәрҙән дуҫтар табырға ла ярҙам итте. Ҡайтҡас, һеҙҙең турала һөйләп, дуҫтарымды "Әйҙәгеҙ, киттек Башҡортостанға!" тип саҡырасаҡмын әле. Был Фольклориада ҡабатланмаҫ тәьҫораттар, иҫ киткес күтәренке кәйеф, дуҫтарса мөхит, ғүмерҙә лә онотолмаҫлыҡ халыҡтар байрамы булып иҫтә ҡалыр.

***Теодора, Румыния:*** Өфөләге һәйкәлдәрҙе ҡарап йөрөнөк. Айырыуса Салауат батырығыҙға ҡуйылған һәйкәл, Дуҫлыҡ монументы иҫтә ҡалды. Монументтағы башҡорт ҡыҙы таҡҡан биҙәүесте күреп һоҡландыҡ. Һеҙҙең оҫталарығыҙ ысынбарлыҡта ла ундайҙы эшләй икән, табыуы ҡыйын булманы. Һатып алдыҡ, уны Румынияға ҡайтҡас та тағып йөрөйәсәкбеҙ әле!

***Гөләй Джандралиева, Ҡырғыҙстан:*** Башҡортостанда тәү сиратта ҡымыҙ әсир итте. Милли эсемлек икәнен белгәс, күңелгә рәхәт булып китте. Быға тиклем мин уны үҙебеҙҙән тыш, Ҡаҙағстанда һәм Монголияла ғына тәмләнем. Башҡортостан ҡымыҙы бер аҙ башҡа бирел, күңелләндерә икән. Беҙҙә шифа өсөн тип башлыса яңы һауылған бейә һөтөн эсәләр. Ә әсетелгән, бешелгән ҡымыҙ табын өсөн әҙерләнә. Тағы ла буҙа тәмләп ҡараныҡ. Рецебын бик ентекле итеп яҙып алдым, ҡайтҡас, мотлаҡ эшләп ҡараясаҡмын. Шифалы эсемлек тинеләр. Башҡортостанда сәйҙе кәсә тултырып алалар ҙа, тиҙ генә эсеп бөтәләр. Тәме һиҙелмәй ҙә ҡала. Ә беҙ кәсә төбөнән генә ҡуйы итеп ҡойоп алабыҙ ҙа, ҡуйы һөт һалып, яйлап эсәбеҙ. Миңә бер башҡорт артисы үләндәрҙән әҙерләнгән сәй бүләк итте. Туғандарымды йыйып, яйлап, өйҙә эсермен инде.

***Эмир Кустурица, серб режиссеры һәм музыканты:*** Барыһынан да бигерәк Башҡортостандың тәбиғәте һәм кешеләре иҫтә ҡалды - был минең тормошомда ҙур роль уйнай. Фестивалдәр - донъя мәҙәниәтенең төп ресурстары. Беҙ кешеләрҙе бәхетле итергә теләйбеҙ, улар беҙҙең энергетиканы тойһон ине!

***Керн Мейер, Швейцария:*** Башҡортостан халҡының ҡунаҡсыллығы һушты алды. Республика тормошон киң планда күрә алыуыбыҙ ҡыуандырҙы. Ҡайтҡас, мотлаҡ Фольклориаданы асыу тантанаһы тураһында һөйләйәсәкбеҙ. Бындай тамашаны күргәнебеҙ юҡ ине әле. Ул Олимпия уйындары асылыуын хәтерләтте һәм барлыҡ ҡатнашыусыларға ҙур йоғонто яһаны.

***Афаф Сватли, Фәләстин (Палестина):*** Беҙ барыбыҙ ҙа ҡасаҡтар лагерынан сығыусылар. Фәләстиндең барлыҡ мөйөштәренән йәштәрҙе йыйҙыҡ. Улар аслыҡты ла, шартлауҙарҙы ла, төрмәләрҙе лә, баш өҫтөнән пулялар һыҙғырыуын да үткән. Миссиябыҙ - Фәләстин халҡының бомбалар шартлауы аҫтынан алып сыҡҡан мәҙәниәтен киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалыу. Пандемияға тиклем Францияла сығыш яһаныҡ, CIOFF линияһы буйынса беренсе командировкабыҙ. Өфөлә милли кейемдәр парадында, дуҫлыҡ әйләнбәйләнендә ҡатнаштыҡ, республика райондарында сығыш яһаныҡ. Башҡортостан халҡы бик матур, изге күңелле. Беҙҙе матур итеп ҡаршы алдылар, ҡунаҡ иттеләр, бүләктәр бирҙеләр. Һеҙҙә күк сикһеҙ, ландшафт матур. Башҡортостан буйлап ҙур ҡәнәғәтлек менән сәйәхәт иттек һәм үҙебеҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе күрһәттек. Фәләстиндә күргән-кисергәндәребеҙҙән һуң Фольклориада, Башҡортостан, Өфө беҙҙең өсөн азатлыҡ һулышы, йылдың, бәлки, ғүмеребеҙҙең дә иң бәхетле ваҡыты булды.

***Бауыржан Алтынбәков, Ҡаҙағстан:*** Өфөгә килгән көндө генә Башҡортостанда туғандарым булыуын белдем. Мәрхүмә өләсәйем Тәнзилә Әҡсән ҡыҙы башҡорт булған. Ҡарт олатайыбыҙ хәрби булараҡ Төркмәнстанға ебәрелгән. Унда өләсәйебеҙ буласаҡ ире - минең ҡаҙаҡ олатайым менән танышҡан. Әсәйем сәфәр алдынан ғына Өфөлә туғандарыбыҙ, шул иҫәптән өләсәйемдең бер туған ағаһы - Рафаэль Хәсәнов йәшәүен әйтте. Уға хәҙер 70 йәш. Бер аҙна буйы осрашырға теләнек, ниһайәт, осраштыҡ. Бабайым мине күреү менән таныны, ҡосаҡлап алды. Артабан аралашып торорға килештек.

***Эрика Сууре, Айли Сонберг, Эстония:*** Беҙ Башҡортостандағы кеүек алыҫ араларға һәм киңлеккә өйрәнмәгәнбеҙ, сөнки илебеҙ бәләкәй генә. Беҙҙе нисек итеп ҡаршы алыуығыҙ һоҡландырҙы, әйтерһең дә, күптән көтөп алған ҡунаҡтарбыҙ. Үҙ сиратыбыҙҙа сығыштарыбыҙға бар күңелебеҙҙе һалырға тырышабыҙ. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел: беҙ ябай уҡытыусылар, ә бында үҙебеҙҙе бөйөк йондоҙҙар итеп хис итәбеҙ, сөнки мөнәсәбәт шундай.

Халыҡ-ара сара бик юғары кимәлдә ойошторолған, дуҫтарса атмосфера, тамашасы сығыштарыбыҙҙы йылы ҡабул итә. Башҡортостанда бигерәк тә милли ашһыу һәм ҡайынлыҡтар нык оҡшаны.

***Алехандро Рубио, Испания:*** Рәсәйгә килгәнгә тиклем бында ҡырыҫ кешеләр йәшәй икән тип уйлағайным, уларҙың асыҡ һәм дуҫтарса мөнәсәбәттә булыуын күреп нык аптыраным. Ансамбль менән донъя буйлап күп йөрөйбөҙ. Миңә матур юлдары, йәшел парктары менән Өфө бик оҡшаны. Башҡортостанды дуҫтарым һәм таныштарым өсөн туристик сәйәхәткә тәҡдим итәсәкмен. Өйгә иң ыңғай хистойғолар, сувенирҙар һәм үҙенең тәме менән һушты алған сәк-сәк алып ҡайтабыҙ.

***Даниэль Руано, Колумбия:*** Климатығыҙ беҙҙәге кеүек, шуға эҫе көндәрҙә үҙемде яҡшы тоям. Бында беренсе тапҡыр йылҡы итен ашап ҡараным, миңә бик оҡшаны. Колумбияла ла һеҙҙә ашаған ризыҡтарҙы әҙерләп ҡарар инек, әммә былай уҡ тәмле килеп сыҡмаҫ тип ҡурҡабыҙ. Дүрт йыл гитарала уйнайым, шуға тәү сиратта һеҙҙең ғәҙәти булмаған музыка ҡоралдарына иғтибар иттем. Мөмкинлек булғанда, уларҙа уйнап ҡарарға ине.

***Мартин Тейпингер, Австрия:*** Төркөмөбөҙ ике йыл элек Рәсәйгә килгәйне, әммә мин үҙем бында беренсе тапҡыр. Коллегаларым Башҡортостан тәбиғәтен бик матур тип һөйләгәйне. Уларҙы бигерәк тә Урал тауҙары һоҡландырған. Ысынлап та, республикағыҙ бик хозур һәм мин бында булғаныма бик шат. Үҙем аккордеонда уйнайым һәм бында беренсе тапҡыр ҡурайҙы күреп, уйнап ҡараным. Баҡтиһәң, уйнауы бик ауыр икән, әммә моңо иҫ киткес.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ДУҪЛЫҠ ГӨЛЛӘМӘҺЕ

**Республика халҡы күптән көтөп алған VI Бөтә донъя фольклориадаһы ваҡытында беҙгә төрлө илдең, төрлө милләттең бай мәҙәниәте менән яҡындан танышыу насип булды.**

Мине бигерәк тә мадъяр халҡының был яҡтарға ниндәй уй-фекерҙәр менән килеүе ҡыҙыҡһындырҙы. Европа уртаһында көн иткән, атай-олатайҙарының күсмә халыҡ булыуын инҡар итмәгән, милләтенең ниндәй ырыуҙарҙан торғанын яҡшы аңлаған берҙән-бер халыҡ булараҡ, улар минең күңелемдә күптән ихтирам яулаған инде. Сегед университеты профессорҙарының саф башҡортса сығыш яһауын да заманында хайран ҡалып тыңларға тура килгәйне. Венгрҙарҙың бер өлөшө тарихи Ватаны тип башҡорт ерҙәрен һанауы ла уларға ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра.

Милли батырыбыҙҙың һуңғы төйәге булған Эстониянан килгән һәүәҫкәр артистарҙың да сығыштарын, республикабыҙ тураһында фекерҙәрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланым. Улар илдәренә ҡайтҡас, Салауат Юлаевтың милләттәштәре бөгөн нисек көн итеүҙәрен үҙ ватандаштарына еткерер, моғайын.

Америка Ҡушма Штаттарының Гавайа штатынан, Мексика, Коста-Рика һәм Латин Америкаһы илдәренән алып килгән индеецтар фольклоры айырыуса иғтибарға лайыҡ. Испан һәм башҡа халыҡтар экспанцияһына ҡарамай, улар үҙенсәлекле йыр-моңон һаҡлап ҡала алған, костюмдары тәү ҡарашҡа сағыулығы менән бер-береһенә оҡшаш булһа ла, айырмалыҡтары ла күҙгә салына. Уларға ҡарап үҙеңде төрлө-төрлө сәскәләр ултыртылған гөл-баҡсала тип хис итәһең.

Штаттарҙан килгән егеттәрҙең "Һай, һай, Салауат!" тип йырлауы Салауатыбыҙҙың даны ни тиклем алыҫ таралыуы хаҡында һөйләй. Бушҡа ғына төрлө ил вәкилдәре баш ҡалабыҙға килеү менән Салауат Юлаев һәйкәленә бармаған. Фольклорсыларҙың икенсе яратҡан урыны - Ете ҡыҙ фонтаны. Был билдәле лә инде - бейеүсе өсөн бейеү һәйкәленән дә башҡа ниндәй һәйкәл мөһимерәк. Ҡунаҡтар бейеүсе ҡыҙҙар хәрәкәтен ҡабатларға тырыштылар, был үҙенә күрә бер үҙенсәлекле алым да ине: башҡорт бейеүен бейеп буламы?

Фольклориада барған көндәрҙә баштан бер уй китмәне. Юғары махсус белем алған, ҙур тормош юлы үткән сәйәсмәндәр нисек башҡа илдәр менән низағ күтәрергә тип баш ватҡанда, үҙ милләтенең рухи хазинаһын бөртөкләп йыйған, уны һаҡлауҙы үҙенең тормош маҡсаты, йәшәү рәүеше иткән ябай һәүәҫкәрҙәр, үҙ илдәре етәкселәренән айырмалы, бергә йыйылып, майҙан ҡора, халҡының рухи байлығы менән уртаҡлаша. Был сәйәсмәндәр бер ваҡытта ла ошо тиклем ябай халыҡ араһынан сыҡҡан талантты күргәне лә, тыңлағаны ла юҡтыр. Юғиһә, улар илдәрҙе, шунда көн иткән халыҡты, уның менән бергә ошо тиклем гәүһәрҙәрҙе юҡ итергә тырышмаҫ ине, тип уйлайым.

**Сәйфулла ҺАҘЫЕВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘБИҒИ МӨХИТ ФАЙҘАЛЫ

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, артыҡ таҙалыҡҡа ынтылыу иммунитет түбәнәйеүенә һәм аллергия барлыҡҡа килеүенә бер сәбәбе булып тора. Был фекер 1989 йылда уҡ Лондондың Изге Георгий госпитале эпидемиологы Стрэхан тарафынан әйтелә. Профессор таҙа һыу ҙа булмаған тәбәктәрҙә йәшәгән балаларҙың ауырыуҙарға бирешмәүен, ә йәшәү шарттары яҡшы булғандарҙың аллергиянан яфаланыуын күрә. Күп балалы ғаиләләрҙә лә балалар ауырып бармай. 2014 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бәләкәй сағынан уҡ тәбиғәткә сығып, тупраҡ-таш менән уйнаған бала аллергия һәм астма менән һирәгерәк ауырый. Хатта аш бүлмәләрендә таракан, сысҡандар, фатирҙарында йорт хайуандары булған балаларҙың сәләмәтлеге стериль торлаҡта көн итеүселәргә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡҡан.

■ Американың ғаилә һәм хеҙмәт институтында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡыҫҡа эш көнө хеҙмәткәрҙәр өсөн дә, ойошма өсөн дә файҙалы. Аныҡлап әйткәндә, медицина күҙлегенән сығып ҡарағанда, офиста оҙаҡ ултырыу йөрәккә насар тәьҫир итә. Аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүсе кешелә аҙнаһына 40 сәғәт эшләүселәргә ҡарағанда инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Бынан тыш, тик эш менән генә шөғөлләнеүселәр насар йоҡлай, шуға ла тиҙерәк арый. Иң мөһиме, ти ғалимдар, кем оҙағыраҡ ял итә, улар һәҙөмтәлерәк эшләй.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоноң сифатына күп факторҙар, мәсәлән, стрестан башлап генетик ауырыуҙарға тиклем тәьҫир итә, әммә нисек тукланыуға ла иғтибар итергә кәрәк, ти ғалимдар. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан индерергә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортҡа, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ.

■ Индиана штаты университеты ғалимдары кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында сәләмәтлек өсөн зыянлы матдәләр тапҡан. Улар кешелә эндокрин һәм нейрон тайпылыштарына, һимеҙлеккә килтерә, кешенең репродуктив функцияһына ағыулы тәьҫир яһай ала. Ғалимдар билдәләүенсә, пластик, ағас материалдар, туҡымаға өҫтәлгән антипирендар биосферала һәм тере организм туҡымаларында туплана ала. Был матдәләр кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында күберәк булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙа антипирендар күләме ҙурыраҡ булып сыҡҡан. Ғалимдар әйтеүенсә, был тырнаҡ өсөн лак ҡуланыуҙан булыуы ихтимал, сөнки антипирендар лактың составында ла бар.

■ Италияның Пиза университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы һынауҙар үткәргән. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда йышыраҡ иҫнәй ти улар. 100 кеше эштә, төшкө аш мәлендә, дуҫтар менән аралашҡандағы ҡылыҡтарын күҙәткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар башҡаларҙың иҫнәүен күреп, уларға эйәрә икән. Бының сәбәбе шунда - гүзәл зат башҡаларҙы яҡшыраҡ аңлай, уларға йәлләү, ваҡиғаларға яраҡлаша белеү сифаттары хас. Был осраҡта ла ҡатын-ҡыҙҙың ҡылығы ошо холҡона бәйле.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

**Үткән аҙналар Башҡортостан һәм башҡорт йәмғәтселеге өсөн сағыу ваҡиғаларға бай булды. Шуларҙың береһе - башҡорттарҙың этник тарихы һәм антропологияһы буйынса уҙғарылған фәнни сессия. Уның эшендә Рәсәй, Башҡортостан һәм Польша, Беларусь республикалары ғалимдары ҡатнашты.**



# БАШҠОРТТАР КҮСМӘ ТҮГЕЛ,

## ә ярымкүсмә халыҡ

Милләт-ара мөнәсәбәттәргә, уларҙың мәҙәниәтен һәм үҙенсәлеген, милли берҙәйлеген һаҡлауға килгәндә, республика Хөкүмәте генә түгел, ошо темаға ҡағылған һәр кем һәр саҡ фәнни ҡарашҡа нигеҙләнергә тырыша. Бында, әлбиттә, гуманитар өлкәлә эшләүсе белгестәрҙең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Был хаҡта үҙенең тәбрикләү сығышында Башҡортостан Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов та билдәләп китте. Башҡортостан Башлығы һәм республика Хөкүмәте исеменән тәбрикләүҙәр еткереп, ул шулай тине: "Бынан 50 йылдар самаһы элек СССР Фәндәр академияһы Тарих бүлегенең Башҡортостан филиалы Өфөлә башҡорт халҡының этногенезы буйынса фәнни сессия уҙғара. Был сара башҡорттарҙы өйрәнеүгә етди йүнәлеш бирә. Махсус сессия ойоштороу инициаторҙарының береһе Раил Кузеев ошо ваҡиғанан һуң биш йыл үткәс, үҙенең "Башҡорт халҡының килеп сығышы" тигән фундаменталь эшен баҫтырып сығара. Заманына күрә ул тарих фәнендә ҙур ваҡиға була. Бөгөнгө сессияға ла беҙ ҙур өмөттәр бағлайбыҙ".

Азат Шамил улы билдәләүенсә, 1969 йылда үткән сессия, ысынлап та, ҙур тарихи ваҡиға була. Әммә тормош бер урында ғына тормай һәм яңынан-яңы асыштар яһала, яңы ҡараштар барлыҡҡа килә. Әгәр бынан 50 йыл элек башҡорттарҙы күсмә халыҡ тип билдәләһәләр, бөгөн иһә археологик ҡомартҡылар һәм башҡа тарихи сығанаҡтар башҡорттарҙың ярымкүсмә халыҡ булыуын раҫлай. Шулай уҡ ваҡыт һәм заман башҡа хаталарҙы ла төҙәтеү мөмкинлеген, яңы фактар һәм дәлилдәр табыу мөмкинлеген бирә.

Быны пленар ултырышта яңғыраған сығыштар ҙа раҫлай. Ғөмүмән, ике көн дауамында барған сарала башҡорттарҙың этногенезына, тел ғилеменә, символикаһына, милли проекттарҙың үҫеше, урта быуаттарҙан алып бөгөнгәсә Урал-Волга буйы һәм Себер төркиҙәренең этниклығы, төрки халыҡтарының әҙәбиәте һәм фольклоры, лингвокультурология һәм мәҙәни-ара аралашыу буйынса ҡыҙыҡлы сығыштар яңғыраны. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.

***Филология фәндәре докторы, профессор Юлия Норманскаяның сығышы "Хәҙерге компьютер ысулдары ярҙамында башҡорт телендәге төүге кириллик текстарҙы өйрәнеү мөмкинлектәре" тип аталды:***

- Пленар өлөштә сығыш яһаған ҡайһы бер спикерҙарҙың башҡорттарҙың берҙәйлеге, уларҙың ниндәй диалекттары бар һәм төньяҡ-көнбайыш диалектының бөгөнгө хәле тураһында күтәргән көнүҙәк мәсьәләһен беҙҙең ҡарашҡа нисек хәл итеп була? Башҡорт телендә кириллицала беренсе текстар XIX быуаттың икенсе яртыһында Ҡазанда, тәржемә комиссияһы эшмәкәрлеге барышында барлыҡҡа килгән. Артабан әлифба, грамматика, эш тексталарын тәржемә итергә өйрәткәндәр һәм уларҙы урындарҙа тәржемә иткәндәр. Шуны билдәләп китергә кәрәк: кириллицала яҙылған иртә башҡорт текстары иғтибарҙы йәлеп иткән, әммә улар диалектология күҙлегенән ҡарағанда тейешле дәрәжәлә өйрәнелмәгән.

Әлеге ваҡытта беҙҙең мин үткән килгәнемдә һөйләгән ЛингвоДок платформаһында был текстар бар. Уның эшендә Өфөнән Рәмилә Кәримова, Мәскәүҙән Зарема Экба әүҙем ҡатнашты. Хәҙер унда беренсе әлифбаның күп корпустары һәм һүҙлектәре индерелгән.

XIX быуатта төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының диалекты тураһында һығымта яһау өсөн ниндәй китаптар анализланды? Тәү сиратта, Катановтың Өфө губернаһына сәйәхәте тураһындағы отчеты. Унда башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш, бәләбәй, мишәр, мишәр-татар, типтәр һөйләштәре бирелгән. Әгәр гәрәп телендә был һүҙҙәр барыһы ла берҙәй өкшаш булһа, кириллицала һөйләштәрҙең һәр ҡайһыһының үҙенсәлеге күренә.

Артабан Катаринский төҙөгән беренсе башҡорт-рус һүҙлеге ялғауҙар буйынса анализланды, сөнки унда бер юлы ике: көньяҡ һәм көнсығыш һөйләше бирелгән. Шулай уҡ Бессоновтың уҡыу өсөн тәғәйенләнгән китабы алынды, унда ике диалект бирелгән, һәм беҙ уларҙың арғаяш һәм һалйоғот һөйләшенә ҡараузарын күрһәттек.

Шулай уҡ архивтарҙа, китапханаларҙа бығa тиклем диалекты бил-

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Дин шулай өйрәтә: үҙ ҡолдарының гонаһтарын ярлыҡау, юлдан яҙғандарҙы хаҡ юлға сығарыу, ғүмер тураһында уйланып алыу өсөн Аллаһы Тәғәлә төрлө миҙгелдәр: айҙар, йылдар, көндәр, кистәр бар иткән һәм был ваҡыттарҙың ололоғон аңлап, гонаһтарығыҙҙы ярлыҡауымды һорағыҙ, Мин уларҙы ғәфү итермен, тиғән.**



Хәҙистәрҙә: "Аллаһ үҙе бер ваҡытта ла тынғы белмәй, яралтылмыштары хаҡында хәстәрлек күреп тороуҙан бушамай. Көнөнә 360 тапҡыр Ул ғаләмдәрҙең ғәмәл дәфтәренә ҡарап ала, ти. Ҡарап ала ла, тыуырға тейештәр тыуа, йәшәргә тейештәр тормоштарын дауам итә, дәрәжәләргә күтәрелергә тейештәрҙең дәрәжәләре күтәрелә, түбән төшөргә тейештәр түбән төшә, ғүмере бөткәндәр әхирәткә күсеп китә", - тиелә.

Ғалимдар уйлай белгәндәр иғтибарына ошо һүҙҙәрҙе йүнәлтә: "Был яҡты донъяға һин илап килдең, донъя һине йылмайып-көлөп ҡаршы алды, ә хәҙер инде китер ваҡытың еткәндә үҙең көлә-көлә китерлек, ә донъя илап ҡалырлыҡ итеп йәшәй белергә тырыш".

"Ғибәҙәттәге фарыздарҙан һуң Аллаһ риза булырлыҡ ғәмәлдәрҙең иң яҡшыһы - үҙ ҡәрҙәшеңде һөйөндөрә белеү", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Сөнки ҡырылған, кителгән күңел - Аллаһы Тәғәләнең ҡуҙ һалып ҡына торған урыны. Был урынды Ул үҙе юғары күтәрә.

"Байрам көндәрен, - тип өйрәтә дин, - ярҙамға иң мохтаж кешеләргә ҡарата иғтибарлы булыуҙан башлағыҙ.

✓ ***Фонетика күҙлегенән ҡарағанда төньяҡ-көнбайыш диалектта, нигеҙҙә, архаик үҙенсәлектәр, аныҡлап әйткәндә, боронғо төрки тел, ч һәм с хәрефтәре һаҡланған, ә татар теле үҙенсәлектәре түгел.***



дәлләнмәгән яңы китаптар табылды. Улар - "Евангелие от Матвея" тәржемәһе һәм башҡорттар өсөн әлифба. Был китаптарҙың теле дөйөм алғанда әҙәби башҡорт теленә яҡын, әммә көнсығыш диалектына хас булған килештәр, морфологик алмашыныуҙар булыуы билдәләнде. Ә беренсе әлифбаның Катаринский һүҙлегенән айырылып тороуы асыҡланды. Шулай итеп, беҙ өс диалект һәм татар һөйләштәре мәғлүмәттәрен анализланыҡ.

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектының ниндәй үҙенсәлектәренең көньяҡ диалектына һәм татар һөйләшенә хас булыуын асыҡлау эшебеҙҙең төп маҡсаты ине. Фонетика күҙлегенән ҡарағанда түбәндәге һөҙөмтәләр алынды: төньяҡ-көнбайыш диалектта, нигеҙҙә, архаик үҙенсәлектәр, аныҡлап әйткәндә, боронғо төрки тел, ч һәм с хәрефтәре һаҡланған, ә татар теле үҙенсәлектәре түгел.

Шулай уҡ хәҙерге төньяҡ-көнбайыш һөйләшенең ҡайһы бер үҙгәрештәре лә тикшерелде. Һөҙөмтәлә татар теленә хас бер генә үҙгәреш тә билдәләнмәне. Ә XIX быуатта Катанов күрһәткән татар теленә оҡшашлыҡ тап ошо төньяҡ-көнбайыш диалектының архаик булыуында һәм уның боронғо ҡыпсаҡ теленә яҡын булыуында.

Мәғлүм булыуынса, морфология диалекттарҙың архаик һыҙаттарын тулы асып бирә. Сағыштырып ҡарағанда, XIX быуат аҙмаһында аффикстар араһында ла айырма күҙәтелә. Был айырмаларҙы Интернетта беҙҙең сайтта ла күрергә мөмкин. Килеш үҙгәреүҙәре лә ҡыҙыҡлы. Аффикстар төрә буйынса төньяҡ-көнбайыш диалект татар теленән ныҡ айырыла һәм көнсығыш диалектына яҡын тора.

Барлыҡ тикшеренеүҙәрҙән һуң шундай һығымта яһарға мөмкин: морфология күҙлегенән ҡарағанда, XIX быуатта башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты архаик һәм үҙенсәлекле булған, әммә татар теле менән бәйләнеше һөҙөмтәһендә ошо үҙенсәлектәрҙең күпселеген юғалтҡан, шуға күрә лә бөгөн уның ниндәй диалектҡа ҡарауы тураһында бәхәстәр бара, әммә XIX быуат материалдарын анализлау был мәсьәләне еңел хәл итә.

***Тарих фәндәре докторы, профессор Елена Даниленконың сығышы "Шәжәрә байрамы миҫалында берҙәйлек сәйәсәтенең төбәк стратегияһы" тип аталды:***

- Хәҙерге этно-мәҙәни процестарҙың мөһим өлөшө булып йәмғиәттең ыңғай образын тыуҙырған, тарихты ритуаллаштырыу кеүек күренештәрҙе уҙ эсенә алған берҙәйлек сәйәсәте тора. Тарихты ритуаллаштырыу тигәндә, быға топонимиканан алып йола байрамдары, йәғни коллектив хәтерҙе берләштергән күренештәр инә. Шундай ресурстарҙың береһе булып, һис һүҙһеҙ, байрам саралары тора.

Шундай милли байрамдар араһында башҡорттарҙың Шәжәрә байрамы айырым, үҙенсәлекле урын алып тора. Башҡа байрамдарҙан айырмалы, ул билдәле ваҡытҡа ла, байрам мәҙәниәтенә лә бәйләнмәгән, йәғни уны ҡасан теләйһең, шул ваҡытта үткәрергә мөмкин, сөнки нигеҙендә башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләренең генеалогик йылъяҙмаһы, йәғни туғанлыҡ сылбырын төҙөү традициялары ята. Беренсе яҙма шәжәрәләр 17-се йөҙ йыллыҡ менән билдәләнә. Бик йыш улар ырыу-ҡәбиләнең генеалогияһынан, бик һирәк ниндәйҙер тарихи йәки этнографик мәғлүмәттәрҙе лә уҙ эсенә ала һәм бай тарихи сығанаҡ булып тора. Башҡорттарҙың социаль структураһы ҡатмарлашыуы менән бер ауылда йәшәгән төркөмдәр, айырым ғаиләләр үҙенең шәжәрәһен төҙөй башлай.

Совет осоронда шәжәрә төҙөү тыйыла, шуға күрә ул өҙөлөп тора, әммә 90-сы йылдарҙа тарихи хәтерҙе һаҡлау функцияһынан тыш, сағыу этник маркер булып ҡабаттан тергеҙелә.

Шәжәрә байрамын иң элек Баймаҡ районының бер нисә ауылында урындағы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре үткәрә. Уның сценарийы ауыл, айырым ғаиләләрҙең алдан уҙғарылған тикшеренеү эштәренән тыш, күңел асыуҙы ла уҙ эсенә ала. Йәйләп ҡына бындай байрамдар күрше райондарға тарала һәм Башҡортостандың уҙ ирке менән Рус дәүләте составына инеүенең 450 йыллығын байрам иткәндә республика кимәлендә ойоштороу ихтыяжын тыуҙыра. 2006 йылдың 10 майында Башҡортостан Хөкүмәте Шәжәрә байрамын уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Артабан ул төрлө учреждениелар эшмәкәрлегенең бер өлөшөнә әйләнә, мәҫәлән, республика архивы шәжәрәләр төҙөү менән махсус шөғөлләнә, унда нәҫел ағасын нисек төҙөү буйынса күрһәтмәләр бар, шуға бәйле төрлө мөрәжәғәттәр тормошҡа ашырыла. Артабан инде шәжәрә туризм өлкәһенә килеп инә: баш ҡалала "Өфө шәжәрәһе" тигән махсус маршрут барлыҡҡа килә. Йәғни шәжәрә иң талап ителгән социаль практикаға әйләнә һәм төрлө өлкәләрҙә ҡулланыла башлай.

Пьер Портье теорияһына ярашлы, символдар көрәшендә, аныҡлап әйткәндә, хәүефле элиталарҙың йәмғиәт фекерен формалаштырырға тырышыуы көсәйгәндә, иң уңышлы булып үткәндәрҙе реконструкциялауға йүнәлтелгән стратегия һанала. Шуға күрә башҡорттарҙың этник образын булдырыуҙа шәжәрә һәм уға бәйле байрам барлыҡҡа килеүе осраҡлы түгел, ә ырыу берҙәйлегенең хәҙерге контекста талап ителеүен раҫлай. Һуңғы йылдарҙа бындай байрамдар татарҙар, сыуаштар һ.б. йәшәгән ауылдарҙа ла үткәрелә, йәғни ул күп милләтле байрамға әүерелә. Шулай итеп, башҡорттарҙың һуңғы йылдарҙа әүҙемләшкән Шәжәрә байрамы ҡабатан тергеҙелгән байрам традицияһы түгел, ә генеалогия ағасын төҙөүгә нигеҙләнгән булыуы - башҡорт берҙәйлеге киңлегендә үткәндәргә мөрәжәғәт итеүе, билдәле ҡан һәм тупраҡ концептын уҙ эсенә алыуы, көнбайыштың ритуал схемаларынан азат булыуы һәм күп төрлөлөгө, символдар байлығы менән үҙенсәлекле. Был - һоҡланғыс һәм үҙенсәлекле күренеш.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әҙерләне.**

---

Ярҙамға мохтаждарҙың иң тәүгеләре - беҙҙең әрүахтарыбыҙ. Улар өсөн Ҡөрьән уҡыу, хәйер-саҙаҡа таратыу - беҙҙең иң төп вазифабыҙ".

Үҙенең дуҫ-иштәренә нәсихәт биреп, Бәйғәмбәребеҙ үҙе лә: "Эй, сәхәбәләрем! Бөгөн һеҙ берәй етемдең башынан һыйпанығыҙмы? Ауырыуҙарҙың хәлен барып белдегеҙме? Кем дә булһа берәүҙе һуңғы юлға оҙатыуҙа ҡатнаштығыҙмы?" - тип һорай торған була. "Әгәр ҙә һәр халыҡ уҙ иле, уҙ иленең ҡалалары, илдә ниндәй хәлдәр булып тороуы хаҡында ғына һөйләп йөрөп, башҡаларҙың төрлө ихтыяждарын бар тип тә белмәһә, был инде һәләкәткә сәбәп буласаҡ, ул илдәр харәбәгә әйләнәсәк, мәҙәни ҡиммәттәр ҙә юҡҡа сығып, әүлиәгә тиң заттар билдәһеҙ булып ҡаласаҡ".

Ҡорбан ғәйете, йәғни Ғәйҙел-Әҙха - Аллаһы Тәғәләнең хаҡ хәбибе Ибраһимдың Раббыһына тоғролоғон, шул тоғролоҡ хаҡына хатта һөйөклөләрҙән-һөйөклө улын да ҡорбан итергә әҙер булыуын иҫкә алыу, мөьмин-мосолмандың иманға тоғролоғон һынау, хажға барыу мөмкинлеге булғандарға Исламдың изге урындары менән танышып, иманын нығытып ҡайтыу көндәре ул.

"Был оло байрам көнөндә, - тип әйрәткән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм, - әҙәм балаһы өсөн хайуан ҡанын ағыҙыуҙан да һөйкөмләрәк эш юҡ".

Аллаһы Тәғәлә тағы ла бойора: "Хаж юлына аҙыҡ алып сығығыҙ. Әлбиттә, аҙыҡтың иң хәйерлеһе - тәҡүәлек һәм кешеләрҙән һоранып йөрөүҙән, уларға мохтажлыҡтың төйнәүҙән һаҡланыу. Ризыҡты Аллаһ үҙе бирә. Хаж сәфәрендә, хажда булыу мөмкинлеге булмағандарҙың уҙ өйөндә салған ҡорбандарының ите менән ҡорбан салғанда аҡҡан ҡандарының тамсыһы ла Беҙгә ирешмәҫ. Аллаһы Тәғәләгә бәндәләрҙең тәҡүәлеге генә барып етә".

Исламдың изге урындарында йөрөп хаж ғибәҙәтен үтәп ҡайтыу ғына түгел, мөмкинлеге булмағандың өйҙә - Ҡәғбәтулланың бер өлөшө булған мәсеттәрҙә ғибәҙәт ҡылыуы һәм "Хаж" сүрәһен уҡып ҡына тороуын да Бәйғәмбәребеҙ хаж ҡылыу менән бер дәрәжәгә ҡуйған. "Хаж" сүрәһен уҡып ҡына торған кешегә Аллаһ оло хаж һәм гөмөрә хажын үтәп ҡайтҡандарға йәки алдағы көндәре хаж ғибәҙәтендә буласаҡтарға биргән кеүек әжер-сауаптарын бирәсәк", - тигән.

"Был сүрәне өс көн һайын уҡып торған кеше бер йыл эсендә үк Хәрәм-Шәрифтә булыу мөмкинлеге аласаҡ", - тигән имам Садыҡ.

"Салған ҡорбандарығыҙҙың тәүге тамсы ҡаны ергә тамып өлгөргәнсе үк ул Аллаһы Тәғәләнең ҡорбанды ҡабул итеү урынына барып төшә һәм... был ҡорбан ҡабул ителә".

Был оло байрам көндәрендә мосолман ғибәҙәтендәге ысын мәғәнә - ҡан ағыҙыу түгел, ә ҡан ҡойоуҙарҙан тыйыу. Әле булһа бит ҡан ҡойоуҙарҙан тыйыла белмәгәндәр менән донъя тулып бара.

"Ҡорбанға салған малдарығыҙҙың ите лә, ҡаны ла Аллаһҡа кәрәк түгел, Уға һеҙҙең тәҡүәлеләрҙән булыуығыҙ, һеҙҙе хаҡ юлға төшөргән, хаҡ юлда йөрөткән Аллаһты ололап ҡына тороуығыҙ өсөн Ул ҡорбан малдарын һеҙҙең ихтыярығыҙға тапшырҙы. Иманлы бәндәләрҙе Аллаһ һаҡлап ҡына йөрөтә. Шуға ла игелекле бәндәләрҙе яҡшы хәбәр менән һөйөндөрөгөҙ. Шөкөр итә белмәгән мәкерле кешеләрҙе генә яратмай Ул" ("Әл-Хаджж" (Хаж) сүрәһе, 37-38-се аяттар). Ғәйет көндәрендәге ғибәҙәттәрҙең дәрәжәһе оло. Хаждағы ғибәҙәттәрҙең сауабы бигерәк тә ҙур, тип өйрәтә ғалимдар.

**Башҡортса дини календарҙан.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уй-фекерегеҙҙе үҙгәртеүгә ике аҙым

Түбәндәге юлды уҡығыҙ ҙа, һуңынан күҙегеҙҙе йомоп, уны уҙ алдығыҙға ҡабатлағыҙ: "Көндән-көн мин бар нәмәлә лә позитив ҡарашлы була барам". Хәҙер тәрән итеп тын алығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм ошо фразаны тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ. Һеҙ әле генә уҙ аңығыҙҙы ҙур позитивлыҡ яғына ҡайтанан программалаштырыуға тәүге аҙым яһанығыҙ.

Тормош шуны раҫлай: уй-фекерегеҙ ысынбарлыҡты тыуҙырырға ярҙам итә. Икенсе дәлил: һеҙҙең уй-фекерегеҙ - программаланған компьютерҙан сыҡҡан мәғлүмәт ул. Эйе, һеҙҙең мейегеҙ - ҡеүәтле компьютер. Ул өс йөҙ миллиард нейрондан тора. Уларҙың һәр ҡайһыһы компьютер төйөнө кеүек эшләй. Аңығыҙҙы һәм тәнегеҙҙе көсһөҙләндереп, компьютерығыҙҙы һүндерәһегеҙ. Уға һүҙ аша инструкциялар биреп, программалайһығыҙ. Һеҙ ошо процесты башланығыҙ. Уның һөҙөмтәләлеген ҡырҡа арттырыу өсөн тағы ла нығыраҡ көсһөҙләнергә һәм аныҡ һүҙ инструкциялары бирергә кәрәк. Компьютерығыҙҙы ҡабыҙыу өсөн һеҙ тәрән көсһөҙләнеүҙә булырға тейешһегеҙ. Быға ике сәбәп бар. Беренсеһе, тән көсһөҙләнмәйенсә, аң да көсһөҙләнмәй. Көсөргәнешле, үҙен уңайлы хис итмәүсе тән, "Мине онотма, мине онотма" тип, әсәһенең еңенән тартҡан балаға оҡшаш. Икенсе сәбәп: уйыңа мейенең уң яҡ ярымшары ҡушылырға тейеш. Хатта ошо хаҡта уҡығанда ла уң яҡ ярымшарығыҙ эштән ҡасып, һул яғығыҙ уҡыу өсөн бөтә көсөн һала. Тәрән ял иткәндә уң яҡ ярымшар эшләй башлай һәм һулы менән бергә атлай.

Хәҙер компьютер ҡабыҙыла. Мейеләгә компьютер ҡабынһын өсөн нисек тәрән итеп көсһөҙләнергә? Түбәндә тәү сиратта тәнде, һуңынан аңды көсһөҙләндереп, аҙаҡ мейе компьютерын ҡабыҙыу өсөн уның тәрәнәйеүе буйынса инструкция бирелә. Көсһөҙләндереүҙең ике ысулы бар: оҙайлы һәм ҡыҫҡа. Әгәр тормошоғоҙ ығы-зығынан тора йәки һеҙ көслө стресс йөгөнтоһонда булһағыҙ, һеҙгә оҙайлы процедура кәрәк. Ә ҡайһы бер кешеләр үҙҙәренең мейе компьютерын бер нисә секундта тоҡандыра ала. Уларға ҡыҫҡа ысул да ярай. Оҙайлы ысулдың өс төрө була. Уларҙың береһе һеҙгә тап килергә тейеш.

***Көсһөҙләндереүҙең өс оҙайлы ысулы:***

● Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Башығыҙҙағы мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Маңлайығыҙҙағы мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Күҙ тирәләрендәге мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Сикәләрегеҙҙәге, ауыҙ тирәләрегеҙҙәге, муйыныңыҙҙағы, күкрәк ситлегегеҙҙәге, арҡағыҙҙағы, янбаштарығыҙҙағы, бөгәрҙәге, табаныңыҙҙағы көсөргәнешле һәм аяҡ бармаҡтарын көсһөҙләндерегеҙ. Ашыҡмағыҙ. Тәнегеҙҙең һәр өлөшөн күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Сиратлап уларҙы ҡыбырлатығыҙ, уйығыҙҙа ғына уларҙың һәр ҡайһыһына мөрәжәғәт итеп, көсһөҙләнеүен һорағыҙ.

● Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Өс тапҡыр тәрән тын алып, уны йәйләп ҡына сығарығыҙ. Хәҙер йөҙҙән алып бергә тиклем кирегә һанағыҙ. Икенсеһенә күсер алдынан һәр һанды асыҡ итеп күҙ алдына килтерегеҙ.

● Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм үҙегеҙҙе лифтта итеп күҙаллағыҙ. Ул бынабына ҡуҙғалырға тора. Был механик тауыш: "Етенсе ҡат: ҡатын-ҡыҙҙар кейеме һәм эске кейем", - тип иғлан иткән универмагтағы лифт булырға ла мөмкин. Беренсе ҡатҡа еткәс, мейе компьютерығыҙҙы программалаштырыуға әҙер булығыҙ. Йәки был шахталағы ситлек булыуы ла мөмкин - һәр йөҙ футҡа аҫҡа төшеүҙе белдергән яҙыуҙарҙы ҡарап барығыҙ. Ике мең футҡа төшкәс, программалашыуға әҙер буласаҡһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ЙОРТОНДА


1


2

Тeлдән ерле бер төрө. Билдәле совет очеркысыһы. 1. "Мөгөҙ" биҙәк. Үлемһеҙ башланғыс. Йәнлектәр батшаһы. Табынға түшәлгән йәймә. Паразит бөжәк. Тәҫлә буй-буй киндер. Үҫергәндәр башлығы. "(...) аш имеш, алтын-көмөш таш имеш". 2. "(...) менән дуҫ булма". Көйөмдә бысрактан һаҡлай. Эре ҡауырһын япраҡлы үҫемлек. Алтын йә көмөш таҫма. Күк есеме. Шыйыҡса үлсәме. "(...) ҡайтыр, ҡом ҡалыр". Америкалағы йылға. Йылға балығы. 4. Унан һалдат бутҡа бешергән. Ҙур йылан. Сигеүсенең бармаҡ осонда. 3. Элементтың иң бәләкәй берәмеге. Еңһеҙ ҡыҫҡа кейем. "Дәрт бар - (...) юк". "(...) хәҙерен эт белмәҫ". "Өйөндә - әтәс, (...)да - себеш". Отеллоның милләте. Кавказда халыҡ йырсыһы. "Доктор Фауст" романы авторы. "(...) - ярты гәмәл". Нәмә элгес таяҡ.


3


4

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Жаңһр. Аҡбуҙат. Муромец. Лама. Тауыҡ. Ул. Хата. Рычаг. Шаман. Альбом. Абенг. Уҡа. Манас. Рагу. Моэм. Гэсэр. ЕЭС. Таба. Штурвал. Мамыҡ. Мәмерйә. Шахнамә.

**Вертикаль буйынса:** Рамакиен. Лачплесис. Гилгәмеш. Алма. Тормош. Урал. Бер. Уймыр. Вече. Махабхарата. Алтай. Рәт. Әсә. Таш. Мугам. Арба. Аҡса. Ҡон. Сарыҡ.

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

## АСПИРИН ГӨЛДӘРГӘ ДАУА...

**Аспирин - ацетилсалицил кислотаһы һәр дарыуханала һатыла. Күптәр уны һауығыу өсөн генә түгел, ә бүлмә гөлдәренә йән өрөү, яҡшыраҡ үҫһен һәм сәскәгә бөрөләнһен өсөн дә ҡулланып булыуы хаҡында белмәй.**

Аспиринды бүлмә гөлдәренә төрлө ярҙам кәрәк саҡта файҙаланалар: япраҡтары ҡойолһа, сәскәгә бөрөләнергә теләмәһә, гөлдәрҙең тышҡы торошо насарайһа, үҫемлекте күсереп ултыртҡандан һуң йәки ул ауырыу кисергәс, бәшмәктәргә ҡаршы эшкәртеү өсөн. Шуға ла иғтибар итегеҙ: гөлдәрҙең торошо насарайыуы дөрөҫ тәрбиәләмәү, сирҙәр йәки ҡортоҡостар тәьҫиренән дә булыуы мөмкин. Был осраҡтарҙа тейешле саралар күрергә кәрәк, бер аспирин ғына ярҙам итмәй. Әммә был халыҡ ысулы үҫемлеккә көс-ҡеүәт өҫтәп ебәрә. Әйткәндәй, аспириндың бер төймәһен сәскәләр торған вазаға ла ырғытырға була. Шул осраҡта улар ике тапҡырға оҙағыраҡ тора.

Аспирин иретмәһен бүлмә үҫемлектәренең тамырына ҡоймаҡса, ә япраҡтарына, сәскәләренә һибергә кәрәк. Иретмәне 1 литр һыуға 2 таблетка аспирин һалып әҙерләргә. Уңайлы булһын өсөн башта дарыуҙы онтарға, шунан саҡ ҡына һыу өҫтәп, килеп сыҡҡан шыйыҡсаны һиптергесле һауытҡа ҡойорға була. Был рәүешле гөлдәрҙе даими рәүештә түгел, ә кәрәк саҡта ғына дауалайҙар.

## ҠЫРМЫҪҠАЛАР ҺӨЖҮМ ИТӘМЕ?

**Бинаға, өйгә, фатирға эйәләгән ҡырмыҫҡанан ҡотолоу ысулы бар һәм ул хатта бәләкәй балалар булғанда ла сәләмәтлеккә хәүеф тыуҙырмай. Ҡырмыҫҡалар айырыуса тәмле тамаҡтар. Шуға был ысул 100 процент һөҙөмтә бирә.**

Бер аҙ емеш ҡайнатмаһы (мәсәлән, ярты стакан), ярты балғалаҡ бор кислотаһы һәм 1 балғалаҡ сүпрә алырға. Бареһын да бергә ҡушып, яҡшылап бутағас, йәйпәк һауытҡа һыларға һәм был бөжәк күпләп күренгән урынға ҡуйырға. Ҡырмыҫҡалар емеш ҡайнатмаһын шатланып ашар, әммә сүпрә һәм бор кислотаһының үлемесле йоғонтоһо арҡаһында бер ни тиклем ваҡыттан һуң ҡырылырҙар. Был әрһеҙ бөжәктәрҙән 1-3 аҙна эсендә тулыһынса арыныраһығыҙ.

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

## ГӨЛБАҘРАН

**Халыҡ медицинаһында гөлбаҙран (ябай пижма) киң ҡулланылған, бөгөн дә уның ярҙамында бауыр, үт ҡыуығын, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шешен, ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын дауалайҙар. Шуныһы ҡыҙыҡ, гөлбаҙран сәскәһе ир-егеттәрҙе һары ауырыуынан дауалағанда тиҙ ярҙам итә, ә бына ҡатын-ҡыҙҙарға был осраҡта ул бөтөнләй килешмәй.**

**Һары ауырыуы.** 1 ҡалаҡ гөлбаҙран сәскәләгеген 1 л ҡайнар һыуға һалырға, һыу быуында 2 сәғәт торорға, һарҡытырға. Ас ҡарынлай төнәтмәне күпме эсә алаһың, шул тиклем эсергә. Көндөң икенсе яртыһында ярты стакандан да күп булмаған миҡдарҙа тағы берҙе ҡабул итергә. Бер көн эсендә 1 литр төнәтмәне тотошлай эсеп бөтөргә тырышмағыҙ.

**Холецистит (үт ҡыуығының шешеүе).** 50 г киптерелгән сәскәне 0,5 л араҡыға һалырға, 2 аҙна төнәтергә. 3 аҙна дауамында көнөнә өс тапҡыр ашарға 20 минут ҡалғас, теүәл 25 тамсы ҡабул итергә.

**Өйәнәк.** 100 г киптерелгән гөлбаҙран сәскәһен 400 мл араҡыға һалырға, 3 көн йылыла төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 30-40 тамсы ҡабул итергә.

**Күрем көслө килгәндә.** Үлән япраҡтары һәм сәскәләренән ҡатышма эшләргә. 1 ҡалаҡ ҡатышманы 2 стакан һыуытылған ҡайнар һыуға һалырға, 4 сәғәт торорға, һарҡытырға. Көнөнә ашар алдынан 2-3 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә.

**Тиреләге яман шеш.** 5 ҡалаҡ киптерелгән сәскәне 0,5 л ҡайнар һыуға һалып, һүрән утта 10 минут ҡайнатырға. 1 сәғәт торорға, һыҙҡытырға. Сылатҡыс ябырға, уны ваҡыты-ваҡыты менән алмаштырып торорға.

**Быуын сыҡҡанда.** 3 ҡалаҡ гөлбаҙран сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт торорға, һыҙҡытырға. Быуын сыҡҡан урынға боҫлама ҡуйырға.

## ШЫРШЫ

**Шыршының йәш ботаҡ остары, өлгөрөп етмәгән тубырсыҡтары, ылыҫы үпкәнең өҫкө өлөшө ауырыуҙары, ҡурылдай астмаһы, бөйөр һәм бәүел ҡыуығы ауырыуҙарын дауалауҙа, быуындар һыҙлағанда ванна рәүешендә ҡулланыла.**

**Һары һыу ауырыуы.** 30 г ваҡланған йәш үрендәләрҙе 1 л һөткә һалып ҡайнатырға һәм 3 тигеҙ өлөшкә бүлеп эсергә.

**Аналыҡ (балаятҡы) полиптары.** Сентябрь айында йыйылған 1 ҡалаҡ ваҡланған ылыҫҡа бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға, бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Бал менән тәмләтеп, көнөнә өс тапҡыр ярты стаканлап эсергә.

**Туберкулез, астма, үпкә шешеүе, бронхит.** Яҙғыһын банкаға 1,5 кг шәкәр ҡомона йәш үрендәләрҙе ҡатлам-ҡатлам итеп һалырға. Иртән торғас бутарға, банканың ауыҙын сепрәк ярҙамында ҡаплап бәйләргә, 10 көн дауамында тәҙрә төбөндә ҡояш аҫтында торорға. Ылыҫы өҫкә ҡалҡасаҡ, һуты һауыт төбөндә ҡаласаҡ. 11-се көндә түгергә, көнөнә 2 ҡалаҡ миҡдарында иртәнсәк эсергә.

**Организмдан тоҙҙарҙы сығарыу.** Кискеһен үк шыршы тубырсығына бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Иртәнсәк төнәтмәнең яртыһын эсергә, тубырсыҡты алып ташларға. Ҡалған ярты стаканын икенсе көнөнә иртән эсеп бөтөрөргә. 30 көнгә - 15 тубырсыҡ кәрәк буласаҡ. 10 көн тұҡталып торорға. Дауаланыу курсын 2 тапҡыр ҡабатларға.

Баш ауыртыуы, инсульт йә паралич, ашҡаҙандың насар аш һеңдереүенән килгән ауыртыныуҙар, бөйөрҙәге ҡом, хроник йүтәл, йыш һуштан яҙыу, нервылар системаһы ҡаҡшау, һары һыу ауырыуы, үпкә сирҙәре көн дә шыршының йәшел тубырсыҡтарын сәй итеп эсеү ярҙамында дауалана.

**Иҫкәртеү:** шыршы ылыҫы төнәтмәләрен эскән осраҡта, уның аш һеңдереү юлы органдары шешенә килтереүе мөмкин булыуын оноторға ярамай. Нефрит, нефроз кеүек бөйөр ауырыуҙары булғанда шыршы дауаһын ҡулланыу тыйыла.

АФАРИН!

# РУХ АТЫБЫҘ...

## һәйкәл булып ҡалҡты



(Башы 1-се биттә).

Гәҙелгәрәй ауылы ағинәйҙәренең фольклор ансамбле сығышы менән башланған сараға Абдрафиҡ хәҙрәт "әл-Фәтиха" һәм " Әл-Ихлас" сүрәләрен уҡып, доға бағышлап фатиха биргәс, асыҡ һауалағы сәхнә түрендә Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, CIOFF президенты Филипп Боссан, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Бөрйән район хакимиәте башлығы Ғәзиз Манапов һәм башҡа ҡунаҡтар күтәрелде.

Әминә Ивнәй ҡыҙы: "Был изге ерҙәр " Урал батыр" эпосы менән бәйле. Донъя кимәлендәге ҡиммәткә эйә ошо рухи хазинаны беҙ киләһе быуындарға тыҡмәй-сәсмәй еткерергә бурыслы. Бөрйән районы хакимиәтенә, ошо эштең башында торған Данир Ғәйнуллинға, башҡорт халҡының хыялын үҙ ҡулдары менән бойомға ашырған скульптор Өлфәт Ҡобағошовҡа рәхмәт.

Аҡбуҙат - ҡанатлы, рухлы, һәр саҡ иреккә, гәҙәллеккә ынтылған башҡорт халҡының образы. Бөгөн республикала барған бөтә донъя фольклориадаһы сиктәрендә Аҡбуҙатҡа һәйкәл асыу - икеләтә байрам, икеләтә ҡыуаныс", -тине.

CIOFF президенты Филипп Боссан үҙ сығышында: "Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә, Әминә ханыма, Бөрйән районы хакимиәтенә рәхмәт - беҙҙе йылы ҡаршы алдылар. Донъя кимәлендәге ошондай саралар милләт, ил-ара татыулыҡҡа, халыҡтарҙың мәҙәни мираҫын һаҡлау юҫығында уңыштарға килтерә. Ошондай сарала ҡатнашыуыма шатмын һәм уны үҙемә мәртәбә һанайым", - тине.

Артабан мөҙҙәт Бөрйән районының иң йәш сәсәндәренә - " Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе малай-ҡыҙҙарға етте. Районда "Урал батыр" эпосын ятлау буйынса уҡыусы һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар конкурсын башлаусы һәм ойоштороусы Роза Ғүмәрова етәкселегендә ҡескенә Айназ Ғиззәтуллин, Зөһрә һәм Асия Манаповалар, Айдинә Кәримовалар килештереп, ролгә инеп тороп героик эпосыбыҙҙан өҙөктәр ятлап ишеттерҙе.

Ат - башҡорттоң ғүмерлек һәм быуаттар һуҙымында һыналған тоғро юлдашы. Атһыҙ башҡорт - ҡанатһыҙ ҡош кеүек ул. Башҡорт саҡ тәпәй баҫҡан улын да атҡа мендергән - ошонан башланған да инде ир-егетлек. Әтек ауылының аҫыл зат вәкилдәре - ат йәнле Баймөхәмәтовтар килгән ҡунаҡтарға, йыйылған халыҡҡа матур йола - тамаша күрһәтте. Районда йәйен - һыбай, ҡыш - саналы аттарҙа ярышып ал бирмәгән Инсур Баймөхәмәтов 4 йәшлек улы Илханды үрәпсеп-бейеп торған атына атландырҙы. " Карасәс" халыҡ фольклор төркөмә ағинәйҙәре атҡа атланған уланға бата-теләк әйтеп фатихаланы...

Район хакимиәте башлығы Ғәзиз Манапов барса халыҡты оло байрам айҡанлы тәбрикләне: "Аҡбуҙат һәйкәле районыбыҙға туристарҙы йәлеп итеп тороусы объект булһын, героик эпостарыбыҙҙың үлемһеҙ геройҙары шулай рухыбыҙҙы күтәреп, күңелебеҙгә сәм, ғәм өҫтәп торһон, эпос һүҙҙәре менән әйткәндә, күңелебеҙҙән яҡшылыҡ китмәһен", - тине һәм ошо данлы һәйкәлдең скульпторы Өлфәт Ҡобағошовҡа район хакимиәтенең Рәхмәт хатын тапшырҙы. Өлфәт Миниәхмәт улын Өфөнән килгән "Аҡбуҙат" гандболсылары ла бүләкләне. Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты З.Байғусҡаров, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире Лариса Абдуллинаның сығышы рух күтәренкелеге өҫтәне. Лариса Хашим ҡыҙының "Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ" тигән шиғырын уҡып ишеттереүе иңдәрҙә Аҡбуҙ ҡанатын үҫтереп ебәргәндәй булды.

Эпостарыбыҙҙа сәсәндәр теле менән данланған, халҡыбыҙҙың рух аты булған Аҡбуҙат һәйкәле янында иҫтәлеккә фотоға төшкәс, Башҡортостандың халыҡ артисы Роберт Юлдашевтың "Курайсы" төркөмө, Өфөнән килгән бейеүсе ҡыҙҙар йыр-бейеү менән сәхнәне бер итте.

Эйе, күҙәүле мунсаҡ ерҙә ятып серемәҫ, ти халыҡ. Эпостарыбыҙ геройы, башҡорттоң ҡанатлы дуҫы, яуҙа - яуҙаш, дандаш, тыныс тормошта - тоғро ярҙамсы, хәрәкәт итеүсән дан сараһы, рухыбыҙҙы күтәрмәләп, сәмебеҙҙе уятып, күңелебеҙҙе дәртләндереп тороусы мифик образ - Аҡбуҙат халыҡ хыялы, скульптор эшмәкәрлеге һынланышында буҙ ат булып Йылҡысыҡҡанкүл ярына мәңгелеккә баҫты... Беҙҙең героик үткәнебеҙгә, эпослы халҡыбыҙға, һынмаҫ рухыбыҙға һәйкәл-ҡалҡҡан булып...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

*УӘТ, ӘЙ!*

# ҠУРАЙҒА ҒАШИҠ БУЛҒАН

**Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Хорватиянан йәш музыканттың хыялын бойомға ашырҙы.**



Бала саҡтан музыка ҡоралдары эшләү менән шөғөлләнгән Михаэл Вечкович Башҡортостан буйлап концерт туры барышында ҡурай менән ҡыҙыҡһына башланы. Был хәлдең дауамы ла бар. Хәҙер ул традицион башҡорт уйын ҡоралына эйә булды һәм хатта унда уйнау буйынса оҫталыҡ дәресен алды. 21 йәшлек Михаэл Вечкович Фольклориадаға Хорватиянан килгән, ул "Бушовец" ансамблендә сығыш яһай - ҡулдан яһалған һорнайҙа уйнай. Егет бала саҡтан ҡулдан эшләнгән музыка ҡоралдары менән мауыға, был шөғөлө уға атаһынан күскән.

Фольклориада көндәрендә уларҙың коллективы Яңауылда сығыш яһаған һәм егет унда тәүге тапҡыр ҡурай моңон ишеткән. Музыкант таң ҡалған һәм буш ваҡыты булғас та ойоштороусыларҙан уйын ҡоралын күрһәтеүҙәрен, унда уйнарға өйрәтеүҙәрен һораған. Михаэлға ҡурай һәм остаз тиҙ табылған - Яңауылдың "Хаят" халыҡ театры режиссёры теләк белдергән. Беренсе тапҡырҙан барыһы ла килеп сыҡмаған, ләкин оҫта үҙенең уҡыусыһын "өмөтлө" тип баһалаған.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛЛЫНЫҢ ҠӘҘЕРЕ...

## ахмаҡ янында беленер

Йыйын йондоҙ йыйылһа ла - яҡтылығы айҙай юҡ, ылғы ярлы йыйылһа ла - яңғыҙ өйлө байҙай юҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күп дарыуҙарҙың файҙаһыҙ икәнен аңлаған врач ҡына ысын врач.

**(Бенджамин Франклин).**

Хаталарҙан азат кеше тормошта бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәк.

**(Иоганн Гете).**

Алданыуҙан ҡурҡып йәшәгәндәр бер ваҡытта ла хәҡиҡәткә юлды таба алмаҫ.

**(Е. Кайоран).**

Үҙ һүҙеңдә тороуҙың иң яҡшы ысулы... ул һүҙҙе бөтөнләй бирмәү.

**(Наполеон Бонапарт).**

Донъяны үҙгәртеп була... кешенең үҙен үҙгәртеп кенә.

**(Фарсы мәҡәле).**

Бөтә кеше лә үҙе тураһында юғары фекерҙә, фекере ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, үҙе түбәнерәк төшә бара.

**(Бальтасар Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауылда бер туған ике ағай-эне йәшәгән. Бер-береһенә ни тиклем генә оҡшаш булмаһындар, уларҙы айырып торған нәмәләр ҙә булған. Мәҫәлән, кесеһенең тормошта барыһы ла көйлө барған, икенсеһен, өлкәнен, гел генә уңышһыҙлыҡтар һағалап торған.**

**Бер саҡ эне кеше ағаһына килә һәм уның бар эшләгәне уңышһыҙ килеп сыҡҡанын аңлап, шундай һорау бирә:**

**- Ағай, һин үҙеңдең тормошоңдо үҙгәртеү, эштәреңдә көйләү өсөн ниҙәр ҡылаһың?**

**- Көн-төн эшләйем дә эшләйем... - тип яуаплай ағай кеше.**

**- Ә хеҙмәтең һиңә шатлыҡ килтерәме һуң?**

**- Юҡ, шатлыҡ килтермәй һәм һәр эште башҡарыу ауырға тура килә, - ти ағай кеше башын түбән эйеп.**

**- Ә һин үҙ эшеңдән шатлыҡ эҙлә, - ти энеһе. - Хәтереңдәме, бала саҡта һин балсыҡтан төрлө һынлар яһарға ярата инең? Шунан башла ла: ихатаңды балсыҡ һынлар менән биҙә...**

**Бер йылдан ағай менән эне тағы осрашалар. Энеһе ағаһынан:**

**- Хеҙмәтеңдә шатлыҡ табырға өйрәндеңме, ағай?**

**- Эйе, шатлыҡ бар ҙа ул, әммә барыбер уңышһыҙлыҡ һағалап тик тора... - тип яуаплай ағаһы.**

**- Эш эшләгәндә нимә тураһында уйлайһың һуң?**

**- Ана шул миңә һөжүм итәсәк уңышһыҙлыҡтар тураһында инде... - ти ағай кеше... "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
16 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 778

1 582218 911006 21029